ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 апрель (алағарай) 2019

№ 14 (848)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Берҙәмлек менән көслөбөҙ... таҙалыҡ өсөн көрәштә 5



Данлы юбилейға... һынауҙар аша яуланған бүләк 6



Башҡорт телен яҡларға... бергәләп булдырабыҙ! 8-9



Театрға нигеҙ һалыусы 11



ТВ-программа 14

***Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шуның өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ. Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бер кемгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә.***

***Ризаитдин нәсихәттәренән.***

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ТАЛАПСАН ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## аңлаусан да була беләйек

**Башҡортостан үҙенең 100 йыллығын билдәләне. Бер быуат үҙенә әллә күпме хәл-ваҡиғаны һыйҙырған - яҡшыһы ла, яманы ла булған. Бөгөнгө көндә республикабыҙ үҙен алдынғылар рәтендә күрһәткән төбәктәрҙең береһе. Ләкин хәл итәһе мәсьәләләрҙең күплеген инҡар итеп булмай. Үҙемдең күҙлектән сығып, тәүсиратта хәл итә торғандарын билдәләп үткем килә.**

Иң беренсеһе: республика халҡы ситкә эшкә китмәһен өсөн үҙебеҙҙә шарттар, эш урындары булдырырға кәрәк. Хәҙер, ҡыҙғанысҡа күрә, ир-егеттәр генә түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа өйөнән, балаларынан ҡырҙа аҡса эшләп йөрөргә мәжбүр. Ошо күңелде иң әрнеткән күренеш бөгөнгө көндә. Ошо көндәрҙә юбилей байрамында булырға тура килде. Танышымдың ире вахта менән эшләй. Уның: "Өйләнешкәнгә - 10, йәшәгәнгә 5 йыл", тип әйтеүендә бөгөнгө көндә күп ғаиләләргә хас булған ысынбарлыҡ ярылып ята.

Икенсенән. Хәҙер ҙур иғтибар эшҡыуарлыҡҡа йүнәлтелгән. Уларҙың эшмәкәрлеге киң яҡтыртыла, йәштәргә өлгө итеп күрһәтелә. Ауыл хужалығы өлкәһенә лә ошондай уҡ иғтибарҙы арттырыу мөһим. Ошо тармаҡта эшләүселәрҙең тормошо хаҡында үҫеп килгән быуын бер нәмә лә белмәй тиерлек. Элек үҙ эшенең оҫталары, ҡул хеҙмәте менән йәшәүселәр ҡаш өҫтөндә булһа, бөгөн артистар, алыпһатарҙар, үҙҙәрен теге йәки был өлкәлә ҙур белгес итеп һанаусыларҙың йәшәйеше өҫкә күтәрелә. Нәҡ уларҙан өлгө ала балалар, йәштәр һәм шуға ынтыла ла. Мәләүез районында йәшәүсе һәм бар ғүмерен колхоз-совхоз эшенә бағышлаған оло ғына бабай: "Икһеҙ-сикһеҙ баҫыуҙар тәрбиәһеҙ ята. Ваҡытында бойҙай, арыш, көнбағыш һәм башҡа культуралар үҫтерә инек күкрәтеп, бөгөнгө көндә ошо ерҙәрҙең ҡулланылмауын күреп, йөрәк әрней. Беҙҙе ашатҡан, тимәк, йәшәткән ергә бындай ҡараш булмаҫҡа тейеш тә бит. Йәштәр бик әҙ ҡыҙыҡһына шул хәҙер был өлкә менән", - тип әсенеп һөйләп ултырҙы. Ысынлап та, ауыл хужалығы уҡыу йорттарын тамамлаған йәш белгестәрҙең күбеһе нисек тә булһа ҡалала ҡалырға тырыша. Ошо йүнәлештә лә ниндәйҙер һынылыш кәрәк беҙгә, йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырырлыҡ өлгөләр күрһәтеү, уларға ауылда йәшәр һәм эшләр өсөн шарттар булдырыу буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып барыу мөһим.

Өсөнсөнән. Һуңғы ваҡытта власть органдарына, район хакимиәтен етәкләргә йәштәрҙең килеүе шатландырҙы. Яңы ҡараш, уларҙағы энергия, көс район-ҡалалар һәм тотош республика өсөн файҙалы буласағына шигем юҡ. Ләкин йәшлектең бер үҙенсәлеге бар. Йәшлеккә үҙһүҙлелек, максимализм, ҡайһы саҡта артыҡ ҡыйыулыҡ, тотҡан ерҙән һындырыу кеүек үҙенсәлектәр хас. Шуға күрә йәш етәкселәр "Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫ", тигән мәҡәлде онотмаһалар һәм халыҡ менән эш иткәндә, бигерәк тә аралашҡанда ҡулланһындар ине, тигән теләгемде еткерәм. Ололарҙың һүҙенә лә ҡолаҡ һалып, тәжрибәле ағай-апайҙарығыҙ менән кәңәшләшеп эшләһәгеҙ, республикабыҙ өсөн файҙалы етәксе булырһығыҙ.

Дүртенсенән. Беҙҙең киләсәк - балалар. Уларҙың мәнфәғәтен ҡайғыртыу, аҡыллы, физик һәм рухи яҡтан һау булып үҫеүҙәре беҙҙең, ололарҙың, ҡулында. Бөгөнгө көндә балаларҙың физик яҡтан көсһөҙ булыуы, төрлө ауырыуҙарға тиҙ бирешеп барыуы күңелде ҡыра. Телефонда ғына бокс менән шөғөлләнеп, ҡул көсөн, таҫыллыҡты арттырып булмай шул. Элекке ваҡытта ҡыш буйы беҙ саңғыла йөрөп сыға инек, ә хәҙер бәләкәй саңғысылар бөтөнләй юҡ тиерлек. Шуға күрә һәр ҡалала, ауылда бушлай эшләгән бәләкәй генә булһа ла спорт залдарын булдырыу һәм уларҙың эшмәкәрлеген көйләү яйы табылһа, бик урынлы булыр ине.

Бишенсе фекерем шул. Юлдарҙы төҙөкләндереү эштәре һәр ваҡыт бөтә төбәктәр өсөн дә актуаль булып ҡала килә. Ләкин ҡайһы бер юлдарҙы йыл һайын эшләйҙәр, ә ниндәйҙер райондағы юлдар тиҫтә йылдар дауамында ремонт күрмәй. Ошондай ғәҙелһеҙлек яҡын киләсәктә бөтөрөлөр, тип ышанам. Шулай уҡ бер тапҡыр юлды сифатһыҙ төҙөкләндергән ойошманы башҡаса бындай тендерҙарҙа бөтөнләй ҡатнаштырмаҫҡа кәрәк. Ә конкурста ҡатнашмаһа, уның эше лә, тимәк, килеме лә булмаясаҡ. Ошо рәүешле бер-ике ойошманы "уҡытҡанда", башҡаларына ла үҙ эшенә яуаплы ҡарар өсөн һабаҡ булыр ине.

Ябай ғына проблеманың осона сығыу өсөн байтаҡ ваҡыт талап ителә, ә тотош республика өсөн хас булған мәсьәләләрҙең осона сығыу өсөн бер ай түгел, йылдар үтеүенә лә аптырарға түгел. Шуға күрә һәр кемебеҙ етәкселеккә ҡарата талапсан ғына түгел, ә аңлаусан да була алһаҡ ине.

**Бикйән НИҒМӘТУЛЛИН.**
**Йылайыр районы.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҠАҒЫҘҒА БАҪЫЛҒАН...

## ышандыра




**Тормоштағы ҡайһы бер ваҡиғалар айырым кеше йәки тотош дәүләт, халыҡ, милләт өсөн нәҡ үҙ мәлендә була. Яратып уҡыған гәзитем "Киске Өфө"нөң нәшер ителә башлауын да нәҡ ошондай ваҡиғалар рәтенә индерәм. Был баҫма үҙ ваҡытында милли матбуғатҡа яңы һулыш бирҙе һәм әле лә ошо юғарылыҡтан төшмәй.**

(Дауамы 3-сө биттә).

12+

***✓ Стелаға нимә төшөрөргә тип күп уйланым. Уҡытыусым һәм дәүләт муниципаль идаралығы кафедраһы етәксеһе Илшат Шәүәли улы Рысаев мемориалда ошо Килешеүҙең титул битен һүрәтләргә кәңәш итте.***



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# КАДРҘАРЫБЫҘ НИНДӘЙ?

**"Барыһын да кадрҙар хәл итә", тигән лозунг бер ваҡытта ла актуаллеген юғалтмай - был хәҡиҡәт. Республикала кадрҙар әҙерләүгә бөтөнләй үк иғтибар бирелмәй тип әйтеп булмай, Башҡортостан Республикаһы Башлығы эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында ла һәр ваҡыт кадрҙарҙың белемен камиллаштырыу, һөнәри оҫталығын үҫтереү ниәтендә күп эштәр башҡарыла. Шулай уҡ "Республика кадрҙары" тигән махсус сайт та бар, академия эргәһендә "Республика тест буйынса һынау үҙәге" эшләй - кадрҙарҙың белем кимәлен тикшереп торабыҙ, кадрҙар резервы ла бар.**

Бер яҡтан ҡарағанда, бөтә нәмә лә эшләнгән һымаҡ. Әйкенсе яҡтан, ысынлап та, кадрҙар бик йыш алышына, хеҙмәт бурыстарын тейешле кимәлдә үтәй алмай китеүселәр күп. Үҙ тәжрибәмдән сығып шуны әйтке килә: беҙ элек тәүҙә резервта тора инек, комсомол булған заманда йәш кешегә төрлө эштәр йөкмәтеп ҡарайҙар ине, яйлап үҫтереп, комсомол комитетынан партия комитетына күсергә мөмкинлек бирә торғайнылар, һуңынан хакимиәттәргә эшкә күстек. Быуна шундай тотороҡлоҡ, күсәгилешлелек тигән нәмә юғалып ҡалды бөгөн. Шул һөҙөмтәлә кәрәкле кимәлдә әҙерлекле кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ, йыш алышыналар һәм ҡайһы берҙәре эш тә күрһәтеп өлгөрмәй. Дәүләт органдарында практика үткән бер магистранттың тикшеренеү һөҙөмтәһе аптыраткайны: бер дәүләт органында ярты йылда ике тапҡыр бөтә кадрҙар корпусы алышынған. Был ҙур проблема.

Биш-алты йыл элек кенә беҙҙең академияла бөтә етәкселәр уҡый торғайны: хакимиәт башлыҡтары, дәүләт хеҙмәткәрҙәре, муниципаль берәмектәр етәкселәре. Хәҙер бәләкәй вазифалы белгестәр уҡырға килә, юғары органдарҙа эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең белемен камиллаштырыу эше һүлпәнәйеп ҡалды. Ә бит 2016 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡабул иткән "Дәүләт граждандар хеҙмәтен үҫтереүҙең төп йүнәлештәре тураһында" тигән указына ярашлы, дәүләт органдарында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең төп юғары белеменән тыш, дәүләт һәм муниципаль идара буйынса ла дипломы булырға тейеш. Ләкин республикала әлеге көнгә тиклем был талаптар тейешенсә үтәлмәй. Халыҡ хәҙер төрлө өлкәлә ныҡ белемле, үҙ хоҡуҡын да яҡшы белә һәм уның талаптарын тейешле кимәлдә үтәй алырлыҡ белемле етәкселәр кәрәк дәүләткә. Был йәһәттән Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировҡа өмөт баглайым, үҙе кеүек алдынғы ҡарашлы, тәжрибәле, халыҡ мәнфәғәтен ҡурәткән, намыҫлы таҙа булған етәкселәрҙе бөтә дәүләт органдарына ла, район хакимиәттәренә лә эшкә йәлеп итер, тип ышанам. Әле ул үҙе күптән һынаған кешеләрҙе республикаға килтерҙе, был насар түгелдер һәм һуңғы ваҡыттағы үҙгәрештәр үҙен аҡлар, тип уйлайым. Ғөмүмән, етәксе органдарҙа бөтәһенә лә тигеҙ ҡараған, һөнәри яҡтан тәжрибәле, компетентлы, намыҫлы белгестәр эшләргә тейеш. Урындағы бөтә проблемалар менән танышып сыҡҡас, Радий Фәрит улы кадрҙарҙы үҫтереү буйынса ғына программа ҡабул итеп ҡалмаҫ, әшулай уҡ ауылдарҙағы социаль мәсьәләләргә иғтибар итеп, перспектив һәм ҙур стратегик пландар төҙөр, махсус программаларҙы тормошҡа ашырыу буйынса эш башлар, тип ышанабыҙ.

**Фәниә ДӘМИНДАРОВА,**
**Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы профессоры, философия фәндәре докторы.**

ИҒТИБАР!

**2019 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, гәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районтарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була.**
**Хаҡтар шулай: 50665 индексылы "Киске Өфө"гә - 624 һум, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тин; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары өсөн - 563 һум 40 тин, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тин.**

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




● Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек. Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел тәшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙҙа. Икенсенән, уҡыусыларыбыҙға даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары тәҡдим итеп тороуыбыҙ хаҡында ла беләһегеҙ. Был юлы гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер **"Башкиры"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ..."; Фәүзиә Усманованың "Бөрйән йөрәге" (Беренсе китап; Икенсе китап), "Башҡорт халыҡ ижады"ның XV томы (мөнәжәттәр), Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" кеүек матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы** менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә гәзит аша ҡотлау өсөн **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Баш ҡала халҡы йәшәгән йорто эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыларында баҫмабыҙға 522 һумға яҙыла ала.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 312 һум.

● Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 312 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция хеҙмәте үҙе килтереп бирәсәк.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

● Республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә 150 һумға электрон форматта яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"гә шылтыратып, тулыраҡ мәғлүмәт алырға мөмкин. Телефон: 8(347) 253-25-44.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru "Бәйләнеш" социаль селтәрендә - vk.com\kiskeufa төркөмө.

**Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең еғәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. "Киске Өфө"гә иң күп яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

**Әйҙәгеҙ, хөрмәтле йәмәғәт, "Киске Өфө"гә лә берҙәм генә яҙылып алайыҡ. Беҙҙең тираж баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон ғына түгел, ә уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, шулай уҡ милләтебеҙҙең аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе билдә икәнен онотмайыҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

АФАРИН!

# МАТУР ӨЛГӨ КҮРҺӘТЕП...

**Башҡорт дәүләт хеҙмәте һәм идаралығы академияһы студенты республиканың 100 йыллығына үҙенсәлекле бүләк әҙерләгән.**

Уҡыу йоротоноң 2-се курс студенты Радик Хибәтуллин үҙ матди сараларына 450 килограмлыҡ гранит стела яһатҡан. "Башҡортостанға нигеҙ һалынған көн - республикала йәшәүсе һәр кеше өсөн ҙур байрам. Был датаны мәңгеләштереү идеяһы менән күптән яна инем. Уйлап ҡына ҡарағыҙ - беҙ илдәге тәүге автономиялы республика! - ти Радик. - Стелаға нимә төшөрөргә тип күп уйланым. Уҡытыусым һәм дәүләт муниципаль идаралығы кафедраһы етәксеһе Илшат Шәүәли улы Рысаев мемориалда ошо Килешеүҙең титул битен һүрәтләргә кәңәш итте".

1,5 метр бейеклегендәге гранит стела әлегә Башҡортостандың милли музейында һаҡлана. Тиҙҙән был мемориалдың урыны тураһындағы мәсьәлә хәл ителәсәк.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров өләшләтә төҙәлөштә ҡатнашыусыларҙың инициативалы төркөмдәре вәкилдәре менән осрашты. Осрашыуҙа ағымдағы хәл һәм "Миловка паркы", "Көмөш шишмә", "Башҡортостан сәскәләре" торлаҡ комплекстары, "БашИнвестДом", "Меркурий", "Төҙөүсе" (Өфө), "Интеграл" (Нефтекама), "Башстрой" (Стәрлетамаҡ) йәмғиәттәре төҙөгән йорттар өләшсәләренең боҙолған хоҡуҡтарын тергеҙеү мөмкинлектәре тикшерелде, тип хәбәр итә республика Башлығының матбуғат хеҙмәте.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 14-15 июндә "Урал арьяғы-2019" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйын уҙғарыу тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Төбәктә ҙур форум "эшҡыуарҙарҙың әүҙемлеген күтәреү һәм уңайлы инвестиция мөхитен булдырыу" өсөн ойошторола, тип билдәләнә документта. "Урал арьяғы-2019" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйын үткәреү буйынса саралар планын 15 апрелгә тиклем әҙерләү һәм раҫлау күҙаллана

✓ Юлай Ильясов Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Ул ошо аҙнанан район башлығының иктисад, финанстар һәм инвестициялар буйынса урынбаҫары вазифаһын биләй ине. Район советы ултырышында муниципалитеттың элекке етәксеһе Әхәт Ҡотләхмәтовтың отставкаһы ҡабул ителде. Юлай Ильясов 1969 йылдың 10 июнендә Ейәнсура районының Юнай ауылында тыуған. Һуңғы 7 йылда "Башнефть" нефть компанияһында эшләгән.

✓ Азат Ғәлин Башҡортостан Республикаһы Башлығының Дәүләт-хоҡуҡ идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Радий Хәбиров ҡул ҡуйған икенсе бойороҡ менән Альбина Воробьёва, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, Башҡортостан Республикаһы Башлығының Дәүләт-хоҡуҡ идаралығы етәксеһе вазифаһынан бушатылды.

✓ Радий Хәбировтың тағы ла бер бойороғо менән Искәндәр Әхмәтвәлиев - Башҡортостан Башлығының Муниципаль берәмектәр менән үҙ-ара эш итеү идаралығы етәксеһе, Альбина Воробьёва республика Башлығының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙағы тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнде.

✓ *Өр-яңы йорттарыбыҙ өсөн дә тырышып-тырышып нисә йыл хәҙер "капремонт" түләп киләбеҙ бит... Ә ул аҡса ҡайҙа ята, кем кеҫәһенә китә - бер Алла ғына белә.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# "АУЫЛҒА КҮСӘМ!"

**"Фатирыма студенттар индерәм дә, ауылға китәм,- тип хәбәр һалды бер көн күршем.- Квитанциялар килер ваҡыт етһә, йөрәк дарыуын алдан әҙерләп ҡуя башланым. Башҡа түҙер әмәл дә, ҡала йортонда йәшәргә теләк тә ҡалманы. Ә иң яҡшыһы - фатирҙы һатып, ауылдан өй алыу..."**

Егерме йылдан ашыу бер туғандар кеүек булып бөткән ҡәҙерле күршемдең был һүҙҙәренә аптырамаНым: һуңғы ваҡыт шундайыраҡ уйҙар үҙемдең дә башҡа инеп сыға башлағайны инде. Ысынлап та, һәр ағыуға ҡаршы дауа бар, ти бит аҡыллы баштар. Юғиһә, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн һаман юғары үрләй барған был хаҡтар ағыуҙан яман ҡанды боҙа, бер ни ҡылыр әмәл юҡ: үҙҙәре теләгән "түңәрәк кенә" сумманы яҙып ебәрәләр ҙә кәрәгенсә шаҡарып түләтеп тә алалар. Бынан алдараҡ электр энергияһы өсөн түләү тарихы үҙе бер "граждандар һуғышы"н хәтерләтеп, бер аҙ онотола биргәйне, хәҙер "БашРТС" тигән компания ҡулланыусы кеҫәһен йолҡҡолау буйынса стихиялы баҙар ойоштороп ебәрҙе. Был ресурстар ойошмаларының ҡулланыусы менән тура килешеүгә күсеүе тип атала. БашРТС тәжрибә рәүешендә эште Черниковка менән Сипайлово биҫтәһенән башларға булды һәм ошо районлар халҡы Яңы йыл ҡотлауҙары менән бергә почта йәшниктәренән әлеге "түңәрәк кенә" суммалар яҙылған квитанциялар ҙа килтереп сығарҙы һәм, әлегесә, корвалол менән валерьянкаға тотондо... Ләкин улар еңеллек килтермәне. Ҡайҙандыр алынып түләү квитанцияларына сәпәлгән был ҡатмарлы һандар буйынса асыҡлыҡ индереү теләге уларҙың контораһына барып ингәс тә юҡҡа сыға, сөнки иртәнге 6-нан барып сират алмағас, офис ишегенә яҡын барырлыҡ та түгел. Аңын-тоңон белмәйенсә, мин туғыҙынсы яртыла барып ингәйнем, бышлығып бөткән сират осонда ла хатта ун биш минут та тора алманым, тиҙерәк саф һауаға ашыҡтым. БашРТС-ты әйтәм, кеше хаҡында көналдын хәстәрлек күреп тә ҡуйғандар бит әле: ялыу менән ябырыласаҡ халыҡ ағымын күҙаллап, Сипайловола бер бүлмәле ярайһы тынсыу офис та асып ебәргәндәр, тик бына уның адресын "Ашығыс ярҙам" станцияһына хәбәр иттеләрме, юҡмы икән. Юғиһә, яңы йылдан бирле уның ишектәрен штурмлайҙар: әле булһа яҡын барырлыҡ түгел, тиҙәр. Шылтыратыуҙан файҙа юҡ. Теге саҡтағы электр энергияһы эпопеяһындағыса, бында ла иҫтән яҙып ҡолаусы "ҡорбандар" һаны берәү генә булмаҫтыр.

Ҡулланыусы кеҫәһен ресурс хужалары ана шулай һәр береһе үҙ яғына тартҡыслай, йолҡҡолай, талай - нисек теләй, шулай ҡылана, тик бында тикшереүсе, тәртип булдырырға ынтылыусы бер ниндәй надзор органдары юҡ - шуныһы аптырата. Ә бит даими алдашыу, урлашыуҙары өҫтөнә, тап ошондай "буйраҡтан" файҙаланып та әллә күпме "навар" яһай икән әлеге ресурс хужалары! Был турала бер ни йәшереп тормайынса, ап-асыҡ итеп, ниһайәт, яңыраҡ ҡына НТВ каналына интервьюһында Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт етәксеһе Игорь Артемьев белдерҙе. Күпселек халыҡ коммуналь хеҙмәттәргә ике тапҡырға арттырыбыраҡ түләй, тине ул. Был Рәсәй төбәктәренең дүрттән өс өлөшөнә тура килһә, ҡалған бер өлөшө, киреһенсә, түләп еткермәй икән. Артемьевтың һүҙҙәренсә, коммуналь хеҙмәттәр буйынса тариф хаҡтарындағы быңдай айырмалыҡтар 54 тапҡырға барып етеүе лә ихтимал. Бындай хәлдең сәбәбен тикшерә башлаһаң, унда ниндәйҙер бер юғары чинлы түрәнең йә булмаһа губернаторҙың улы ултырыуы асыҡлана, тип дауам итә ФАС етәксеһе әңгәмәһендә. Һәм улар тейешле төбәк "каналдары" аша үҙ "эштәрен" яйға һалып алған. Бындай "коммуналь монстрҙар"ға граждандар күптән бирле икеләтә арттырып түләй, ә улар был аҡсаны үҙ эштәренә һала: рестораңдар, үҙҙәре өсөн ял йорттары, һунарсылыҡ биләмәләре тота. Илдә коммуналь тарифтар өлкәһендәге хәлдәрҙе "башынан алып аяғына" баҫтырырға, йәғни тарифтарҙы көйләү нигеҙҙәре тураһында закон ҡабул итергә кәрәк, ти И.Артемьев.

Уның һүҙҙәрен Дәүләт Думаһы депутаты, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Сергей Пахомов та күтәреп алды, ләкин ул, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙы кәметеү өсөн был өлкәгә кәмендә 4-6 триллион аҡса һалырға кәрәк, тигән өҫтәмә проблема килтереп ҡуйҙы. Хәйер, беҙҙә бит шундай туҙға яҙмаған тәртип: бер проблеманы хәл итеү өсөн тағы бер йәки ике, өс... проблемаларҙы хәл итергә кәрәк булып сыға. Ә бына Ульяновск өлкәһе губернаторы Сергей Морозов бер ниндәй проблемаларға ла һылтанып тормаған: ул туранан-тура ресурс хужалары - урындағы монополистарға ҡаршы көрәш асҡан. "Ошоғаса бындай хәлдең булғаны юҡ ине, - тип яҙа "Комсомольская правда" гәзите (12.03.2019), - Ульяновск өлкәһе властары ошо йылдан йылылыҡҡа, энергияға һәм һыу тәьминәтенә хаҡтарҙы күтәреүҙе тыйып, монополистарға асылда һуғыш иғлан итте..." "Мин яҡындағы йылдарҙа электр энергияһына тарифтарҙы күтәреүҙе тыям һәм тәьминәтселәр менән судлашырға ла әҙермен", - тип белдерҙе губернатор С.Морозов үҙенең ошо хаҡтағы сығышында һәм монополистарҙы үҙ проблемаларын ҡулланыусылар елкәһенә ауҙарыуҙа ғәйепләне. "Предприятие үҙ проблемаларын ҡулланыусы елкәһенә һалмай, ысынында иһә, проблема берәү - электр энергияһы өсөн ваҡытында иҫәпләшмәү һәм бурыстарҙың йыйылып китеүе", - тип яуаплай быға "Ульяновскэнерго". Алыш ни менән барып бөтөр - әйтеүе ҡыйын, ләкин был диалогтан шул аңлашыла: коммуналь хеҙмәттәр өсөн йылдар буйы бер тин түләмәй рәхәтләнеп йәшәгән оятһыҙ әҙәмдәрҙең бурысы ла әлеге намыҫлы ҡулланыусы елкәһенә төшә икән шул. Халыҡты коммуналь ресурстар менән тәьмин итеүселәр бурыслылар менән мөнәсәбәттәрен "Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәүселәр тураһында" закон нигеҙендә көйләргә бер ҙә атлығып тормай, хатта был йүнәлештә ҡыл да ҡыбырҙатмай, сөнки ябай түләүсенең өнһөҙ ризалығынан файҙаланып, тарифтарҙы күтәреү юлы менән юғалтыуҙарҙы барыбер бишләтә ҡайырып ала, күрәһең. Унан ҡала бурыслыларҙы баштарынан һыйпап, амнистия иғлан итеү, яҙаһыҙлыҡ, әлбиттә, ҡайһы бер оятһыҙҙарҙы хаттин ашыуға, паразитлыҡҡа килтереп еткерә. Тарифтарҙы көйләү буйынса закон ҡабул иткәндә мәсьәләнең ошо яғы ла ҡаралырға тейештер.

Әинде бер проблеманы хәл итеү өсөн икенсе, өсөнсө проблемалар килтереп сығарыусылар әле үк аҡса юҡлыҡҡа һылтана һәм тарифтарҙы көйләү өсөн әле "иләнмәгән-һуғылмаған" аҡсаны Рәсәйҙең хәҙер инде сереп бөткән инженер-коммуникация селтәрҙәрен яңыртыуға йүнәлтмәксе. Гонаһ шомлоғо, бында ла берәй "капремонт" статьяһы уйлап сығара күрмәһендәр инде! Өр-яңы йорттарыбыҙ өсөн дә тырышып-тырышып нисә йыл хәҙер "капремонт" түләп киләбеҙ бит... Ә ул аҡса ҡайҙа ята, кем кеҫәһенә китә - бер Алла ғына белә. Ярай ҙа Владимир Ильичтың тыуған төйәгендә монополистарға ҡаршы башланып ҡына торған көрәш осҡоно башҡа төбәктәрҙе лә ялмап алһа...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ҠАҒЫҘҒА БАҪЫЛҒАН...

## ышандыра

**(Башы 1-се биттә).**

Беҙ демократик йәмғиәттә йәшәйбеҙ. Шуға күрә халыҡ власть органдарына үҙенең һүҙен теләгән ваҡытта еткерә алыу мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Гәзиттә күптән түгел барлыҡҡа килгән "Әйтер һүҙем бар" рубрикаһы аша әллә күпме кеше теге йәки был ваҡиғаға ҡарата үҙ фекерен белдереп өлгөрҙө һәм уй-теләктәрен еткерҙе. Күптәр өсөн актуаль булған мәсьәләләрҙе күтәреүсе гәзит уҡыусыларға ла, уларға майҙан биргән редакцияға ла рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ.

Яҡты күңелле һәм һәр саҡ ниндәйҙер ниәттәр фонтаны урғылып торған кешеләр була. Улар менән осрашҡандан һуң тирә-яҡ нурға сумған кеүек яҡтырып китә. "Киске Өфө"нө шундай кешегә оҡшатамын. Гәзит үҙ биттәрендә негатив фекергә, яманлыҡҡа, көйһөҙлөккә урын бирмәй. Бындағы мәҡәләләр йәшәйешебеҙҙең ыңғай яғын яҡтыртыуы, оптимистик рух менән һуғарылыуы, ошондай уҡ кешеләрҙең тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында мәғлүмәт биреүе менән оҡшай. Шулай уҡ гәзит биттәрендә әленән-әле яңы рубрикалар асылыуы ла уны уҡымлыраҡ итә.

Башҡа гәзиттәрҙә, ғәҙәттә, тотош республикаға ҡағылышлы яңылыҡтар урын ала. Ә "Киске Өфө"лә нәҡ баш ҡалала барған хәл-ваҡиғалар тураһында, Өфөләге яңылыҡтар хаҡында уҡып белергә була. Бөтә республиканы берләштереп тороусы баш ҡала тормошо, ысынлап та, ошолай тулы һәм йөкмәткеле сағылдырылып торорға тейеш тә. Баҫманы баш ҡалала барған тормошто күҙәтеп барырға бөтә мөмкинлектәр биргән тәҙрәгә тиңләргә була.

Ҡайһы берәүҙәр, йәнәһе лә, хәҙер баҫма гәзит-журналдарҙың кәрәге юҡ, тип фекер йөрөтә. Ләкин мин быны менән төптө килешмәйем. Мәҫәлән, интернетта иғтибарҙы бүлеп, бер туҡтауһыҙ йылҡылдап сығып торған рекламаны "еңергә" тырышып, ниндәйҙер яңылыҡ менән танышыу йәки мәҡәләне уҡыу бөтә кәйефте бөтөрөргә мөмкин. Ә ҡағыҙға баҫылғанды яйлап, албырғамай, бөтә "тәмен" тойоп уҡып сығырға була. Йөрөп-йөрөп, фекер туплап, күпмелер ваҡыттан тағы ла күҙ йүгертеп сығыу үҙе бер кинәнес бирә. Әйткәндәй, күптән түгел бер гәзиттә ғалимдар уҙғарған тикшеренеүҙәр тураһында уҡыным. Унда әйтелеүенсә, аҡыллы, бай, уйлай белеүсе, эшсән кешеләр хәҙер интернеттағы мәғлүмәткә ышаныуҙан туҡтап, аҡҡа ҡара менән яҙылғанды, йәғни гәзит-журналдарға, өҫтөнлөк бирә икән. Быға ышанырға була, сөнки халыҡ интернеттағы мәғәнәһеҙлектән, алдаҡтан, ҡаралыҡтан арыны. Шуға күрә оҙаҡламай барыһы ла кире баҫма матбуғат һымаҡ классикаға әйләнеп ҡайтасағына шигем юҡ.

Аҡыллы, интеллигент, ижади баҫмаға артабан да барған юлдарынан тайпылмайынса, беҙгә кәрәкле һәм файҙалы булып йәшәүен теләйем.

**Сәлих СОЛТАНОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалды. Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы ултырышында уның отставкаһы ҡабул ителде. Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин Хәйҙәр Вәлиевтың республика Башлығы хакимиәтенә эшкә күсеүе һәм төп идаралыҡтарҙың береһен етәкләүе тураһында һөйләне. Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе вазифаһын республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы башлығы урынбаҫары Марат Ғәҙилов башҡара.

✓ 1 апрелдән пенсионерҙарға социаль пенсиялар 2 процентҡа индексациялана. Саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәт үткән хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың, радиация һәм техноген һәләкәттәрҙә зыян күргән граждандарҙың дәүләт пенсиялары, шулай уҡ социаль пенсияларҙың үҫеүенә бәйле булған башҡа түләүҙәр арта. Республиканың 101 мең пенсионерына, шул иҫәптән социаль пенсия алған 93 мең пенсионерға арттырылған пенсия түләнергә тейеш

✓ Мотлаҡ пенсия страховкалауының страховка таныҡлыҡтары (СНИЛС) электрон аналогтарға алыштырылды. Хәҙер кемдәр страховкалана йәки теркәлә, уларҙың барыһына ла иҫәп номеры ғына асыла. Рәсәй Пенсия фондында билдәләүҙәренсә, үҙгәрештәр пенсия тәьминәтендә бер нисек тә сағылмай.

✓ Ҡаҙағстанда "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни ойошмаһы йәкшәмбе мәктәбе форматында эшләй башлай. Был башланғысты ойошманың әүҙемселәре тәҡдим иткән. 31 мартта бында башҡорт телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса тәүге дәрес булды. Дәрестәрҙе аҙнаһына бер тапҡыр ойоштороу күҙаллана.

✓ Өфөлә Башҡортостан Республикаһының элекке ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев тотолған. Ул ер участкаларын һатҡанда вазифа бурыстарын яуыз ниәттә файҙаланыуҙа ғәйепләнә. Енәйәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә йәмғиәттең һәм дәүләттең хоҡуҡтары, законлы мәнфәғәттәре боҙолған, Башҡортостан дәүләт милкен һатыуҙан 27 миллион һум самаһы килем алып еткермәгән.

✓ Рәсәй Президенты хәрби хеҙмәткә яҙғы саҡырылыш тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 1 апрелдән 15 июнгә тиклем запаста булмаған 18 - 27 йәшлек граждандар хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Документҡа ярашлы, Рәсәй армияһы сафына 135 мең кеше ҡушыла.

✓ Өфөлә Киров, Дим һәм Ленин райондарын һыу баҫыуы мөмкин. Иң насар осраҡта быйыл 80 меңдән ашыу кеше йәшәгән 257 тораҡ пункт һыу аҫтында ҡалыуы ихтимал.



ҠЫҪҠАСА

# БАҠСАСЫЛАРҒА

✓ **1 март баҡсасылар өсөн дә үҙгәрештәр килтерҙе. Хәҙер һәр баҡсасы үҙе үстергән йәшелсә-емеште һатырға теләһә, шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлергә һәм патент алырға бурыслы.** Был, үҙ сиратында, уның иҫәпкә дәүләт ҡаҙнаһына һалым түләргә һәм башҡа түләүҙәрҙе индереү бурысын һала. Атап әйткәндә, шәхси эшҡыуар йылына пенсия фондына - 29354 һум, медицина страховкаһына - 6884 һум күсерергә тейеш. Тауар әйләнеше 300 мең һумдан артҡанда килемдең 1 проценты дәүләмәндә һалым түләргә бурыслы. Бер йыллыҡ патент 20 мең һум тәшкил итә. Теркәлеү үтмәйенсә тауарын һатыусы полиция һәм һалым органы хеҙмәткәрҙәре тарафынан контролдә тотоласаҡ.

✓ **Быға тиклем төҙөлгән йорттарҙы теркәү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырманы.** Ҡулында йорттоң техник планы һәм йорт урынлашҡан ер билмәһенә Күсемһеҙ милектең берҙәм дәүләт реестрынан алынған күсермәһе булған һәр кем шәхси йортон иҫәпкә ҡуя ала ине. 1 марттан иһә төҙөлөш башлар алдынан йорт ҡуйыуға рөхсәт алырға, ә уны тамамлағас, файҙаланыуға индереү тураһындағы акт эшләтергә һәм унан һуң ғына йортто рәсми теркәргә мөмкин. Быйылғы йылдың 1 мартынан һәр шәхси йорт, әгәр ҙә уның тураһында Росреестрҙа мәғлүмәт булмаһа, рөхсәтһеҙ (самострой) төҙөлгән булып иҫәпләнәсәк һәм урындағы хакимиәт уны емеререүҙе талап итә аласаҡ. Йортто законлы тип таныу тик суд аша ғына мөмкин буласаҡ. Әгәр ҙә суд йортто боҙоу тураһында ҡарар сығарһа, милек хужаһы уны үҙ иҫәбенә емертергә тейеш. Был үҙгәрештәр мунса, беседка һәм һарайҙарға ҡағылмай. Уларҙы бер ниндәй рөхсәтһеҙ ҙә төҙөргә мөмкин. Әлбиттә, үҙ ерендә.

✓ **1 марттан авария-диспетчер хеҙмәте диспетчеры телефон шылтыратыуына 5 минут эсендә яуап бирергә бурыслы.** Шылтыратыуҙы ҡабул итә алмаған осраҡта, диспетчер 10 минут эсендә үҙе бәйләнешкә инергә тейеш. Шулай уҡ заявканы үтәү ваҡыты ла ҡыҫҡарҙы. Авария осрағында йәки йорт эсендәге инженер селтәрҙәре эшлектән сыҡҡанда йүнәтеү эштәре 30 минут эсендә уҙғарылырға тейеш. Ә авария һөҙөмтәләрен тулыһынса бөтөрөүгә тейешле хеҙмәттәргә иң күбе 3 тәүлек ваҡыт бирелә. Йорт эсе инженер системаларына тулған сүп-сарҙы таҙалау 2 сәғәттә атҡарылып сығырға тейеш. Сүп-сар торбаһын "азат" итеүгә лә 2 сәғәт ваҡыт бирелә.

✓ **1 марттан такси хеҙмәте күрһәткән һәм машинаһындағы пассажирҙар урыны 8-ҙән артҡан микроавтобус һәм маршрут автобустарының лицензиялары булырға тейеш.** Лицензия булмаған осраҡта штраф билдәләнгән. Уның күләме шәхси кешеләр өсөн 50, шәхси эшҡыуарҙарға 100 һәм юридик шәхестәргә 400 мең һум тәшкил итә. Әгәр ҙә бер тапҡыр штраф түләп тә, тәртип боҙоу тағы ла бер тапҡыр асыҡланһа, транспортты конфискациялау йәки эшмәкәрлекте 3 айға туҡтатыу ҡаралған.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИРТӘН ИРТҮК...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары пленар ултырышта республиканың Һайлау тураһындағы кодексына төҙәтмәләрҙе беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Парламентарийҙар 8 сентябрҙә Башҡортостан Башлығын һайлауҙа һайлау участкаларын бер сәғәткә иртәрәк, ғәҙәттәгесә, иртәнге сәғәт 8-ҙә түгел, ә 7-лә асырға тәҡдим итә.**

Ошо көндәрҙә "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк сәйәси советы президиумы ултырышында Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин парламенттың ошо төҙәтмәләрҙе ҡарауын белдерҙе. Участкаларҙы бер сәғәткә алдараҡ асыу ял көнөндә график буйынса эшләгән һайлаусыларға һәм көҙҙөн тәүге көндәрендә таңдан баҡсаларына уңыш йыйырға барған кешеләргә тауыш бирергә мөмкинлек булдырҙы.

Депутаттар башҡа төҙәтмәләр ҙә тәҡдим итте. Улар хуплау тапҡан осраҡта, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Йәмәғәт палаталары һайлауға үҙҙәренең күҙәтеүселәрен ебәрә ала. Кандидаттың муниципаль һайлауҙа махсус иҫәп асмайынса файҙалана алған аҡса күләме биштән 15 меңгә тиклем арттырыла. Был, депутаттар фекеренсә, депутат мандаттарына дәғүә иткән кандидаттарға эште еңеләйтә. Сәйәси партияларға үҙҙәре тәҡдим иткән кандидаттарҙың һайлау фондына индергән аҡса өлөшөн 100 процентҡа тиклем арттырырға рөхсәт итеү күҙаллана.

# ЮЛДА БИЛДӘ БАРМЫ?

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 1 апрелдә Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Ринат Бәшировҡа һәм республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетына төбәк юлдарындағы билдәләргә бәйле хәлдә асыҡларға ҡушты.**



Республика етәксеһе йыйылыусыларҙан Башҡортостанда билдәләргә бәйле хәлдең нисек булыуы менән ҡыҙыҡһынды. Башҡортостандың баш дәүләт автоинспекторы Динар Ғилметдинов һүҙҙәренсә, улар бөтөнләй юҡ, тиһәң дә була, ведомство билдәләрҙе термопластиктан эшләргә кәңәш итә. "Республикала билдәләр юҡ, тиерлек, быны барыһы ла күрә. Билдә һалына - бер айҙан ул юҡ. Беҙ бер нисә тапҡыр республика, федераль юлдарға булһа ла термопластик менән һыҙырға тәҡдим иттек, ләкин әлегә беҙҙе ишетмәнеләр, эште башланыҡ, әммә бик насар", - тине Башҡортостандың ЮХХДИ начальнигы. Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов әйтеүенсә, быйыл төбәктәге бөтә юлдарға термопластик менән һыҙыу күҙаллана, тейешле эштәр башланған. Бынан тыш, Өфө билдәне термопластик менән һыҙыу өсөн өс ҡулайламә һатып алған, быйыл баш ҡала тап ошондай билдәләр барлыҡҡа киләсәк.

# ТАШҠЫН КИЛӘ

**Башҡортостанда 3 апрелдән ташҡын мәлендә бөтә көстәрҙең һәм сараларҙың юғары әҙерлек режимы индерелә. Был хаҡта дүшәмбе, 1 апрелдә, Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә билдәле булды.**

Ташҡын торошон күҙәтеү өсөн Башҡортостанда 14 пилотһыҙ осоу аппаратын ҡулланыу ҡаралған. Ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуған осраҡта 659 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты 160 мең кешене ҡабул итергә әҙер. Һыу баҫыу хәүефе янаған урында үҙәкләштерелгән системалар, радиотрансляция һәм телетапшырыу, смс-хәбәрҙәр ярҙамында хәбәр итеү күҙаллана. Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, быйыл төбәктә көслө ташҡын фаразланмай. Һыуҙың максималь кимәле нормаға ярашлы һәм түбәнерәк тә булыр тип көтөлә. Ағиҙел һәм Урал йылғалары бассейндарының боҙҙан уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 2-3 көнгә иртәрәк әрселеүе көтөлә. Төньяҡ-көнсығышта йылғалар - 12-15 апрелдә, далала - апрелдең тәүге декадаһында, тауҙарҙа - 6-15 апрелдә, Урал аръяғында 6-11 апрелдә асыла. Өфө янындағы Ағиҙел йылғаһында боҙ китеүе 2-8 апрелдә көтөлә. Дала һәм тау йылғаларында боҙ тығыны булыуы ихтимал (Архангел, Бөрө, Бөрйән һәм башҡа райондарҙа). Өфөлә Киров, Дим һәм Ленин райондарын һыу баҫыуы мөмкин. Иң насар осраҡта быйыл 80 меңдән ашыу кеше йәшәгән 257 тораҡ пункт һыу аҫтында ҡалыуы ихтимал. Биш предприятие һәм бер социаль әһәмиәтле объект һыу баҫҡан урынға эләгеүе мөмкин.

# АШЫҒЫС ЯРҘАМ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ашығыс медицина ярҙамы табиптары һәм фельдшерҙары менән осрашыуҙа республиканың ошо системала йыйылған проблемаларҙы хәл итеүҙә ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын белдерҙе.**

Кадрҙар мәсьәләһе республиканың ашығыс медицина ярҙамы күрһәтеү хеҙмәтендә төп проблемаларҙың береһе булып тора. Бригадаларҙың 30 проценты сәҡырыуҙарға бер фельдшер менән генә сыға, ә федераль нормативтар буйынса ике медик булырға тейеш. Федераль үҙәк һәм республика бюджеты яғынан финанс ярҙамы менән санитар автотранспорт паркы 60 процентҡа яңыртылды һәм ашығыс ярҙам станциялары тейешле медицина ҡорамалы менән йыһазландырылған 200 самаһы автомобиль алды. Ләкин тағы ла 140 берәмек санитар машина кәрәк.

Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин һүҙҙәренсә, кадрҙар мәсьәләһен хәл итеү маҡсатында ашығыс ярҙам фельдшеры сертификатын алыу өсөн буласаҡ медицина хеҙмәткәрҙәрен дуаль уҡытыу тураһында медицина колледжы директорҙары менән һөйләшеп килешелгән. Быйыл 80 белгескә диплом менән бер рәттән, ошондай сертификат тапшырыла.

Тағы ла бер проблема - ашығыс ярҙам бригадаларының именлеген тәьмин итеү. Ҡабул ителгән федераль закон табиптарҙы һәм фельдшерҙарҙы ниндәйҙер кимәлдә яҡланы. Ләкин, Башҡортостандың ашығыс медицина ярҙамы станцияны һәм фажиғәләр медицинаһы үҙәге етәксеһе Марат Йыһаншин һүҙҙәренсә, штаттан тыш хәл килеп тыуған осраҡта ашығыс ярҙам бригадалары полицияның килеүен сәғәттәр буйы көтә, был мәсьәләлә Эске эштәр министрлығы менән үҙ-ара аңлашыу кәрәк. Радий Хәбиров әлеге мәсьәләне үҙенең контроленә аласағын һәм уны Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы етәкселеге менән тикшерәсәген әйтте.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөгә Татарстан Республикаһы президенты Рөстәм Миңлеханов етәкселегендәге делегация килә. Сәфәр 17-18 апрелдә Башҡортостанда Татарстан Республикаһы көндәрен уҙғарыу менән бәйле. Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. 17 апрелдә Татарстан президенты татар шағиры Ғабдулла Туҡай һәйкәлен асыу тантанаһында ҡатнаша. Һәйкәл Өфө "Нур" татар дәүләт театры алдындағы майҙанда ҡуйыла.

✓ Өфөнөң "Торатау" конгресс-холлына яңы директор тәғәйенләнде. Учреждениеның быға тиклем Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана директоры вазифаһын биләгән Айгөл Моратова етәкләй. Моратова Айгөл Динислам ҡыҙы 1972 йылдың 26 июлендә тыуған. 1995 йылда Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын, 2012 йылда Башҡортостан Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы. 2019 йылда Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы ағзаһы итеп һайланған.

✓ "Башҡорт матбуғаты" нәшриәт йорто рус һәм инглиз телдәрендә "Башҡортостан Республикаһы. 100 йыл" ("Republic of Bashkortostan 100 years") тигән китап сығарҙы. Баҫманың электрон версияһы Башҡортостан министрлыҡтары һәм ведомстволары сайттарында, башҡа мәғлүмәт порталдарында урынлаштырылған.

✓ Өфө, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургты һәм Калининградты уҙып китеп, креатив инфраструктуралы ҡалалар араһында алдынғы урынды биләй. Был хаҡта Рәсәйҙә PwC һәм Calvert 22 фондына һылтанма менән РИА "Новости" хәбәр итә. Өфө ҡала инфраструктураһын, кеше капиталын һәм эшҡыуарлыҡ мөхите торошон сағылдырған креатив капитал индексы күрһәткесе буйынса ла Рәсәйҙең иң яҡшы егерме ҡалаһы иҫәбендә тора. Тәүге өс баҫҡыста - Мәскәү, Петербург һәм Ҡаҙан.

✓ "Истоки" гәзите баҫма матбуғат булыуҙан туҡтай. Был хаҡта баҫманың баш мөхәррире Айҙар Хөсәйенов Facebook социаль селтәрендәге сәхифәһендә хәбәр итте. Ләкин редакция материалдарҙы электрон вариантта сығарыуын дауам итә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Мәғлүм булыуынса, 25 марттан 11 майға тиклем баш ҡалала төҙөкләндереү айлығы иғлан ителде. Уның барышында 3, 13, 27 апрелдә дөйөм ҡала өмәләрен ойоштороу ҡаралған.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Марттың беренсе декадаһында "Аҡбуҙат" ипподромында Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы кубогына 7-се ҡышҡы корпоратив уйындар үтте. Унда 52 предприятие һәм ойошма командаһынан 1200-ҙән ашыу кеше ҡатнаша һәм 5 спорт төрө буйынса көс һынаша. Сираттағы оператив кәңәшмә сара еңеүселәрен тәбрикләүҙән башланды. Сәләмәт тормошто пропагандалауҙа бындай уйындар матур өлгө булып тора һәм киләсәктә лә уларҙа ҡатнашыусылар һаны йылдан-йыл арта барыр, тигән ышаныс белдерҙе ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Салауат Хөсәйенов.**

# БЕРҘӘМЛЕК МЕНӘН КӨСЛӨБӨҘ...

## таҙалыҡ өсөн көрәштә

Уҙған аҙна шулай уҡ әһәмиәтле социаль, мәҙәни һәм спорт сараларына бай булды. Башҡортостандың 100 йыллығына арналған дөйөм ҡала тантанаһы юғары кимәлдә үтте һәм унда ҡаланың абруйлы, ихтирамлы граждандары юбилей миҙалы менән наградланды. Райондарҙа был саралар һаман да дауам итә һәм улар йыл дауамында яңы төҙөлгән объекттар, башҡа саралар сифатында барасаҡ.

Ә инде кәңәшмәнең көн тәртибенә 2018 йылда Өфөнөң социаль-иҡтисади хәл-торошоноң айырым күрһәткестәре буйынса отчет сығарылды. Өфө ҡалаһының Дәүләт статистикаһы бүлеге начальнигы Оксана Даянова белдереүенсә, былтыр ҡаланың сәнәғәт етештереүсәнлегендә тотороҡлолоҡ һәм ыңғай динамика күҙәтелгән. Урындағы сәнәғәт предприятиеларының тейәп оҙатылған тауар күләме уҙған йыл менән сағыштырғанда 125 процент тәшкил иткән. Эшкәртеүсе сәнәғәт предприятиеларының тейәп оҙатылған продукция күләме лә артҡан. Дөйөм алғанда, Өфө ҡалаһының эре һәм урта сәнәғәт предприятиелары тарафынан оҙатылған продукция күләме 933,23 миллиард һум тәшкил итә. Был - Рәсәйҙең халҡы миллиондан ашыу булған ҡалалары араһында икенсе урын. Ошо сумманы йән иҫәбенә бүлгәндә, бер кешегә 824,8 мең һум тура килә һәм миллионлы ҡалалар араһында иң юғары күрһәткес булып тора. Кәңәшмәне алып барыусы Салауат Сәхи улы атап үтелгән һандарҙың киләсәккә план һәм маҡсат билдәләү өсөн башланғыс нөктә булып торорға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, киләсәктә уларҙы арттырыу һәм ҡайһы бер күрһәткестәрҙе яҡшыртыу өсөн һәр район үҙенә бурыс билдәләргә тейеш, тип һығымта яһаны.

Мәғлүм булыуынса, 25 марттан 11 майға тиклем баш ҡалала төҙөкләндереү айлығы иғлан ителде. Уның барышында 3, 13, 27 апрелдә дөйөм ҡала өмәләрен ойоштороу ҡаралған. Был хаҡта Экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау бүлеге начальнигы Юлия Косарева сығыш яһаны. Беренсе шәмбелә иремәй ҡалған ҡар таратыласаҡ һәм сүп-сар йыйыласаҡ, икенсе шәмбелә санитар таҙартыу эштәре алып барыласаҡ. Һуңғы шәмбелә, нигеҙҙә, ҡала территорияһын йәшелләндереү, газондарҙы һәм сәскә түтәлдәрен төҙөкләндереүгә иғтибар биреләсәк. Айлыҡ дауамында урман парктары һәм һаҡланған һыу зоналарын таҙартыу буйынса Бөтә Рәсәй һәм республика экологик акциялары үтәсәк. Шул уҡ ваҡытта ҡала хакимиәте лә экологик инициатива менән сығыш яһай. Мәҫәлән, "Ҡаланың экологик картаһы" интерактив проекты халыҡҡа ҡала территорияһында рөхсәт ителмәгән сүп-сар түгеү урындары хаҡында хәбәр итеү мөмкинлеген бирә. Сервистың ике йыл эшләүе дәүерендә барлығы 287 сүп-сар ояһы бөтөрөлгән.

Салауат Хөсәйенов белдереүенсә, уҙған йома ойошторолған сарала барлығы 1575 кубометр сүп-сар сығарылған, бынан тыш, тап ошо көндә 27 заявка буйынса юлдарҙа соҡорҙар ямалған. Салауат Сәхи улы артабан да бындай экологик акцияның дауам итәсәген һәм ойошма-предприятиелар хеҙмәткәрҙәренең генә түгел, ҡала халҡын да уға әүҙем ҡушылырға саҡырҙы.

Өмәләр, ниндәй генә өлкәгә ҡағылмаһын - элек-электән килгән һәм йолаға әйләнгән күркәм күренеш. Юҡҡа ғына, һәр яҡшы яңылыҡ - онотолған иҫкелек ул, тимәйҙәр. Нисек кенә глобалләшеү менән янамаһындар, халыҡ күңелендә һәм хәтерендә барыбер ҙә ҡанға һеңгән, менталитетҡа әүерелгән сифаттар өҫтөнлөк ала. Шуның менән берҙәмбеҙҙер, көслөбөҙҙөр, моғайын. Хатта таҙалыҡ өсөн көрәштә лә.

**Әйткәндәй, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш гвардия"һы 30 мартта үткән Ерҙе һаҡлау көнөн экологик челлендж итеп үткәреү тәҡдиме менән сыҡты һәм Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, Архангел, Әлшәй, Бөрө, Ғафури, Иглин һ.б. районлдарҙа сүп-сар туҙып ятҡан территорияларҙы таҙартты. Республика буйынса 50 активист дөйөм алғанда 800 килограмм сүп-сар йыйҙы. Уйлап ҡараһаң, үҙеңдең планетаңды таҙа тотоу өсөн әллә ниндәй батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ та кәрәкмәй бит: бары тик уны көн һайын тәртиптә тотоу ҙа етә. Элегерәк Башҡорт йәштәре иттифағы йәштәре, һуңынан башҡа йәштәр ойошмалары баш ҡаланың Салауат Юлаев майҙаны тирәһен таҙартыуҙы даими башҡара ине. Хәҙер был өлгөнө йәш гвардиясылар ҙа күтәреп алды. Тамсы тама-тама таш тишә, тигәндәй, был матур күренеш республика район-ҡалаларында, ауылдарында ла таралыр, тип өмөтләнергә ҡала.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*КӨТКӘЙНЕК!*

# ФЕКЕРЕҢДЕ БЕЛДЕР

**Баш ҡаланың "Торатау" Конгресс-холл бинаһында 10-12 апрель көндәрендә Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы үтә. Киң мәғлүмәт саралары менән осрашыуҙа сараға әҙерлек барышы, фекер алышыуға сығарылған көнүҙәк мәсьәләләр тураһында БР мәғариф министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Айбулат Хажин һөйләне.**

- Йыл әйләнәһенә мәғариф хеҙмәткәрҙәренең төрлө кәңәшмәләре үтеп тора, әммә нәҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының бындай оло йыйыны республика барлыҡҡа килгәндән алып беренсегә ойошторола. Унда Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, башҡа туған телдәр уҡытыусылары, милли мәғариф системаһында эшләүсе төрлө белгестәр, идаралыҡ етәкселәре ҡатнаша. Атап әйткәндә, Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләренән, Пермь крайы, Ханты-Манси автономиялы округы, Татарстандан башҡорт теле уҡытыусылары килә. Шулай уҡ Саха һәм Бүрәт республикалары, Төньяҡ Кавказ федераль округы составындағы республикаларҙан делегаттар көтәбеҙ. Ғөмүмән, йыйында бөтәһе 800-гә яҡын ҡатнашыусы була. Съездың эш программаһына килгәндә, 10 апрель көндө ҡатнашыусыларҙы ҡаршы алыу һәм баш ҡала менән таныштырыу, мәҙәни саралар ойоштороу ҡаралған. Ә бына 11 апрелдә съезд эше тулыһынса милли мәғариф өлкәһендәге мәсьәләләргә - Өфөләге милли мәктәптәргә барыу, оҫталыҡ дәрестәре үткәреү, фекер алышыу һәм тәжрибә уртаҡлашыуға ҡорола. Йыйындың өсөнсө көнөндә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡатнашлығындағы пленар ултырыштан һуң, делегаттар фекер алышыу майҙансыҡтарында эшләйәсәк. Унда башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ үҫтереү, дөйөм туған телдәрҙе үҫтереү, һөнәри белем биреү һәм юғары белем биреү системаларында белгестәр әҙерләү, ғаиләлә уҡытыуҙы ойоштороу, милли традицияларҙы һаҡлау, интерактив белем биреү һәм милли мәктәптәрҙе үҫтереү кеүек актуаль темалар күтәреләсәк. Башҡорт телендә белем алыу һәм уны өйрәтеү буйынса коллегаларҙан аныҡ тәҡдимдәр көтәбеҙ, хәл итәһе мәсьәләләр байтаҡ.

Съезд барышында Башҡортостанда башҡорт теле һәм башҡа туған телдәрҙе үҫтереү буйынса республика концепцияһын төҙөү төп маҡсатыбыҙ, шуға, һәр ҡатнашыусы үҙ фекерен ҡурҡмайынса белдерергә, идеялары менән бүлешергә тейеш. Бөгөн беҙҙе борсоған һорауҙарҙы хәл итеү өсөн республиканың бөтә төр ресурстары, тәжрибәһе етерлек һәм ни бары эште системалы рәүештә ойошторо ебәреү талап ителә. Был йәһәттән БР Мәғариф министрлығында айырым милли мәғариф идараһы булдырабыҙ. Әлеге ваҡытта милли мәғариф өлкәһендәге мәсьәләләр менән министрлыҡта ике белгес шөғөлләнһә, яңы идаралыҡ штатына ун биш кешене алырға ниәтләйбеҙ. Күптән көтөлгән съезд коллегаларға осрашып тәжрибә уртаҡлашырға форсат биреүҙән тыш, дәүләт структураларына аныҡ ҡарарҙар ҡабул итергә ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ойоштороусылар Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезын асыҡ йыйын тип иғлан итә. Шуға сараның фекер алышыу майҙансыҡтарындағы эш һәм йомғаҡ яһау өлөшө интернет селтәрендә тура эфирҙа күрһәтеләсәк. Туған телебеҙҙе һаҡлауға, милли мәғарифҡа битараф булмаған һәр кем интернет аша бәйләнешкә сығып, үҙ тәҡдимен индерә, борсоған һорауын бирә, фекерен әйтә ала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан тамырын таҙартыу

❖ Баш мейеһе тамырҙарын таҙартыу муйын остеохондрозынан, атеросклероздан ҡотҡара, баш ауыртыуҙары бөтөп ҡалыр, кәйеф тә күтәрелә. 5 әстерхан сәтләүеген ваҡлап, 1 ҡалаҡ йүкә балы менән болғатырға. Бер семтем дәрсен (корица), имбир өҫтәргә һәм 1 тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1/3 стакан һуған һутына 1 стакан бал өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға. Ул тамырҙарҙы таҙартып ҡына ҡалмай, иммунитетты ла нығыта.

❖ Көн һайын төшкө һәм киске аштан ярты сәғәт алда яртышар стакан анар (гранат) һуты эсегеҙ. Уны алма һәм кишер һуты менән сиратларға ла була.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын термоста 8-10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Төнәтмәне иртәнге аштан ярты сәғәт алда 4-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

❖ Организмды һауыҡтырыу һәм тамырҙарҙы таҙартыу өсөн көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 мандарин, бер ус йөҙөм һәм әстерхан сәтләүегеге ашап, 15-20 минуттан 1 балғалаҡ бал һәм лимон киҫәге һалынған 1 стакан һыу эсергә. Тағы ла 15-20 минуттан ашаһағыҙ була.

### Ҡарабойҙай

❖ Ҡарабойҙай төнәтмәһе ҡан тамырҙарын нығыта, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан таҙарта. Ҡарабойҙай сәскәләре һәм ваҡланған һаламын бер тигеҙ күләмдә алып болғатырға, 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 40-ар мл (балаларға - 20-шәр мл) эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 3 аҙна ял иткәндән һуң, 3 ай буйына араларында 3-әр аҙна ял ойоштороп, 21-әр көн дауаланырға. 90 көндән тағы ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ Ярлыҡау һорап, теҙләнһә, уға ғүмер вәғәҙә иткән һәм үҙенең бер ғәскәренә баш итеп ҡуйырға уйлауын әйткән. "Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй. Теҙләнергә мин дөйә түгел", - тип яуап бирә Бошман-Ҡыпсаҡ батыр.



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Башҡорт тирмәһен, шулай уҡ ҡунаҡ бүлмәләрен балаҫ менән берләштерелгән кейеҙҙәр биҙәгән. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында яһалған йөн әйберҙәргә хас булғанса, буйлы-буйлы йәйгор төҫөндәге орнаменттар тирмәнең өҫтөнән төшкән ҡояш нурында тағы ла сағыуыраҡ булып балҡыған.**

Көнкүрештә бындай кейеҙ нигеҙле балаҫтар ҙур урындыҡҡа йәйелгән. Боронғо кейеҙҙәр кеүек үк, боронғо балаҫтар ҙа буялмаған йөндән һуғылған. XIX быуаттың икенсе яртыһында төрлө төҫтәге балаҫтар күпләп таралған. Башҡорттоң биҙәкле балаҫында, айырыуса көньяҡ-көнсығыш төбәктә, йылы төҫтәр - көрән, ҡыҙыл, ҡары ҡыҙыл, йәшел ҡулланылған. Һирәк кенә ҡурай еләге төҫө, алһыу зәңгәр, күк төҫтәр осрай. XX быуатта көньяҡ-көнбайыш Дим буйы һәм Ағиҙел буйы ауылдарында йондоҙҙар һәм үҫемлек биҙәктәре һуғылған кейеҙҙәр таралған. Бында, кейеҙҙе күпләп һуҡҡан төбәктә, XX быуатта кейеҙҙе биҙәүҙең башҡа ысулы булмаған - улар уның өҫтөнә һуғылған балаҫ ҡушып нығытҡан.

Экспедиция, музей материалдарын ҡараһаҡ, кейеҙ биҙәүҙә ҡулланылған алымдарҙы күрергә була. XX быуаттың икенсе яртыһында этнографик экспедицияла алынған мәғлүмәт халҡыбыҙҙың кейеҙ баҫыу тарихының һуңғы этабын сағылдыра. Уны ғилми анализлап, башҡа халыҡтарҙың кейеҙе менән сағыштырып ҡараһаҡ, башҡорт кейеҙенең күп быуатлыҡ йолаһы булыуын аңлайбыҙ.



Ҡатмарлы биҙәкле боронғо кейеҙ. Ф. Баҡтыбаева эше. Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы. 1961 йыл.

Иң билдәле техник алымдарҙан - быуат ярым, ике быуат тирәһе ҡулланылғаны - биҙәкте кейеҙҙе баҫҡанда уҡ һалыу. Ул кейеҙ баҫылған төҫтә, икенсе, айырылып торған төҫтә булыуы ла ихтимал. Был иң боронғо алымды Евразияның барлыҡ кейеҙ баҫыусылары ла яҡшы белгән. Күп кенә төрки телле халыҡтарҙа ул бер төрлө атап йөрөтөлгән - ала кейеҙ. Сауҙа итеү маҡсатынан кейеҙ баҫҡан халыҡтарҙа (ҡаҙаҡ, ҡырғыҙҙарҙа) XX быуатта был техниканы һирәк ҡулланғандар. Башлыса көнкүрештә тотоноу өсөн кейеҙҙәр шулай баҫылған. Алтай, ҡарағалпаҡ, балҡар, ҡарасәй һәм башҡорттарҙа был кейеҙҙәр йыш осрай. Биҙәктең ситтәре аныҡ түгел, симметрия һаҡланыуы ла мөһим түгел. Тура һыҙыҡтар, киртләс һыҙыҡтар һәм ябай геометрик фигуралар ҙан ҡатмарлы булмаған орнаменттар һалынған. Биҙәктең артабанғы үҫеше - мөгөҙ формаһындағы биҙәктәр ҡулланыу.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!



**Быйыл предприятиелар, ойошмалар, граждандар үҙҙәренең еңеүҙәрен, ҡаҙаныштарын Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына бағышлай. Уларҙың һәр береһе тантаналы, рухи күтәренкелек шарттарында үтә. Ошондай шау-шыулы тамашалар араһында ҙур әһәмиәткә эйә оло бер ваҡиға, нисектер, юғалып ҡалды. Тураһын әйткәндә, "Башҡортостан энциклопедияһы" нәшриәтендә сыҡҡан "Башҡорт энциклопедияһы"ның символик мәғәнәгә эйә булған етенсе томының презентацияһы артыҡ шау-шыуһыҙ ғына үтеп китте. Ә бит интеллектуаль милек булған был баҫма ла республикаға автономия яулау кеүек үк ауыр ҙа, ҡатмарлы ла һынауҙар аша килеп етте беҙҙең көнгә.**

# ДАНЛЫ ЮБИЛЕЙҒА...

## һынауҙар аша яуланған бүләк

Тарих биттәренә күҙ һалһаҡ, Рәсәйҙең яңы тарихына тиклем илдә ни бары "Ҙур совет энциклопедияһы" ғына нәшер ителә, һуңынан "Рәсәйҙең ҙур энциклопедияһы" барлыҡҡа килә. Әммә уҙаллылыҡ тәмен тойған республикалар һәм крайҙар үҙҙәренең энциклопедияларын сығарыу эшенә тотона. Башҡортостан энциклопедияһын нәшер итеү тураһында беренсе рәсми документ 1991 йылда ҡабул ителә, әммә унда бары тик рус телле баҫма хаҡында ғына һүҙ бара. Ете томдан торған китап 2001 йылда сығып бөтөргә тейеш була. Был - эштәр ыңғай һәм уңышлы барған вариантта. Ләкин уларҙы нәшер итеү тотҡарлана. 2010 йылдағы власть алмашыныуы ихә бөтөн өмөттәрҙе юҡҡа сығара. Рус телендәге томдар нәшер ителеп бөттә, әммә башҡорт телендәге энциклопедияны сығарыу өсөн финанс бүленмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, ул энтузиастар тырышлығы менән генә иждад ителә, тиергә мөмкин. Энциклопедиялар төҙөү - ауыр һәм ҡатмарлы эш, донъя тәжрибәһенән сығып ҡарағанда, был эшкә меңәрләгән ғалим йәлеп ителһә, Башҡортостанда уның нисек тормошҡа ашырылғанын һандарҙа ла күрергә мөмкин: мәҫәлән, 1996 йылда был редакцияла 46 энциклопедист эшләһә, бөгөн улар 9 ғына кеше. Унан һуң, бөгөнгө глобалләшеү замаһында оҫта һәм һәләтле, һүҙ баҫен тойған тәржемәселәрҙе табыу ҙа ҙур проблема. Әммә коллектив финанс ҡытлығына, башҡа проблемаларға ҡарамаҫтан, бөгөнгә барлығы 18 атамалы 30 том энциклопедия сығарған. Һан буйынса был юғары күрһәткес. Татарстанда был һан - 10. Әммә улар хәҙер сит республикаларҙа һәм сит илдәрҙә йәшәүсе татарҙар буйынса энциклопедиялар сығара башлаған, Башҡортостан да аҫаба башҡорт ерҙәрендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ тураһында энциклопедик мәғлүмәт баҫмаһы сығара алыр ине, тик мәсьәлә тағы ла финанслауға барып тәртәлә. Бәлки, республиканың яңы етәкселеге быға иғтибар йүнәлтер һәм үҙ контроленә алыр, тип ышанғы килә.

Нисек кенә булмаһын, энциклопедистар республиканың оло юбилейына ҙур бүләк эшләне, был бейеклекте улар ысын мәғәнәһендә яулап алды - төрлө ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, күп йылдарға һуҙылған, күп томлы башҡорт телендәге "Башҡорт энциклопедияһы"ның планлаштырылған 7-се томы ике телдәге баҫма һәм электрон вариантар булараҡ, тулыһынса донъя күрҙе! Хәҙер инде Башҡорт энциклопедияһының электрон вариантынан да кәрәкле мәғлүмәтте башҡорт телендә табырға мөмкин буласаҡ. Энциклопедиялар нәшер итеү менән бер рәттән, ойошмала мәғлүмәттәр базаһы булдырылған һәм унда бөгөн 20 меңдән ашыу мәҡәлә, 6 меңдән ашыу иллюстрация бар. Улар теләһә ҡайһы ваҡыт теләһә ниндәй энциклопедия төҙөүҙә ҡулланыла ала. Бары тик уларҙы тейешле концепция буйынса урынлаштырып сығырға ғына кәрәк.

Заман менән бер ҡатарҙан атлап, барлыҡ энциклопедиялар электрон вариантҡа күсерелә. Киләсәктә баҫма энциклопедияларға һорау булмаһа, улар "Башҡортостандың төбәк интерактив энциклопедия порталы"нда урынлаштырыласаҡ һәм бында барлыҡ энциклопедияларҙы ғына түгел, башҡа мәғлүмәтте лә табырға мөмкин буласаҡ. Әлеге ваҡытта "Башҡорт энциклопедияһы"-ның рус һәм башҡорт версияларының электрон варианттарын ҡараусылар һаны 2017 йылдан алып арта бара. Былтыр инеүселәр һаны рус версияһында 214757 кеше булһа, башҡорт телендә - 19 902. Мәғлүмәт алыусылар донъяның барлыҡ илдәрендә лә бар: 2017 йылда - 188 ил булһа, 2018 йылда - 205 ил. Донъяла 254 ил икәнлеген иҫәпкә алғанда, Башҡортостан энциклопедияһы менән интернет бәйләнеше булған барлыҡ илдәр ҙә тиерлек ҡыҙыҡһына, тип раҫларға була.

Презентацияла тәбрикләү телмәре менән сығыш яһаусылар баҫманың республиканың ике дәүләт телендә лә донъя күреүенең Башҡортостан өсөн әһәмиәтен билдәләп, проблемаларға ла туҡталды һәм уларҙы хәл итеү юлдарын билдәләне. Мәҫәлән, философия фәндәре докторы Фәнил Фәйзуллин әйтеүенсә, Татарстан энциклопедияһының төп бағыусыһы булып "Татнефть" компанияһы тора. Башҡортостандың нефть компанияларын "Роснефть" үҙенә алған икән, ни өсөн ул республика өсөн мөһим булған эштәрҙе тормошҡа ашырыуҙы финансламай, башҡа проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы үҙ елкәһенә алмай? Урынлы һорау һәм көнүҙәк. Сөнки "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексының киләсәккә пландары тағы ла ҙурыраҡ - Фольклориадаға арнап, "Башҡортостан халыҡтары фольклоры", Апимондияға арнап - "Башҡорт балы" энциклопедияларын рус, башҡорт, инглиз телендә нәшер итеүҙән тыш, фәндең төрлө тармаҡтары буйынса айырым энциклопедиялар төҙөләсәк һәм сығарыласаҡ. Шулай уҡ финанс ярҙамы булғанда күп томлы "Башҡорт энциклопедияһы"н да инглиз теленә тәржемә итеү хыялы бар. Был, әлбиттә, бик ҙур сығымдар талап итә, әммә Башҡортостан, башҡорттар хаҡында инглиз теле аша донъя халҡы ла хәбәрҙар булырға һәм Башҡортостан бынан үҙенә файҙа алырға тейеш кенә түгел, лайыҡтыр, моғайын.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# БОШМАН-ҠЫПСАҠ БАТЫР

**Ағиҙел, Ыҡ, Сулман иҙеле буйҙарында борон-борон замандарҙан Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Teләүле, Бөрйән, Юрматы ырыуҙары халҡы йәшәгән. Улар - бер атанан таралған уландар, туғандар. Барыһы ла йылҡысылыҡ менән көн күргән. Малдары бик тә ишле булған. Меңәрләгән баш йылҡы малы ерҙе ҡара ябып йөрөр булған. Шуға улар яҡшынан-яҡшы үләнле урындарға күсеп йөрөгән.**

Бер заман башҡорт иленә ҡара яу булып, монгол баҫҡынсылары ябырылған. Бик күп батырҙар атҡа атланып, ил һаҡларға күтәрелгән. Улар араһында үҙенең ҡыйыулығы, оһоллоғо менән ҡыпсаҡ батыры Бошман айырылып торған. Ул ҡыпсаҡтарҙан да, туғандары булған ырыуҙарынан да, яҡын-тирәләге башҡа милләттәрҙән дә ғәскәр туплап, яуға күтәрелгән. Илен-һыуын һаҡлау өсөн үҙҙәрен аямай алышҡан егеттәр. Монголдарҙың ғәскәр башлыҡтары, яусыл, бик сая һуғышҡан батырҙарҙы күреп, уларҙы хәйлә менән алдырмаҡсы булған. Бүләк менән, ер-мөлкәт менән үҙ яғына ауҙарырға тип хәйлә ҡорған. Әммә Бошман-Ҡыпсаҡ баш һалмай, һаман яулашҡан, дошмандың байтаҡ яугирҙарын юҡ иткән. Дошман уны терелә́й ҡулға төшөрөргә теләгән. Яугирҙарҙың байтағы тинһеҙ алышта ятып ҡалған. Ғәскәр араһынан бер хыянатсы табылған. Ул дошманға Бошман батырҙың ҡайҙалығын хәбәр иткән. Бошмандың ғәскәре һуңғы кешеһенә тиклем ҡыйратылған. Үҙе ҡулға алынған. Монголдарҙың ғәскәр башлығы хыянатсыны язалатып үлтерткән. Бошманды монголдарҙың ханына алып килгәндәр. Монгол ханы иҫәпһеҙ ҡырылған яугирҙары өсөн үсен алырға теләп, ҡыпсаҡ батыры Бошманға теҙләнергә, ярлыҡау һорарға ҡушҡан. Ярлыҡау һорап, теҙләнһә, уға ғүмер вәғәҙә иткән һәм үҙенең бер ғәскәренә баш итеп ҡуйырға уйлауын әйткән. "Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй. Теҙләнергә мин дөйә түгел", - тип яуап бирә, күкрәк киреп ғорур баҫып торған Бошман-Ҡыпсаҡ батыр.

Был өлгөнә бөгөнгө заманға яраҡлаштырһаҡ, шулай тип аңларға була: хәҙерге һынауҙар ҙа өҫтөбеҙгә ҡара яуҙай ишерелә. Улар алдында ла теҙләнергә түгел, ә лайыҡлы ҡаршы торорға, енергә, үҙең өсөн дә, халҡың өсөн дә лайыҡлы йәшәү дауларға тейешһең.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА әҙерләне.**

УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

# ҮҘ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, "Башҡортостан Республикаһы дәүләтселегенең тыуыуы һәм аяҡҡа баҫыуы: 100 шәхес" тигән проект иғлан иткәйне. Түбәндә беҙ шул исемлекте баҫыуҙы дауам итәбеҙ.**

**Ишбулатов Хажиәхмәт Исхаҡ улы** (1851-1921) БР-ның Благовар районы Үҙрәкбаш ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, генерал, Башҡорт корпусы командующийы (1918), Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы урынбаҫары (1919), Башвоенкоматтың хәрби етәксеһе (1919).

**Әхмәров Хәсән Нурый улы** (1866-?) Ырымбур өлкәһенең Ырымбур ҡалаһында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, полковник, Башҡорт Хөкүмәтенең Үсәргән кантонындағы уполномоченныйы (1918-1919), Башҡорт уҡсылар бригадаһы командиры (1919-1920), БАССР-ҙың запас ғәскәрҙәре идаралығы начальнигы (1920).

**Ғәбитов Ғабделхаҡ** Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), Башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе (1918), 2-се Башҡорт пехота полкы командиры (1918).

**Мөхәмәтйәров Ғариф Закир улы** (1891-?) Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Арғаяш ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе (1918), Арғаяш отряды начальнигы (1918), Арғаяш кантоны башҡарма комитеты рәйесе (1927-1928).

**Алишев Хәлил Фәйзрахман улы** (1892-1937) әлеге Татарстан Республикаһы Әлмәт ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Туҡсоран отряды етәксеһе (1918), 2-се башҡорт кавалерия полкы командиры (1919), Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командующийы (1919).

**Туймаҡаев Харис** Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тыуған (икенсе мәғлүмәттәр буйынса - Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында), Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), 1-се башҡорт пехота полкы командиры (1918).

**Аҡсулпанов Шаһихәйҙәр Шаһингәрәй улы** (1868-?) Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, башҡорт дворяндары Аҡсулпановтар тоҡомонан, Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), БАССР-ҙың запастағы ғәскәрҙәре идаралығы начальнигы урынбаҫары (1920).

**Үзбәков Шаһибәк** Ишембай районы Әхмәр ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Зәки Вәлидиҙең дуҫы һәм арҡаҙашы, Табын отряды начальнигы (1918), Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигының өлкән адъютанты (1918-1919).

**Әҙеһәмов Абдулла Камалетдин улы** (1896-1968) Баймаҡ районы Юлыҡ ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, М. К. Әҙеһәмовтың туғаны, Башҡорт Үҙәк шураһы (1917), Башҡорт Хөкүмәте (1919), Башревком ағзаһы (1919), ВЦИК ҡарамағындағы Башҡорт республикаһы вәкиллеге етәксеһе (1919-1920).

**Әҙеһәмов Мөхәмәтдин Камалетдин улы** (1896-1968) Баймаҡ районы Юлыҡ ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, А. К. Әҙеһәмовтың туғаны, Башҡорт хөкүмәтенең страховка бүлеге мөдире (1918), Башревком уполномоченныйҙары советы секретары (1919), инспекция наркомы (1922).

**Тереғолов Усман Ниғмәтулла улы** (1896-1943) - Благовар районы Үрге Ҡыйғы ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, Башҡорт хәрби Советы ағзаһы (1918). Милли армия төҙөүселәрҙең береһе. Тамъян-Ҡатай отряды командиры (1918), 6-сы Башҡорт пехота полкы командиры (1919), 1-се башҡорт кавполкы командиры (1919). Башҡорт милицияһының идара рәйесе урынбаҫары (1920).

**Низаметдинов Ҡазыхан Низаметдин улы** (1892-1937) - Белорет районы Һәйет ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер, 5-се башҡорт пехота полкы командиры. 1-се Башҡорт дивизияһының штаб начальнигы (1919), Башҡорт команда курстары начальнигы (1921-1923).

**Алиев Тәкиулла Ханнан улы** (1894-1957) - әлеге Татарстандың Аҡтаныш районы Яңы Зиәш ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, офицер. Башҡорт хөкүмәтенең Каруанһарай ротаһы командиры (1918). Башҡорт корпусы штаб коменданты (1919). Башвоенкомдың административ часы начальнигы (1919).

**Ғисмәтуллин Тәкиулла (Тәҡи Ғисмәти)** - Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Арғаяш ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Силәбе ҡалаһының Халыҡ власы эргәһендәге Башҡорт советы ағзаһы (1918). Башҡорт хәрби Советы ағзаһы (1919). Башҡорт армияһын төҙөүселәрҙең береһе (1918).

**Халиҡов Мансур Хатып улы** (1886-1934) - Ғафури районы Оло Үтәш ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. "Башҡорт-федералист" исемлеге буйынса Учредитель йыйылышына ағза булараҡ кандидат (1917). БАССР юстицияһы наркоматында эшләй (1919-1921), БАССР ДУМ-ы мөфтөйе (1921-1923).

**Бикмәтов Солтангәрәй Ғәтиәтулла улы** - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, офицер. Ырымбур хәрби округы штабында Башҡорт хөкүмәте вәкиле (1918-1919). Г.М.Семеновтың штабында һәм Рәсәйҙең Көнсығыш сиктәрендәге казак ғәскәрҙәре поход атаманы штабында башҡорт вәкиле (1920). Башҡорт казак ғәскәренең генерал-майоры (1920).

**Бикбаев Насибулла Рәхмәтулла улы** (1897-1937) - Күгәрсен районы Үрге Бикҡужа ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт хәрби советында хеҙмәт итә (1918). 2-се Башҡорт кавполкы составында була (1918-1919). Башҡорт ғәскәрҙәренең политидаралыҡ инспекторы, Бөрйән - Түңгәүер кантонының соцтәьминәт бүлеге мөдире, РКП (б) Башҡорт обкомының агитация-пропагандист бүлеге етәксеһе (1920-1921).

**Иҙелбаев Сәфәрғәле** (1893-1918) - Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Уның атаһы Башҡорт халыҡ союзы бюроһы ағзаһы була (1917). Бөтә башҡорт съездары ағзаһы (1917).

**Иҙелбаев Хөрмәтулла** - Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеге ағзаһы (1918). Башҡортостан хөкүмәтендә эшләй, БАССР наркомпрос коллегияһы ағзаһы (1919).

**Әбделҡадир Инан (Сөләймәнов Фәтхелҡадир Мостафа улы)** (1889-1976) - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Ғалим, яҙыусы, "Башҡорт" гәзите редакторы (1918). Силәбе ҡалаһы Халыҡ власы эргәһендәге Башҡорт советы ағзаһы (1918). Башревкомда эшләй, Дәүләт нәшриәте коллегияһы ағзаһы (1920). Эмиграцияла ғалим-этнограф.

**Ейәнсурин Ғәҙелша Дәүләтша улы** (1894-1937) - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Ҡыпсаҡ кантон суд бүлеге мөдире (1918). Башревком уполномоченныйы (1919). М.Мортазиндың Башҡорт эскадроны командиры (1920). Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була (1921). БАССР-ҙың Баш суды рәйесе (1929-1930).

**Хөсәйенов Әбүбәкир Дәүләтҡол улы** (1859-1937) - Баймаҡ районы Темәс ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мәғрифәтсе, мулла. Башҡорт үҙәк шураһы ҡушыуы буйынса Темәстә башҡорттарҙың волость-ара съезын ойоштора (1917). Бөрйән-Түңгәүер кантон идаралығының дини-суд бүлеге етәксеһе (1918).

**Яҡшымбәтов Хажмөхәмәт** - Әбйәлил районы Асҡар ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мулла, З.Вәлидиҙең ҡайныһы. Башҡорт үҙәк шураһы ҡушыуы буйынса Әбйәлилдә волость-ара съезын ойоштора (1917). Тамъян-Ҡатай кантональ думаһының ғәҙәттән тыш йыйынында Тамъян-Түңгәүер волосы вәкиле булып ҡатнаша (1918).

**(Дауамы. Башы 12-13-сө һандарҙа).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әкрәм БЕЙЕШ*

## БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

1918 йылдың 21 ноябрендә Башҡорт хөкүмәте совет власы яғына сығыу мәсьәләһен рәсми рәүештә ҡарар өсөн ултырыш йыйған. Башҡорт хөкүмәте Советтарға үтенес менән мөрәжәғәт итергә уйламаған, ул үҙ көсөн һәм хоҡуғын белеп, Советтар менән тик үҙ-ара килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорорға иҫәп тотҡан. Был килешеүҙә башҡорттар үҙ өҫтөнә контрреволюцияға ҡаршы сығырға йөкләмә алмаҡ иткән, ә Советтар алдына һис кисекмәҫтән, Бәләкәй Башҡортостан күләмендә булһа ла, башҡорт автономияһын таныу, Башҡорт ғәскәрен бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү, Башҡортостанда эске тәртипте һаҡлау эшен башҡорт ҡораллы төркөмдәренә тапшырыу, большевиктарға ҡаршы йөрөгән башҡорт эшмәкәрҙәрен аҡлау талабын ҡуймаҡ булған. Шул шарттар менән Башҡорт хөкүмәте бик йәшерен рәүештә фронт һыҙығы аша Гәрәй Ҡарамышев менән Сәләх Атнағоловтан торған тәүге вәкәләтен ебәргән. Ләкин Ҡарамышевты казактар тотоп алған, Атнағолов ҡурҡҡан, тәүге вәкәләт тейешле йомошто үтәй алмаған. Ебәрелгән вәкәләттең яҙмышы хаҡында хәбәрһеҙ ултырған Башҡорт хөкүмәте, уның өндәшмәгәненә аптырап, шиккә ҡалған. Шулай булһа ла, Колчак менән килешергә уйламаған.

1918 йылдың 3 декабрендә Башҡорт хөкүмәте башҡорт полктарына Дутовтың һуғыш ҡырына ебәреү хаҡындағы бойороғон үтәмәҫкә әмер биргән. Ул ҡайһы бер казак даирәләренең ярҙамы менән Ырымбурҙағы Дутов власын ҡолатырға булған. Ләкин ниәт барып сыҡмаған, Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙан Башҡортостандың төпкөлөнә, Баймаҡ ауылына, ҡасырға мәжбүр булған.

Был мәлдә Ҡыҙыл ғәскәрҙең Көнсығыш фронты һөжүмгә күскән. Шул уңай менән совет командованиеһы Колчак ғәскәрҙәре араһында мөрәжәғәт тарата башлаған. Башҡорт ғәскәрҙәренә махсус өндәмәләр ебәрелгән. Ул өндәмәләр һәр төрлө яла, ялған менән тулы булған, ҡыҙылдарҙың башҡортҡа ҡылған яуызлығын аҡларға тырышҡан, ләкин шул сүпсар араһынан уларҙың башҡортто көслө халыҡ тип, үҙ мәнфәғәттәре өсөн көрәшергә хаҡлы милләт тип таныйғаны күренеп торған. Йыл башында ундай нәмәнең әҫәре лә булмаған. Шул яғы менән совет өндәмәләре вәкәләттән хәбәр ала алмай аптырап торған Башҡорт хөкүмәтенең иғтибарын тартҡан һәм ул совет яғына сығыу мәсьәләһен ҡарар өсөн тағы ултырыш йыйған. Ултырыштың ҡарары менән 1918 йылдың 15 декабрендә фронт һыҙығы аша хөкүмәт ағзалары Муллаян Халиҡов менән Хәйретдин Сәғитовтан торған икенсе вәкәләт ебәрелгән.

Вәкәләт ебәргәс, Башҡорт хөкүмәте әҙерлек саралары күрә башлаған. Төп мәсьәлә төрлө ергә таратылған башҡорт ғәскәри берәмектәрен бер урынға туплау мәсьәләһе булған. Был мәсьәлә иң мөһим генә түгел, иң ауыр мәсьәләгә әйләнгән: Колчак командованиеһы ҡуйған төрлө сик-кәртәне үтергә, шул уҡ ваҡытта ғәскәрҙе бергә туплау маҡсатын ҡаты сер итеп тоторға кәрәк булған. Бер ҡаршылыҡҡа ла ҡарамай, 1919 йылдың 16 ғинуар көнөндә Башҡорт хөкүмәте үҙенең полктарын икенсе яҡҡа сығыр өсөн уңайлы бер урынға тотош йыйып алған. Шул уҡ ваҡытта ул үҙ ғәскәрен аҡ рус офицерҙарынан таҙартып, тағы бер ҙур эш эшләгән. Шулай итеп, башҡорттар алда тағы ла яманыраҡ бәлә һәм ҡаза көткәнен белмәй, үҙҙәренең яңы тарихи аҙымына әҙерләнгән.

***✓ Беҙҙә, рус мәктәбендә, хәҙер башҡорт телен уҡытыу аҙнаһына бер сәғәткә ҡалды. Шуға күрә бер аҙнала - башҡорт телен, икенсе аҙнала башҡорт әҙәбиәтен уҡытабыҙ, йәғни 0,5 килеп сыға.***

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН бергәләп

**Мәғариф өлкәһен, аныҡлап әйткәндә, башҡорт телен һәм әҙәбиәтен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу буйынса проблемаларҙы асыҡлай башлаһаң, уларҙың осона сығырлыҡ түгел. Ләкин проблеманы хәл итмәһәң, ул йылдар буйына йыйылып, бер килеп һытыла. Бөгөн ошо "шеш" тулышҡан. Башҡорт теле уҡытыусыларының Беренсе Бөтә Рәсәй съезы ғына уны хәл итә алырмы? Бөгөн ошо һәм башҡа һорауҙарға яңы ғына булып үткән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2019" республика бәйгеһе ҡатнашыусылары: Туймазы ҡалаһынан Гөлмира БИКБУЛАТОВА, Нефтекаманан Роза ХӨСНУЛЛИНА, Белореттан Сәриә ҠАҺАРМАНОВА менән бергәләп яуап табырға тырыштыҡ.**

**▸ 10-12 апрелдә Башҡортостанда беренсе тапҡыр Башҡорт теле уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй съезы үткәрелә. Һеҙ унда ниндәй темалар күтәрелеүен теләр инегеҙ һәм был сараның ниндәй һөҙөмтәләренә өмөт итәһегеҙ?**

**Сәриә Ҡаһарманова:** Ниməһе ҡыуандыра: съезд үткәреү генә лә республикала телгә, башҡорт теле уҡытыусыларына ҡарата ҡараш үҙгәрә башлауына бер ишара. Шуға уға ҙур өмөттәр бағлайым һәм унда башҡорт теле уҡытыусыларының ғына проблемаларын түгел, ә башҡорт телен уҡытыуҙа булған проблемалар күтәрелер, уларҙы хәл итеү юлдары эҙләнер, шәп тәҡдимдәр индерелер, тип уйлайым. Әммә иң ҡурҡҡаным, электән килгән йола буйынса, сығыштар бер-беребеҙҙе маҡтауға ҡоролмаһын ине, тигән теләктәмен.

**Гөлмира Бикбулатова:** Был съезды беҙ күптән көтә инек, күңелгә ниндәйҙер йылылыҡ инде. Яңылыҡты ишетеү менән шул тиклем нык ҡыуандыҡ һәм ул көндәр етеүен түҙемһеҙлек менән һанайбыҙ. Ысынлап та, беҙҙең проблемалар күп, телебеҙ, халҡыбыҙ яҙмышы, башҡорт телен уҡытыу сифатын күтәреү юлдарын шул съезда уртаға һалып һөйләшеп, бөтөн проблемаларҙы хәл итеп, уның сығыу юлдарын билдәләп, киләсәккә пландар ҡороп, алға ҡараш ташлап, бурыстар ҡуйып, шул мәсьәләләрҙе хәл итербеҙ тигән өмөт бар. Тағы: уҡытыусылар съезы тигәс тә, балалар баҡсаларындағы тәрбиәселәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамайҙыр, минеңсә, сөнки тәрбиә, башҡорт теленә һөйөү уятыу өҙөклөкһөҙ барырға тейеш. Элек балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре, балаларҙы башҡортса уҡытыу, тәрбиәләү бар, балалар мәктәпкә рухлы булып килә ине. Хәҙер юғалды бындай эҙмә-эҙлелек. Съезда балалар баҡсаларынан уҡ башҡортса тәрбиәләү, уҡытыу мәсьәләһен дә мотлаҡ күтәрергә кәрәк.

**Роза Хөснуллина:** Барлыҡ уҡытыусыларҙы ла әлеге ваҡытта иң борсоған мәсьәлә - ул биш көнлөк уҡыуға күскәс, башҡорт теленең, әҙәбиәтенең, дәүләт теле булараҡ уҡытыу дәрестәренең мәктәп программаларында ҡалдырылыу-ҡалдырылмауы, ҡыҫҡартылыу-ҡыҫҡартылмауы. Был бөгөн - иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе, сөнки дәрестәр ҡыҫҡартылып, уҡытыусыларҙың сәғәттәре лә кәмеһә, башҡорт теле уҡытыусыларының да күпләп мәктәптән китеү хәүефе алдында торабыҙ. Икенсеһе - уҡытыусының абруйын дәүләт кимәлендә күтәреү зарурлығы. Ни өсөн Финляндияла педагогик уҡыу йорттарына конкурстар ҙур, ни өсөн унда уҡытыусы һөнәренә йәбешеп яталар? Улар, беҙҙең иң аҡыллы уҡыусыларыбыҙ уҡытыусы һөнәрен һайлай, ти. Тимәк, унда уҡытыусыларҙың хеҙмәте финанс йәһәтенән дә, йәмғиәттәге тотҡан урыны буйынса ла юғары баһалана. Шәп быуын тәрбиәләргә теләйбеҙ икән, беҙҙә лә уҡытыусыларҙың абруйын күтәрергә кәрәк.

**▸ Йәшерен-батырыны юҡ, ҡайһы ваҡыт шундай оло ҡорҙарҙа "туй генералдары" күберәк була, ә ысын мәғәнәһендә тел өсөн янып-көйөп, баш баҫып эшләүсе практиктар ситтә ҡалыусан. Һеҙ ошо съезға ниндәй делегаттарҙың килеүен теләр инегеҙ?**

**Гөлмира Бикбулатова:** Мин бар күңелен һалып эшләгән уҡытыусылар менән бер рәттән, яңы ғына эш башлаған һәм 10-15 йыл эшләгән, ниндәйҙер кимәлдә бер урында тапанып ҡына йөрөгән уҡытыусыларҙы ла съезға ебәрер инем. Ни өсөн тигәндә, улар янып йөрөгән уҡытыусыларҙың дәртен күреп, үҙҙәренең күңелдәрендә ла өмөт шәмен яндырып, рухланып ҡайтып, һәр береһе үҙ төбәгендә эште тағы ла йәндәндереп ебәрер ине, тип уйлайым.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Мин тормоштоң ыңғай яғын да, матур итеп күрһәтелгән нәмәләрҙең кире яғын да күрергә өйрәнгәнмен, шуға, делегаттар булып беренсе нәүбәттә буш боғаҙҙар, ҡоро һүҙ һөйләп кенә йөрөүселәр үтеүе ихтимал, тип хәүефләнәм. Ҡайһы берҙә шунда ҡатнашыуҙың дәрәжәһе-даны өсөн генә йөрөүселәр ҙә бар, шундайҙар булмаһын ине. Тартҡан атҡа нығыраҡ тейәйҙәр, тигәндәй, эшен яратып, бар күңелен һалып башҡарған уҡытыусылар баш баҫып эшләй, тирә-яҡтарына күҙ һалырға ла ваҡыттары ҡалмай. Бына шундай уҡытыусыларҙы ситтә ҡалдырмаһындар ине, сөнки уларҙың нисәмә йылдар эшләп, әйтә торған һүҙҙәре бик күп йыйылған.

**Роза Хөснуллина:** Минеңсә, ҡала-районда, ауылда ниндәйҙер дәрәжәһе булған, һүҙе үткән һәм үҙ һүҙен, фекерен әйтергә ҡурҡмаған, башҡаларҙың да фекерен оло ҡорға алып килеп еткерә алған, башҡорт телен, башҡорт халҡын күтәрерҙәй уҡытыусылар ҡатнашырға тейеш съезда. Әле мин төньяҡ-көнбайыштан килгәс, унда шундай шәп уҡытыусылар бар, тип һис шикһеҙ әйтә алам. Улар башҡорт телен күтәрәбеҙ, башҡорт балаларын уҡытабыҙ, башҡа милләт балаларына башҡорт телен өйрәтәбеҙ, тип янып эшләй. Шуларға ярҙамлашып, уларға иғтибар итеп, уларҙың эштәрен күтәреп, күрһәтергә кәрәк.

**▸ Съезда, минеңсә, башҡорт телен артабан нисек уҡытыу, бөгөнгө глобалләшеү заманында уны нисек һаҡлап ҡалыу темалары, әлбиттә, күтәреләсәк, телебеҙҙе башҡа милләттәр ҙә теләп, яратып өйрәнһен, уға дәүләт тарафынан ихтирам, иғтибар, яҡлау булһын өсөн дә тырышырға кәрәк. Һеҙ проблеманы төптән беләһегеҙ, трибуна артына сығып ҡына хәбәр һөйләгән кешеләр түгел, ә шул ҡаҙанда ҡайнап йөрөүселәр. Бөгөн нимәне үҙгәртергә кәрәк: методиканымы, дәреслектәрҙеме, әллә бөтөнләй мәғариф системаһы реформа талап итәме?**

**Гөлмира Бикбулатова:** Практик уҡытыусы булараҡ, шуны әйтер инем: яңы дәреслектәр сығып тора, практик уҡытыусыларҙың фекерҙәрен, тәҡдимдәрен иҫәпкә алып төҙөлгәндәре лә бар. Әммә улар аҙнаһына өс сәғәтлек уҡытыу программаһы өсөн сыҡҡан. Ә хәҙер беҙҙең дәрестәр, мәҫәлән, аҙнаһына бер генә сәғәткә ҡалды. Шуға, дәреслектәрҙе ҡыҫҡартып, темаларҙы берләштерепме, ҡабаттан эшләргә кәрәк. Шундай ауырлыҡтар бар.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Башҡорт телен уҡытыу методикаһы тиһәң, нисек уҡытырға өйрәтеүсе кешеләр бик күп, социаль селтәрҙәрҙә лә бар улар. Хатта мәктәптә 1-2 йыл эшләп, икенсе урынға күсеп, "мин эшләгән дәүерҙә шулайта торғайным", тип, күпертеп һөйләп, аҡыл һатырға яратҡандар ҙа күп. Мин, мәҫәлән, педагогика системаһында 38 йыл эшләйем, әммә берәүгә лә кәңәш бирергә батырсылыҡ итмәҫ инем. Бөгөн башҡорт телен уҡытыуҙың методикаһы дөрөҫ түгел, шуның өсөн бигерәк тә рус мәктәптәрендәге башҡорт балаларын уҡытыуҙа йәки бүтән милләт балаларына башҡорт телен өйрәтеүҙә сит тел уҡытыу методикаһына күсергә кәрәк, тиҙәр. Сағыштырып ҡараһаҡ, мәктәптә аҙнаһына өс сәғәт инглиз теле уҡытыла, берәүҙең дә шартлатып инглизсә һөйләшкәнен ишетмәйем, әле берәүҙең дә инглиз теленән юғары мәрәй йыйып, БДИ биргәнен күргәнем юҡ. Шулай булғас, ни өсөн беҙгә уны тәҡдим итәләр? Башҡорт телен уҡытыу методикаһын әллә ни насар тип әйтмәҫ инем. Әммә уны дөрөҫ ҡулланабыҙмы, юҡмы - шуныһы ла бар. Уҡытыу бит уҡытыусыға бәйле. Үҙебеҙҙең бала саҡты уйлағыҙ: әгәр уҡытыусы күңелгә ятһа, балалар менән уртаҡ тел тапһа - ул предметты ярата торғайныҡ. Мәҫәлән, мин 7-се класҡа еткәнсе физиканы үлә яҙып яраттым, 9-сы класта немец теленә ғашиҡ булдым, сөнки яңы уҡытыусы килде лә шунда уҡ балалар күңеленә юл тапты. Икенсенән, дәреслектәрҙән дә күп нәмә тора. "Эш дәфтәрен төҙөүселәр менән китап яҙыусылар, һеҙ бер-берегеҙҙе был тормошта күргәнегеҙ бармы?" тип һорайҙар ине бер заман социаль селтәрҙәрҙәге аралашыуҙа. Ә мин "Башланғыс синыф өсөн әҙәбиәт дәреслеген төҙөгәндәр менән урта кластар өсөн китап яҙыусылар бер-берегеҙ менән тап булышаһығыҙмы, осрашаһығыҙмы, аралашаһығыҙмы?" тиер инем. Сөнки тулы анализ яһамайынса, бер генә миҫалға туҡталып киткәндә лә килешеп эшләү булмауы күренеп тора. Мәҫәлән, Фәрзәнә Аҡбулатованың мин яратҡан "Атай икмәге" хикәйәһе бар. Уҡыусыларҙы башланғыс класта икенсе кеше уҡыта ла, мин гелән 5-се кластан алып китә торғайным. Шундай бәхет электе - алты йыл элек беренсе кластан башҡорт теле һәм әҙәби уҡыу дәрестәрен алып бара башланым. Шунда 4-се класта Ф. Аҡбулатованың ошо хикәйәһе булыуын асыҡланым. Уны тулы кимәлдә тиерлек уҡып сыҡтыҡ, булмаған өлөшө менән төп нөсхәнән таныштыҡ, "Юлдаш" каналындағы әҙәби уҡыуҙарҙан да тыңланыҡ. Хатта башҡортса аңламаған ярым урыҫ балалары ла күҙҙәренә йәш төйнәләп, тыңлап ултырҙы. 5-се класс дәреслегендә шул уҡ хикәйә, шул уҡ күләмдә бирелгән. Ни өсөн дәреслеккә Әнғәм Атнабаевтың матур шиғырҙарын индермәҫкә? Салауат Юлаев, Мостай Кәримгә ҡаршы бер һүҙем дә юҡ, әммә Салауат Юлаев шиғырҙары башланғыс кластан алып 9-сы класҡа тиклем ҡабатлана. Рәми Ғариповтың да, Мостай Кәримдең дә бер үк шиғырҙары бер-ике йыл аша ҡабатлана ла бирелә. Ана шуларҙы юлға һалмай тороп, уҡытыусыны ғына ғәйепләп ҡалдырыу дөрөҫ түгелдер, тием. Балыҡ башынан серей, тигән шикелле, баштан уҡ ҡарап, тикшереп, дөрөҫ итеп эшләү ҙә кәрәктер.

Башҡорт телен уҡытыу буйынса ла һаман аңлашылмаусылыҡтар бар: былтыр беҙгә, башҡорт гимназияһына, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытырға тигән күрһәтмә төшөрҙөләр. Был - аҡылға һыймаҫлыҡ хәл.

**▸ Мәктәп мәғарифының беренсе республика форумында уҡытыуҙы биш көнлөккә күсереүҙе барыһы ла хуплап ҡаршы алһа ла, бөгөн уның ниндәй хәүеф тыуҙырыуын, уҡытыусыларҙаң ошо мәсьәлә буйынса борсолоуын беренсе һорауҙа уҡ асыҡланыҡ. Ошо темаға ентекләберәк туҡталып китәйек, булмаһа…**

**Сәриә Ҡаһарманова:** Мәғариф системаһында эшләүселәр һәм ҡыҙыҡһыныусылар белә: уҡыу программаһына ингән күп предметтар мотлаҡ уҡытылырға тейешле һәм аныҡ билдәле сәғәттәр менән федераль кимәлдә раҫлана. Уларҙы бер нисек тә ҡыҫҡартып булмай. Бынан тыш, башҡорт теле дәрестәрен өҫтәмә уҡытыуға (внеурочкаға) күсереү хәүефе лә янай. Программаны үтәүгә мөмкинлек бирҙек, тиерҙәр. Әммә закон яғынан ҡарағанда, өҫтәмә дәрестәргә бала үҙ теләге менән генә йөрөй. Икенсенән, уҡытыусы өсөн ул ҡәҙимге дәрескә ҡарағанда әҙерәк түләнә. Тимәк, ауырлыҡ һәм көс туған телдәргә төшәсәк. Шуға ла, ата-әсәләр менән ныҡлап эшләргә кәрәк, улар ҙа, балалар ҙа, мәктәп етәкселеге лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен ҡыҫҡартыуға юл ҡуймаҫҡа тейеш.

**Гөлмира Бикбулатова:** Съезда ла был мәсьәлә күтәрелер һәм уны хәл итеү буйынса ныҡлы ҡарар ҡабул ителер, тип ышанғы килә. Имеш, уҡытыу предметтары шул килеш ҡала, дәрес оҙайлығы ғына кәметелә, тиҙәр. Әлеге ваҡытта аҙнаһына бер сәғәт менән балаларға башҡорт телен тейешенсә өйрәтеү мөмкин түгел. Беҙҙә, рус мәктәбендә, хәҙер башҡорт телен уҡытыу аҙнаһына бер сәғәткә ҡалды. Шуға күрә бер аҙнала - башҡорт телен, икенсе аҙнала башҡорт әҙәбиәтен уҡытабыҙ, йәғни 0,5 килеп сыға. Бер аҙнала телде уҡыныҡ та, икенсеһендә әҙәбиәт, өсөнсөһөнә тиклем бала нимә уҡығанын онотоп бөтә. Иҫтәренә төшөргәнсе тағын дәрестең байтаҡ ҡына арауығы үтеп китә. Аҙнаһына бер дәрес дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Был бик әҙ. Элек өсәр сәғәт булғанда рәхәтләнеп олимпиадаға ла әҙерләй, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашҡан балаларға фәнни эштәр яҙырға ярҙам итә инек. Быға тиклем шундай йолабыҙ бар ине - юбиляр яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен сәхнәләштереү. Хәҙер туҡталып ҡалды. Сәхнә аша балаларҙың телмәрен үҫтереп, уларҙа рух тәрбиәләп була. Сәхнәлә сығыш яһап, балалар ҡурҡыуҙы еңергә, тамашасыһына тура ҡарап һөйләргә өйрәнә. Әммә бөгөн күп эштәребеҙ туҡтап тора, сөнки балаларға бер сәғәт эсендә белем биреп өлгөрөп булмай. Дәрес оҙайлығы ҡыҫҡарһа, тағы ла ҡыйыныраҡ буласаҡ. Әле лә ҡайһы бер уҡытыусыларҙың дәрестәре бер ставкаға ла тулмай, ҡайһылары эштән китергә мәжбүр булды.

**▸ Тәрбиә, шул уҡ ваҡытта телгә һөйөү тәрбиәләү ҙә ғаиләлә һалына, тибеҙ, шул уҡ ваҡытта ата-әсәнең балалар менән шөғөлләнергә ваҡыты юҡ: улар ике-өс эштә эшләй, кем ипотека түләй, кем кредит. Хатта ауыл ерендә лә ваҡыт таба алмайҙар. Олатай-өләсәйҙәр ҙә бушамай. Ә бит балаға бәләкәй ваҡытта ни тиклем күберәк мәғлүмәт бирелә, уға ни тиклем күберәк һеңә, уның нигеҙе шул тиклем ныҡлыраҡ, төплөрәк була. Тимәк, төп ғәйеп ата-әсәлә, олатай-өләсәйҙәрҙә?**

✓ *Уҡытыусының шәхси аралашыуы ла мөһим роль уйнай. Мин дәресте алып барам да, урынлы ғына итеп халыҡ йырҙарын йырлайым. "Уралым"ды йырлағанда балалар бөтөнләй иҫтәре китеп, шып-шым ҡалып тыңлай.*





# ЯҠЛАРҒА...

## булдырабыҙ!

**Гөлмира Бикбулатова:** Бөгөн балаларҙың ата-әсәләренең үҙҙәрен уҡытырға, тәрбиәләргә кәрәк, тиер инем. Балаға телефон тотторалар ҙа, телевизорҙы асып ҡуялар ҙа - иң мөһиме, иламаһын, тауышланмаһын. Ә бит шул ваҡытта башҡортса йәнһүрәттәр, башҡортса йырҙар, әкиәттәр ҡуйырға ла мөмкин. Ата-әсә балаға тәрбиәне нисек бирә - барыһы ла шунан тора. Беҙ, мәҫәлән, Татарстан сигендә йәшәйбеҙ. Улдарыбыҙҙы рухлы башҡорт итеп тәрбиәләй алдыҡ тип ғорурлыҡ менән әйтә алам. Балаларым саф башҡортса һөйләшә. Бәләкәй саҡтарында миңә килеп русса һүҙ ҡушһалар, уларҙы бөтөнләй "аңламай" йәки "ишетмәй" инем. Башҡортса һүҙ ҡушһалар, шунда уҡ аңлайым да, ишетәм дә. Шулай итеп уларға туған телен онотоға бирмәнек, матур итеп һөйләшергә өйрәнделәр. Бөгөн дә ата-әсәләр балаларын шулай тәрбиәләһен ине. Күп кенә башҡорт милләтенән булғандар татар районына килен булып төшәләрме йәиһә эшкә баралармы, үҙ телдәрен "онотоп" урындағы телдә "сутырҙай" башлайҙар. Бына ошондай күренештәр үҙ телебеҙ яҙмышына кире йоғонто яһай. Күп кенә ошондай башҡорт әсәйҙән башҡа милләт балаһы тыуа ла инде.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Бала өсөн мөхит ҙур роль уйнай. Ауылда ни өсөн балалар барыбер башҡортса һөйләшә, сөнки өйҙә, ғаиләлә улар менән берәү ҙә русса һөйләшеп ултырмай. Мин ауылға ҡайтһам, туғанымдың дүрт йәшлек балаһы, мине русса өйрәт, тип аптырата. Русса берәй һүҙ әйтһәм, йүгереп өйгә инеп китә лә, сығып башҡортсаһын әйтә. Баҡтиһәң, ул элекке кассеталы мультфильмдарҙы ҡуйып ҡарап ала ла, һүҙ иҫенә төшһә, сығып әйтә икән. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеүҙә, баланың теле асылыуҙа йәнһүрәттәр ҙур роль уйнай, йоғонто яһай. Бәләкәстәрҙең бер мәғәнәһе булмаған сит ил йәнһүрәттәрен айырыла алмай ҡарауҙарынан сығып фекер йөрөткәндә, тимәк, башҡорттарға ла шундай кимәлгә етергә тырышырға кәрәк. Бер генә миҫал килтергем килә. "Кем ул рухлы башҡорт?" тигән темаға инша яҙҙырғайным, бер бала үҙенең фекерен яҙып аңлатҡан-аңлатҡан да: "Беҙҙең мәктәптә лә рухлы кешеләр эшләй тип уйлайым, сөнки башҡа фәндәрҙе русса уҡытһалар ҙа, рухлы булған ҡайһы бер уҡытыусылар дәрес араһында башҡортса һүҙ ҡыҫтыралар", - тип яҙған. Уҡытыусының башҡортса һүҙ ҡыҫтырғаны ла бала өсөн ҡыуаныс. Тимәк, уның күңеленә рух бәләкәйҙән, ғаиләлә һалынған.

**Гөлмира Бикбулатова:** Ысынлап та, башҡортса йәнһүрәттәр күберәк булһын һәм уларҙа тарихыбыҙ ҙа, ғаилә ҡиммәттәре, тәрбиә алымдары, баланың - ололарға, ололарҙың - балаға булған мөнәсәбәте, уларға ҡарата хөрмәте сағылһын ине.

**Роза Хөснуллина:** Нефтекамала миңә балалар баҡсаһында әкиәттәрҙе сәхнәләштереүселәр килде. Улар башҡорт әкиәттәрен белергә теләй, уларҙың тәржемәләре бармы, тип һорайҙар, таптырып алалар. Рус әкиәттәрен ҡуйып бөткәндәр ҙә, башҡорт әкиәттәрен күтәргеләре килә. Ә бына БДУ-ла математика-физика факультетында башҡорт телен уҡытҡан ваҡытта студенттарға легендалар, "Урал батыр" эпосы, Аҡбуҙат һ.б. тураһында һөйләй башлағайным, "Нишләп башҡорттар "Урал батыр" буйынса триллер төшөрмәй?" тип һорайҙар. Беҙҙең бай фольклор мираҫыбыҙҙы, әкиәт-легендаларыбыҙҙы матур итеп күрһәтергә өйрәнергә кәрәк.

**Филология фәндәре кандидаты Вәкил Хажин үҙенең сығыштарында бөгөнгө шарттарҙа уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүгә иғтибар бирергә саҡыра, сөнки грамматиканы уҡыған һәр кем белгес булып китмәй, күптәргә тормошта уның, бәлки, кәрәге лә юҡтыр. Балаларҙың телмәрен үҫтереү өсөн нимәләр эшләргә була?**

**Роза Хөснуллина:** Беҙ грамматиканы төбөнә төшөнөп өйрәнһәк, бөгөнгө балаларға, ысынлап та, фекерләү, телмәрен һәм хәтерен үҫтереү мөһим. Ә инде дөрөҫ яҙыуға килгәндә, башҡорт теле күберәгән нисек ишетелә - шулай яҙыла. Шуға был йәһәттән ауырлыҡтар һиҙмәйем. Үҙ эшемдә күргәҙмәлек, образдар, һүрәттәр аша һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм дөйөм текстарҙы иҫендә ҡалдырыу - ошондай методика менән эшләү яғындамын. Һүҙ концепты менән, образға бәйләп, һүҙ яланын булдырып өйрәтһәң, үҙенә күрә менталь карта килеп сыға һәм ул баланың хәтерендә нығыраҡ ҡала, телмәре лә, хәтере лә үҫешә.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Минеңсә, балаларҙан ҡағиҙә ятлатып ултырыу кәрәкмәй, шул уҡ нәмәне икенсе төрлө аңлатырға ла була. Мәҫәлән, уҡытам да, шул ҡағиҙәне хәтерҙәрендә ҡалдырыу өсөн үҙҙәренән үҙ һүҙҙәре менән әйттереп ҡарайым. Үҙ һүҙҙәре менән әйтә алғанда, бер нисә дәрестән һуң ҡабатлап һорағанда ла улар онотмай, хәтерҙәрендә ҡала.

**Гөлмира Бикбулатова:** Башҡорт теле, туған тел оҡшай икән, бала барыбер һеңдерәсәк, аңлаясаҡ. Һөйләшергә өйрәнһә, ул барыбер ниндәйҙер кимәлдә яҙа беләсәк. Әммә грамматиканы өйрәтергә, халыҡ педагогикаһы алымдарын да ташламаҫҡа кәрәк. Халҡыбыҙҙа мәҡәл-әйтемдәр, аҫыл һүҙҙәр бик күп. Беҙ балаларҙы ошо нигеҙҙә тәрбиәләһәк, улар барыбер белемле һәм рухлы булып үҫәсәк.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Беҙ үҫкәндә әҙәби китаптар бик булманы, әгәр берәй китап килеп сыҡһа, уҡытыусы ишек төбөнә берәүебеҙҙе баҫтырып ҡуя ла, китапты дәрестә ҡысҡырып уҡый торғайныҡ. Әҙәби әҫәрҙәрҙе яҡшы белдек. 4-5-се класта уҡығанда Әхмәт ағай Сөләймәновҡа открытка яҙып ебәрҙем. Ул уны ҡыҙыл паста менән төҙәткән дә, "адресат выбыл", тип кире һалған. Ҡып-ҡыҙыл ине, шул тиклем ғәрләндем, исмаһам, конвертҡа һалһа булмаймы инде, тип үпкәләнем. Грамматиканы ныҡлап өйрәнеүгә шул этәргес көс булды. Уның тағы бер һабағы: дәрестә эшләһәгеҙ ҙә, өйгә эш бирһәгеҙ ҙә, балаларҙың фекерен, зиһенен бүлгеләйһегеҙ, тигәйне. Мәҫәлән, ниндәйҙер һүҙ төркөмө буйынса 10 һөйләм яҙып килергә ҡуштығыҙ, ә бала тулайым текст буйынса һөйләргә, яҙырға өйрәнергә тейеш, ти. Һеҙ дөйөм картинаны тарҡатаһығыҙ, шундай хата һеҙҙән, мәктәп уҡытыусыларынан башлана, тигәйне. Ысынлап та шулай һәм мин шуны иҫәпкә алып, өйгә эш биргән ваҡытта текст - мини-иншалар яҙҙырам, сөнки бала унда һүҙ төркөмөн дә индерә, уның эше лә үтәлә, һөйләмдәре лә бер-берећенә бәйләнеп килә. Был алым балаларҙы фекерләргә өйрәтә.

**Беҙ балаларҙы нисек тә булһа уҡытырға, уйлап ҡараһаң, уларға үҙебеҙ теләгән нәмәләрҙе бирергә ныҡышабыҙ, ә бөгөн уларға нимә кәрәк, уларҙы нимә ҡыҙыҡһындыра? Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, уларҙың ҡыҙыҡһыныуының бер өлөшө булып заманса технологиялар, гаджеттар тора. Ошо мөмкинлектәрҙе башҡорт теле дәрестәрендә баланы ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп нисек ҡулланырға?**

**Гөлмира Бикбулатова:** Гаджеттар тигәндән, мин learningApps онлайн сервисын ҡулланам. Ул сервиста 4-се йыл эшләйем. Кабинет, логин-пароль булдырғанмын һәм 50-гә яҡын эш төрөм бар. Улар һәр бер темаға әҙерләнгән. Дәрестә лә эшләп алалар, өйгә эш итеп тә бирәм. "Интернеттан эҙләмәгеҙ, мин ундағы яуаптарҙы яттан белеп бөткәнмен", - тием. Балаларға ниндәй китаптар ҡулланырға икәненә йүнәлеш бирәм, улар китапханаларҙа мин әйткән китаптарҙы алып, шулай әҙерләнә. Күптәр тиҙ генә интернеттан ҡарап, яуап яҙа ла, ебәрә, миңә электрон почтаға хәбәр килә, шунда уҡ ҡарап, яуап яҙам. Кемдер тырышып, матур итеп, ысынлап та китаптарҙан эҙләнеп эшләй икән, уға киләһе дәрестә сығыш яһарға ҡушам. Был алымды бөгөн һөҙөмтәле тип әйтә алам. Ғилми-ғәмәли конференцияларға әҙерләнгәндә лә шунда уҡ һорауҙарына яуап яҙырға, йүнәлеш бирергә, төҙәтеп ебәрергә мөмкин. Был да балаларға мотивация булып тора.

**Роза Хөснуллина:** Уҡытыусының шәхси аралашыуы ла мөһим роль уйнай. Мин дәресте алып барам да, урынлы ғына итеп халыҡ йырҙарын йырлайым. "Уралым"ды йырлағанда балалар бөтөнләй иҫтәре китеп, шып-шым ҡалып тыңлай. Шунан уҡытыусының нәфис һүҙе лә балаларҙы ылыҡтыра тиер инем. Ҡайһы берҙә урыҫ балалары башҡортса шиғыр уҡыуымды һорай.

**Сәриә Ҡаһарманова:** Балаларҙың үҙҙәренә нимә кәрәк, тип кенә уларҙың яйына ҡуйһаҡ, әллә ни алға китеш булмаҫ, сөнки улар интернетты яҡшы беләләр тиһәк тә, кәрәкмәгән нәмәне белә, кәрәккәнен белмәй, шуға контролдә тотоу ҙа, дөрөҫ юлға матур ғына итеп төшөрөп ебәреү ҙә насар түгел. Яңы технологиялар, яңы алымдарға килгәндә, мин балаларға Википедияны дәрестә нисек итеп ҡулланыу серҙәрен асам. Улар мәҡәләләрҙе тулыһынса яҙмаһалар ҙа, Википедияның нимә икәнен белә, кәрәк нәмәләрҙе эҙләп ала, нисек эҙләргә икәнен, хата төҙәтергә белә. Википедияла уларҙың эшләү оҫталығы ла арта, башҡорт телен дә өйрәнәләр, минең өлгәлә сәфәргә сығыу мөмкинлеге менән ҡыҙыҡһыналар. Нисек кенә яңы технологиялар тимәһендәр, һәр кем бала күңеленә юлды үҙе таба. Минеңсә, балаларҙы үҙ яйына ҡуйырға ярамай, киреһенсә, уларҙың күңеленә юл табып, ҡайҙалыр маҡтап, ҡайҙалыр хуплап туған телгә һөйөү тәрбиәләргә кәрәк.

**Биш көнлөк уҡыуға күсеүгә ҡабат урап ҡайтһаҡ, буш ҡалған алтынсы көндө ниндәйҙер файҙалы итеп үткәреү мөмкинлеген булдырыу тураһында ла һүҙ бара - түңәрәктәр, сәйәхәттәр һ.б. Был көн башҡорт телен үҫтереү өсөн тағы бер мөмкинлек түгелме, әгәр шуны дөрөҫ итеп ҡуллана белгәндә?**

**Сәриә Ҡаһарманова:** Был тағы ла финанслау яғынан да һорау тыуҙыра. Мәҫәлән, мин үҙемә бирелгән сәғәттәрҙе биш көн эсендә уҡытып бөттөм, ти. Ни өсөн шәмбе көндө сығып, бер көн бушлай эшләргә тейешбеҙ - шуны аңламайым. Былай ҙа ваҡыт менән иҫәпләшмәй эшләйбеҙ бит. Икенсе яҡтан, гимназия уҡыусыларының барыһының да олатай-өләсәйҙәре ауылда йәшәй, күпселек ата-әсәләрҙең шәмбе - ял көнө, улар ҡойроҡтарын һыртҡа һалып, ауылға һыпыртасаҡ. Шулай уҡ, имеш, ошо программала ҡатнашҡан башҡорт һәм инглиз теле уҡытыусыларының эш хаҡына өҫтәмә буласаҡ икән, тигән һүҙҙәр ҙә ишетелә. Был тағы ла һорау тыуҙыра, ҡайһы бер мәктәптәрҙә, уларҙың эш хаҡы барыбер арта, тип, дәрестәрҙе ҡыҫҡартыуҙары ла ихтимал. Миҙал ике яҡлы.

**Гөлмира Бикбулатова:** Балаларҙың һәләтен үҫтереү, сәхнәгә сығарыу, сәхнәләштереү һымаҡ айына бер тапҡыр булһа ла шул шәмбене ҡулланабыҙ икән, уҡытыусының эше лә баһаланырға, финанс мәсьәләһе ҡаралырға тейеш. Сөнки уҡытыусының да ғаиләһе, йорто, хужалығы бар, уҡытыусы ла шул уҡ кеше бит. Шуға был мәсьәләне аҡыллы ғына итеп хәл итергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Съездар, конференциялар, йыйылыштар үтә лә китә, әммә унда ҡабул ителгән ҡарарҙар, матур тәҡдимдәр тормошҡа ашырылмай тороп, алға китеш булмаясаҡ. Ошо тәҡдим-фекерҙәр ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын өсөн нимә эшләргә кәрәк? Сөнки, ҡағиҙә булараҡ, нимә булһа ла башҡорт теле уҡытыусылары ғәйепле булып ҡала, әммә закондарҙы, ҡағиҙәләрҙе, стандарттарҙы етәкселәр ҡабул итә, ә башҡорт теле уҡытыусыларының власть әһелдәренән, депутаттарҙан, ошо съезда ҡатнашҡан власть стуктуралары вәкилдәренән закон сиктәрендә нимәлер талап итергә хоҡуғы юҡмы ни?" - тигән һорауға әңгәмәлә ҡатнашыусы уҡытыусылар бер тауыштан тиерлек түбәндәгесә яуапланы: "Хоҡуҡлы, әлбиттә. Уҡытыусылар, Мәғариф министрлығының милли мәғариф бүлеге, Обрнадзор, Мәғарифты үҫтереү институты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ата-әсәләр комиссиялары бер булып съезда ҡабул ителгән резолюцияларҙы контролгә алырға тейешбеҙҙер. Беҙ бер төптән булып башҡорт телен яҡлап сыҡһаҡ ҡына булдырабыҙ һәм булдырасаҡбыҙ, һәр хәлдә, ошоно девиз итеп алып, ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшергә тейешбеҙ".**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

***✓ Шул саҡ Федя яйлап ҡына ҡул таяғының осо менән тәүҙә үҙенең алдындағы эстәкәнде, шунан үрелеп яртылаш тулы (әллә яртылаш бушмы) шешәне ауҙарҙы. Эсендәге шыйыҡсалар ағып, үлән араһына инеп юғалды.***




Мостафа ҡарт тәүҙә тертләне, шунан дәртләнеп китте. Тороп баҫып ул да йөрәкһеп шиғыр һөйләргә тотондо.

- *Плыл по океану рыжий остров.*
*В море в синем остров плыл гнедой.*
*И сперва казалось - плавать просто,*
*Океан казался им рекой.*
*Но не видно у реки той края.*
*На исходе лошадиных сил*
*Вдруг заржали кони, возражая*
*Тем, кто в океане их топил,* - күпте белгән, күпте күргән ауылдың аҡһаҡалы шиғырҙы туҡтап-туҡтап, иҫенә төшөрә-төшөрә һөйләне.

- *Кони шли на дно и ржали, ржали,*
*Все на дно покуда не пошли.*
*Вот и все. А все-таки мне жаль их -*
*Рыжих, не увидевших земли.*

Шиғыр тамамланғас, тынып ҡалдылар. Әйтерһең дауыл үткән дә, диңгеҙ тынысланып йоҡлай. Уның талғын тулҡындары өҫтөндә бер ни юҡ. Ат өйөрө лә йотолмаған. Ҡолаҡты йыртыр тынлыҡ. Һиллекте һаҡ ҡына өлкән кеше боҙҙо:

- Беҙ йәш саҡта бик популяр ине был шиғыр, яттан һөйләй торғайныҡ. Ғилман оҫта тәржемәләгән. Урыҫтарҙың Слуцкий тигән шағирыныҡы ул.

- "Кони шли на дно и ржали, ржали..." Шул юлдарҙы нисек тыныс ҡына һөйләй алаһыңдыр? Йәл дә инде. Шиғырҙың аҙағын үҙгәртергә кәрәк тип шағирҙы эҙләп сығып киткәйнем дә. Тик барьерҙы үтеп булманы, - Шамил гипслы аяғына һуғып алды.

- Ғилман үткән йыл аварияла һәләк булды, февраль айында. Слуцкий Брежнев заманында уҡ үлгән. Юҡҡа һикереп маташҡанһың. Шағирҙар юҡ. Өфөлә лә... Шулай булғас, аҙағын үҙеңә үҙгәртергә тура килер. Үҙеңде йәллә.

- Мин яҙа белмәйем, ул тиклем башым да юҡ.

- Башың бар. Эшләтергә кәрәк уны. Ана шул аттар, ҡиблаһын таба алмай диңгеҙҙә йөҙөп йөрөгән аттар - беҙ ул. Ул өйөр - һин, мин, атыңды менеп барған Рәүеф тә... Беҙ барабыҙ диңгеҙҙә. Барыр утрауыбыҙ, сығыр ярыбыҙ юҡ. Беҙ яҙабыҙ ул шиғырҙы.

- Нисек яҙабыҙ һуң?

- Быныһы беҙҙән тора. Батмайыҡ тиһәк, өйөрҙө диңгеҙҙә ҡалдырырға ярамай.

Шоманың күҙҙәрендә бер аҙ нурҙар уйнап китте. Шунан ул йылмая биреп:

- Күктән килеп төштө летающий тәрилкә, аттарҙы ул Башҡортостанға илтә. Барамы шулай? - тине.

- Бармай! Етәр күктән көтөргә. Үҙегеҙ ҡыймылдағыҙ. Бәйгелә янған тайҙар, ана егелегеҙ тормош һабанына.

Мостафа ҡарт киткәс, Шамил ултыра бирҙе әле ҡапҡа төбөндә. Рафа киткән яҡҡа ҡарап күҙҙәре талды. Бәлки, әйләнеп кире ҡайтырҙар. Диңгеҙҙә йөҙөп бармайҙар ҙа инде? Ә уйлаһаң, тормош диңгеҙендә батып барабыҙ түгелме? Иртәгә атһыҙ мин бер кем дә түгел. Аяҡһыҙ, ишеү. Ауыл да шулай бөтөп бара инде. Батабыҙ, батабыҙ. Был таяҡ ҡына ҡотҡара алмаҫ. Шамил Ситдиҡ ҡарттың күпте күргән һөйәүле торған таяғына таянып өйөнә инеп китте. Өлтөк-өлтөк сығып килгән ҡашынан ситтә, сикә сәстәре ағара башлағанын ул белмәй ине әле.

* * *

Ат бышҡырыуына һиҫкәнеп киткән Шамил, ҡул таяғына таянып, ялан аяҡ, ялан баш өйҙән күтәрмәгә йүгереп килеп сыҡты. Сыҡты ла ултыра төштө, эйе, оло урам яғынан кәртә аша башын һелкеп Радулов тора ине. Уның аты. Элекке хужаһын күргәс, алаша еңелсә кешнәп ебәрҙе, индер, ҡайттым, тип өндәшеүе булдымы. Шамил һултанлап-һултанлап йүгереп барып аттың башын барып ҡосаҡланы, яңаҡтарын үпте, ялына бармаҡтарын ҡаҙаны. "Ҡайттыңмы? Диңгеҙ сикһеҙлегенән ҡотолдоғоҙмо?" Ул ҡапҡаһын асты ла ҡулын күккә һуҙып:

- Эһе-һей, аттар ярҙарына сыҡты, оло Ергә ҡайтты! - тип ҡысҡырырға тотондо...

- Был ат өйөрө оҙаҡ йөрөйөсәк әле утрауын таба алмай. Оҙаҡ йөрөйәсәк, - тине күрше ихатала тыныс ҡына Мостафа ҡарт, Шамилдың тауышын ишетеп.

Ҡапыл кәртә аша Рәүефтең башы күренде.

- Нимә аҡыраһың таң менән. Тағы ла башландымы әллә?

- Рафа-а? Нимә, алманыларммы ни? Иткә лә эшкинмәйме?

- Һис тә, үткәндәрҙе иҫләтеп тормаһын әле.

- Ә миңә йәл. Һат миңә.

- Нимә багажнигыңа һалып алаһыңмы?

- Күпме һорайһың?

- Ҡыйбат түгел. Иренеңдән бер һурып үпһәм...

- Шаярма, Вадим беҙҙеңсә әҙерәк аңлай ул.

- Ҡыҫҡаһы, Фәнилгә ун биш мең етмәй, шуға Шамилдың алашаһын... Аңланың инде.

Әлфиә Вадимдан аҡса һораны. Тегеһе, нимәгә, нимәгә тип һөйләнһә лә, тиҙ һәм бик кәрәк, тине. Наҙлы, көләкәс Әлфиә ҡалай шулай етди ҙә, ҡырыҫ та була ала икән. Ире янсығынан аҡса иҫәпләргә тотонғайны, быныһы тартып алды. Шунан үҙе дүрт бишмеңлекте класташына һуҙҙы ла:

- Эшкинә, эшкинә. Йәшәһен әле Радулов, тинек.

- Ә Федя?

- Таптым мин аҡса.

- Ҡайҙан?

- Ир аҡса тапмай буламы һуң? Ауылда кеше бөткәнме ни? - ҡайҙан алғанын әйтмәне Рафа, мут ҡына йылмайҙы.

Поляковкаға юрттырып китеп барғанында затлы машинаны тап итте Рәүеф. Тәңгәлдәренә еткәс, Әлфиәләр икәнен танып аптырап китте. Ике тәгәрмәстәре лә тишелгән дә, ултыралар нишләргә белмәй. Төпкөлдәге ташлы юл машинаның затлы-затһыҙына ҡарап тормай шул, ебәргеһе килмәһә, ырғағын ырғыта ла ҡуя. Аттарҙы ғына ҡороҡлап тота алмай. Туйға елдерәме, ҡорбан булырғамы - юл уны туҡтатмай.

- Гудмонең, әфәнделәр, - тип сарказм менән өндәште һыбайлы.

- Привет, - тине машиналы.

- Рәүеф? Һин ҡайҙа? - Әлфиә аптырап килеп төштө.

- Ҡайҙа тип, ҡыҙ урларға китеп барам бына.

Иренә, класташым, тип уның менән таныштырып та өлгөрҙө. Йөҙөндә теге ваҡыттағы ихласлыҡ һүнгән.

- Ҡашһыҙ килешме? Ә ысынында?

- Поляковкаға ит комбинатына Шамилдың алашаһын тапшырырға барам.

- Беҙҙе сәхрәгә алып сыҡҡан ат таһа, - йөҙө балҡып китте ҡатындың. Аттың муйынын һыйпаны. - Йәл түгелме?

- Борол, Рәүеф. Йәшәү менән тыуған ерҙән кем туйған. Ебәр атыңды үҙ яланына. Улар ғына иреклектең хаҡын белә. Тышама ла. Борол. Бар, - тине. Һыбайлы атын ҡосаҡлап ятты ла Әлфиәнең ҡулынан үрелеп аҡсаны алды һәм бер һүҙ ҙә өндәшмәне. "Рәхмәт" тә тимәне. Ул ҡуҙғалғас, ҡатын артынан, ҡашыңды башҡаса ҡырҙырма йәме, тип ҡысҡырҙы. Радулов ҡайтыр юлға сыҡҡас та, башын күтәреп ырамлы юртып китте. Бара биргәс Рәүеф түҙмәне, артына боролоп ҡараны. Әлфиә һаман уларҙан күҙен алмай баҫып тора ине. Йөҙөндә лә, кәүҙәһендә лә ниндәйҙер илаһилыҡ сатҡыһы сағылып ҡалғандай булды. Уның бар торошо матур ҙа һәм шул уҡ ваҡытта һағышлы ла тойолдо буйҙаҡ иргә. Һыбайлы атын дәртләндереп ҡамсыһын тирә-яҡҡа һелтәп алды, ә тишек тәгәрмәсле машина юл ситендә тороп ҡалды.

* * *

Фәнил иҫән-аман әйләнеп ҡайтҡандың иртәгәһенә үҙ мунсаһында Хаммат сауҙагәр үлеп китте. Йөрәгенә көс төшкәндер. Бигерәк мунса ярата ине шул. Ауылдың әзмәүерҙәй ике ире - Фәнил, Рәүеф тә ҡәбер ҡаҙҙы, ләхет алды. Сатан Шамил да булышты. Ҡулдарына мул ғына хәйер ҙә төштө.

Яңы ҡәберҙе ҡарағай таҡта кәртә менән уратып алырға мәжбүр булдылар. Законһыҙ рәүештә ҡапыл ғына мәғрур һәм һылыу ҡарағасты ауҙарып булмай бит инде. Буралы ҡәберҙәр янында уныҡы нисектер меҫкен генә булып ҡалҡты. Мәрәкәсел Гәрәй әйтмешләй, "ҡашы юҡ бит был ҡәберҙең, хужаһы һыҙғырып аумаған, тимәк..."

Хамматты һуңғы юлға оҙатҡас, Федя, Шома һәм Рафа Ҡағы буйына төштө. Ғәҙәттәгесә хәйергә төшкән аҡсаға магазиндан бер ярты араҡы алдылар. Ул Рафаның ҡуйынында йылынып барҙы. Ултырышҡас, ул берҡулланыр эстәкәндәргә мул ғына итеп һалып сыҡты. Ике дуҫының шым ултырғанын күргәс, үҙе: "Йә, килгән ҡаза ошоноң менән бөтһөн!" - тине лә һауыттағын "голт-голт" килеп эсеп ҡуйҙы. Төрмәлә ятҡанда, эсмәйем, яңы тормош башлайым, тигән вәғәҙә лә, дауаханалағы лайыҡлы тормош хаҡындағы уйҙар ҙа, һөйгәне ҡосағында наҙланғанда күңелдән бәхет, мөхәббәт хаҡында һүҙ биреүҙәр ҙә ошо тирәлә, ошо баштарҙа ҡайнап, икеләндереп-шикләндереп бер ҡарарға килеүҙе һорай ине. "Оһо-һо, яндырып төшөп китте", - тип йылмайған Рафа, дуҫтарының эстәкәндәре тотолмағанын күреп, ҡапыл шымып ҡалды. Шома, Ҡағының ағымына ҡарап, уйға ҡалған. "Уйсан йөҙөнә сикәһендәге аҡ сәсе ҡалай килешә", - тип уйлап ҡуйҙы Рафа. Федяның ҡараштары иһә Йәнекәй тауы тарафтарына төбәлгәйне. Оҙаҡ ҡына ҡарап торғандан һуң ул Шомаға:

- Бир әле таяҡты, - тине. Алғас оҙаҡ ҡына тотҡаһын һыйпап ултырҙы ла: - Әйтәм бит, йылыһы бөтмәгән, тип. Һаман шул йылы, олатамдың ҡул йылыһы.

Шома, нисек олатайыңдыҡы булһын, минең ҡул йылыһы, тип әйтмәксе булғайны ла, был юлы бәхәсләшмәне. Тын ғына ултыра бирҙе.

- Бына бында, исмаһам, йылы, - тип Рафа эсен һыйпап көлгән булды. Шул саҡ Федя яйлап ҡына ҡул таяғының осо менән тәүҙә үҙенең алдындағы эстәкәнде, шунан үрелеп яртылаш тулы (әллә яртылаш бушмы) шешәне ауҙарҙы. Эсендәге шыйыҡсалар ағып, үлән араһына инеп юғалды. Шома алдындағы тулы эстәкәнде ситкә ырғытты. Рафа башын эйеп ултыра бирҙе лә, буш пластик эстәкәнде усына һалып иҙеп ҡуйған булды.

Ҡояш һәйбәт ҡыҙҙыра. Күктә бер болот әҫәре лә юҡ. Тирә-яҡҡа йүкә сәскәһе тәме таралған. Иҫерткес тәм. Тын ғына ағып ятҡан Ҡағы өҫтөндә тауыш биреп ҡапыл балыҡ ҡарпыны.

Фәнил таяҡты Шамилға һондо, шунан һикереп торҙо:

- Хәҙер өсөбөҙ ҙә Йәнекәйгә барып, бер ҡарағасты ауҙарабыҙ. Сит-ят күҙҙәр бик күрмәһен. Рафа, һин - балта, Шома, арҡыры бысҡы ал, йәме, мин башҡа кәрәк-яраҡты хәстәрләрмен, - тип команда бирҙе. - Хаммат ағай ҡәберенә бура һуғабыҙ.

- Һин нимә, шул яуызғамы? - Рәүеф ҡаршы килеп маташты.

- Юҡ, егеттәр, ата-бабанан ҡалған йола закондан да, изгелектән дә, яуызлыҡтан да олораҡ ул. Юҡ-бар кәртәләр зыяраттың ҡотон ебәреп тормаһын. Киттек!

- Ә эләкһәк? Штраф... - Шамил да ҡалҡынды.

- Эләкмәйбеҙ. Ошаҡлаусылар бөттө ауылда.

Эңерҙә Радулов егелгән арбала өс ир Йәнекәй тауына күтәрелеп бара ине.

Әйткәндәй, Әлфиә менән Рәүеф күтәргән тармаҡлы ҡарағастағы дәдәнгә һуңлап ҡына булһа ла ҡорт ҡунды. Иртәме-һуңмы барыбер балы буласаҡ уның, ҡунған ҡорт ҡот бирмәй ҡалмаҫ.

**(Аҙағы).**

ХӘТЕРКИТАП

# ТЕАТРҒА НИГЕҘ ҺАЛЫУСЫ

**Гәзит уҡыусыларҙы кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тип аталған тулы метрлы тарихи нәфис фильмы геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ. "Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проектында был шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотоларын һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолованың фильмды төшөрөү майҙансығынан һаҡлаған фотолары тәҡдим ителә. Яңы ғына барлыҡҡа килгән профессиональ театр сәнғәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тамашасының күңелен яулап өлгөрә. 1926 йылда Өфөлә уртаса һәр спектаклгә 900 тамашасы йөрөй! Баш ҡаланан ситтә ятҡан ауылдарға ошо уҡ театр системаһында булдырылған Башҡорт күсмә театры тамашалар ҡора. Быларҙың барыһының да башланғысында ул тора.**




*Вәлиулла Мортазин. Актер Руслан Хайсаров.*

**Вәлиулла Ғайназар улы МОРТАЗИН (актер Руслан Хайсаров уйнай)** - билдәле актер һәм режиссер, театр теоретигы, Рәсәйҙә беренселәрҙән булып милли театрға нигеҙ һалыусы. 1919 йылда Вәлиулла Мортазин дәүләт театр төркөмө - Стәрлетамаҡта Беренсе Башҡорт дәүләт театрын булдыра, һуңғараҡ унан Башҡорт академия драма театры барлыҡҡа килә. Ике тиҫтә йыл ул башҡорт театрына тоғро хеҙмәт итә, актер, ҡуйыусы режиссер, төрлө йылдарҙа директор һәм художество етәксеһе булып эшләй. Бер үк ваҡытта Башҡорт АССР-ы мәғариф халыҡ комиссариатының Тамаша саралары идаралығы етәксеһе, БАССР-ҙың Совет халыҡ комиссариаты ҡарамағындағы Сәнғәт эштәре буйынса комитет етәксеһе урынбаҫары, аҙағыраҡ комитет етәксеһе вазифаһын башҡара. 1926 йылдан 1937 йылға тиклем уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә, 1928 йылға тиклем Башҡорт сәнғәт техникумының театр бүлеге етәксеһе була. ВКП(б) ағзаһы.

Актер булараҡ, Вәлиулла Мортазин репертуарҙа булған төрлө пландағы спектаклдәрҙә 500-гә яҡын роль башҡара. Бар актерҙар өсөн дә хас булмаған сәхнә темпераменты, һығылмалылыҡҡа эйә булыуы өҫтөнә хисле-тойғоларға бай булыуы арҡаһында ул тамашасылар хәтерендә оҙаҡҡа ҡала торған ролдәр тыуҙыра. Милли репертуарҙан Йомағол ("Ашҡаҙар", М. Буранғолов), Салауат Юлаевты ("Салауат менән Пугачев", В. Мортазин һәм Д. Юлтый пьесаһы буйынса; "Салауат батыр", А. Инан; "Пугачевсылыҡ", К. Тренев) уйнай.

Ғаяз Исхаҡи, Ғәлиәскәр Камал, Сәғит Рәмиев, Фәтих Әмирхан һәм башҡа драматургтарҙың пьесалары буйынса милли репертуарҙы тәшкил итәсәк тәүге спектаклдәрҙе лә ул сәхнәләштерә. Мирхәйҙәр Фәйзиҙең "Ғәлиәбаныу" музыкаль мелодрамаһын да театр сәхнәһендә беренсе тапҡыр Вәлиулла Мортазин ҡуя. Шәйехзада Бабичтың "Ғазазил" поэмаһын сәхнәләштерә. Ошо йылдарҙа Вәлиулла Ғәйназар улы бер-бер артлы килгән реализм, экспрессионизм һәм конструктивизм синтезынан торған яңы театр системаһын барлыҡҡа килтерә. Уның тәғлимәтендә художестволы ансамбль халыҡ йолаһының театр-сәхнә сағылышы булараҡ ҡарала. Ул йылдарҙа республиканың барлыҡ театрҙары ла ошо системаны ҡуллана.

Республика властары театр системаһын "партия линияһына ярашлы" итеп ҡороу һәм Башҡортостан театрының милли үҙенсәлеген юҡҡа сығарыу өсөн саралар күрә. 1931 йылда ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты "Башҡорт милли театрын үҫтереү тураһында" резолюция ҡабул итә. Унда "пролетар дәүләттең класлы линияһын" тотоу һәм реакцион-милли тенденцияларға ҡаршы көрәшеү ҡәтғи талап ителә. Ошонан һуң милли театрҙың үҙешмәкәр формаларын юҡҡа сығарыу, театр сәнғәтен унификациялау һәм социалистик реализм алымына күсеү башлана.

1922 йылда Мортазинға Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы тигән юғары исем бирелә. Был абруйлы исемдә ул тәүгеләрҙән булып ала. 1935 йылда РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы тигән исемгә лайыҡ була. Әммә был мәлдә уның өҫтөндә лә ҡараңғы болоттар ҡуйыра. 1937 йылдың 21 октябрендә Вәлиулла Ғайназар улы һаҡ аҫтына алына. РСФСР-ҙың Енәйәт кодексының 58-се статьяһының 2-се, 8-се, 11-се статьялары (советтарға ҡаршы пропаганда һәм контрреволюцион эшмәкәрлек) буйынса иң ҡаты яҙаға тарттырыла. Ғәйепләү сәбәптәренең береһе булып уның "халыҡ дошманы Муса Мортазин менән туғанлығы" тора. 1938 йылдың 10 июлендә атыла. Ҡәбере билдәле түгел. 1957 йылдың 26 июлендә аҡлана.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

ТӘҮБӘ

### Йомғаҡлау

**Эскең киләме, тип һорайҙар. Әлбиттә, эскем килә. Иҫергең киләме, тип һорамайҙар. Һораһалар, әлбиттә, әйтер инем. Эйе, эскем килә. Тереһыуға бәрәбәр саф шишмә һыуы эскем килә. Иҫергем килә. Спиртһыҙ эсемлек эсеп иҫергем килә. Әммә был тормошта, ҡыҙғаныска күрә, улай мөмкин түгел.**

# ҠОТОЛАЙЫҠ...

## иблис ҡотҡоһонан



Әҙәм балаһы ни өсөн эсә? Әлбиттә, иҫерер өсөн эсә. Әле бер кемдең дә араҡыны тәмләп эскәнен күргәнем юҡ. Сыты-райып-сытырайып, уҡшыр хәлгә етеп эсәләр Иблис шыйыҡсаһын. Иҫерер өсөн йоталар. Әммә бер эскесенең дә икенсе көнөнә "Белһәң ине, минә кисә ни тиклем рәхәт булғанын!" тип һөйләгәнен ишеткәнем юҡ. Алкаштар, ғәҙәттә, нисек баш төҙәтеүе тураһында гәп һата, төкөрөгөндә йоторлоҡ итеп һөйләй. Тимәк, иҫереүҙең, йәғни, ваҡытлыса кәйефләнеүҙең һөҙөмтәһе - баш төҙәтеү. Михаил Жванецкий әйтмешләй, үҙенең нимә теләгәнен белгән берҙәнбер кеше - бахмурҙан ауырыусы.

Самаһын белеп эскәндәр бар, самаһынан арттырып дөмөккәндәр бар. Һәр икеһе лә иҫерер өсөн эсә. Мәҙәни эсергә кәрәк, ти, ҡай берәүҙәр, самаһын бел, ти, икенселәр. Былай уйлау, шулай аҡыл өйрәтергә маташыу аҡланыуға бәрәбәр. Үҙ-үҙеңде аҡларға тырышыу - яуапһыҙлыҡтың бер төрө генә. Иң рәхәте - аҡыл һатыу. Күпмегә алдың, шул хаҡҡа һаттың - өгөтләп, көсләп тағыу кәрәкмәй. Урыҫса әйткәндә, "За сколько купил, за столько продал".

Үҙ ғүмерендә ауыҙына бер тамсы ла спирт йотмағандарҙың эскелеккә ҡаршы көрәшеүен бөтөнләй аңламайым. Эйе, дөрөҫ юлда улар. Изге эш башҡаралар кеүек хатта. Әммә... Нисек аңлатырға? Былай ҡыланыштан ике йөҙләлек еҫе килә. Үҙең аңламағанды башҡаларға аңлатырға тырышыу һымағыраҡ. Зинһар өсөн, был, "Башта эсегеҙ, шунан көрәш юлына баҫығыҙ", тип өндәй, тип яңылыш аңлап ҡуймағыҙ. Былай ҙа күп көрәшәбеҙ! Бер карикатура иҫкә төшә. Атаһы малайының ыштанын һыпырып, ҡайыш менән асыҡ осаһына һуғып тора. Тыйылғанды үтәмәгән өсөн яҙаға тарттыра. Ә улы шул мәлдә атаһының ике аяғындағы ботинка бауҙарын бер-береһенә ҡуша бәйләп тора. Йәнәһе, ысҡынһа, атаһы ҡыуып тота алмаясаҡ. Петр батша осоронда эскелек менән артыҡ мауыҡҡандарға ете килолыҡ миҙал аҫып ҡарағандар, Брежнев осоронда көсләп дауалап маташтылар, Горбачев виноград баҡсаларын ҡырҡтырып ҡараны. Һөҙөмтәһе? Бер быуын үҙ эсеулы менән көрәшә, киләһе быуын яңыларын уйлап табырға тырыша, ә баяғы ыштанһыҙ малай һаман атаһын тышап маташа.

Бәлки, бөтөнләй көрәшмәҫ кәрәктер, тыймаҫ кәрәктер? Тыйылған емеш тыйған һайын тәмлерәк күренә бит ул. Етмәһә, максималист үҫмерҙәр протест йөҙөнән өлкән быуын нәсихәтен боҙорға тырышыусан була - бер бөгөн йәшәмәйбеҙ, быныһы ғына аңлашыла, әлбиттә. Әммә былай ҙа ярамай. Шулай булғас, ни эшләргә һуң? Нобель премияһы лауреаты, монах-ҡатын Тереза-Әсә нимә тигән әле? "Мин бер ваҡытта ла һуғышҡа ҡаршы хәрәкәткә ҡушылмаясаҡмын... тыныслыҡ өсөн хәрәкәт барлыҡҡа килгәс саҡырырһығыҙ", тигән ул. Эскелеккә ҡаршы көрәшкәнсе, бәлки, айыҡ тормош өсөн шарттар булдырыу тураһында уйларға кәрәктер, ә? Күҙ алдына килтерегеҙ: диндарҙар атеист-материалистарға ҡаршы көрәш асһын, ти. Әстәғфирулла! Изгелекте көсләп тағып булай шул! Эскелеккә ҡаршы көрәшеү ҙә изге теләк, шулай бит?

"Изгелектең сере шунда: башта ул көсһөҙ, аҙаҡ еңелмәҫлек була. Ә яуызлыҡ башта көслө, аҙаҡ көсһөҙгә әйләнә", - был һүҙҙәрҙе лә Тереза-Әсә әйткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошоноң менән тәүбәм тамамдыр... Башымдан үткәнде, күңелем менән кисергәнде яҙырға, уйҙарымды уртаҡлашырға тырыштым. Маҡтау кәрәкмәй, хөкөм итһәгеҙ - ихтыярығыҙҙа. Минең өсөн иң мөһиме - уртаҡлашыу ине. Үҙ тәжрибәгеҙ, үҙ тәүбәгеҙ менән уртаҡлашһағыҙ - рәхим итегеҙ. Барыбер кемдеңдер ҡолағына инер, ғибрәт алыр һымаҡ...**

**Мораҙым ӘХМӘТОВ.**
**(Аҙағы).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯБЫҒЫРҒА НИМӘ ҠАМАСАУЛАЙ?

■ Австралия ғалимдары һәр бишенсе ҡатын-ҡыҙ һәм һәр һигеҙенсе ир-егеттең арыуға, эшкә һәләтлелек түбәнәйеүгә зарланыуын билдәләгән. Экспертлар фекеренсә, эш кеҫә телефондарында икән. Квинсленд технология университеты 709 кеше араһында һорау алыуҙар үткәргән. Уларҙың иң йәшенә - 18, иң өлкәненә 83 йәш булған. Уларҙың күптәре телефондың зыянлы булыуын белеүен, арыу тойоуын, эшкә һәләтлелек кәмеүен әйткән. Машина йөрөткәндә йыш ҡына телефондан һөйләшеп барыуҙарын да танығандар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 24, ир-егеттәрҙең 15 процентын ғалимдар телефондарҙың "проблемалы ҡулланыусылары" тип билдәләгән. 2005 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәр менән сағыштырғанда, был проблема 40 процентҡа артҡан. Йыл аҙағына тиклем донъяла смартфон менән ҡулланыусылар иҫәбе 2,5 миллиардтан артып китәсәк. Тимәк, технологияларҙың беҙҙең тормошҡа ҡыҫылыуы проблемаһы тағы ла киҫкенерәк торасаҡ, тигән фекерҙә ғалимдар.

■ Төнөн урамдағы реклама уттары, бағаналағы яҡтыртҡыстар һ.б. тәҙрә аша һеҙ йоҡлаған бүлмәгә төшөп тора икән, был күҙкәк яман шешенә килтереүе ихтимал, тип иҫкәртә ғалимдар. Улар ҡомаҡтар миҫалында быны раҫлаған да инде. Йоҡоно килтереүсе мелатонин, билдәле булыуынса, яман шешкә ҡаршы көслө сара. Әгәр ҙә төнөн йоҡлағанда ла яҡтылыҡ бар икән, мелатонин аҙыраҡ бүленә башлай.

■ Ҙур сауҙа үҙәктәрендәге балалар бүлмәләре сепсис, менингит, үпкәләр шешеүе кеүек хәүефле сирҙәр сығанағы булыуы ихтимал. Сөнки бындағы пластик шарҙарҙы һирәк йыуалар. Төньяҡ Джорджия университетында үткәрелгән анализ күрһәтеүенсә, мәҫәлән, шарлы бассейнда төрлө бысраҡ, бөйөр, ҡоҫолоҡ эҙҙәре табылған. Бер нисә аҙнанан һуң был бактериялар нығыпып, бер урынға тупланасаҡ. Тап ошо мәлдә балаға инфекция күсә ала ла инде. Бигерәк баланың тиреһендә яра булһа, иммунитеты түбәнәйгән мәлдә хәүеф арта. Ғалимдарҙың тикшеренеү һөҙөмтәһендә шулар асыҡланған: пластик уйынсыҡтарҙа 31 төрлө, шул иҫәптән йоғошло 8 бактерия була ала. Шуға ла сауҙа үҙәктәрендә балағыҙҙы бындай хәүефле бүлмәләрҙә ҡалдырырға, йәки махсус рәүештә уларҙы унда уйнарға алып барырға тырышмағыҙ.

■ Ябығырға теләүселәргә ҡыҙыҡлы яңылыҡ. Ҡайһы саҡта уйламаған әйберҙәр ҙә ябыға алмауҙың сәбәбе булып тороуы бар. Мәҫәлән, йорттағы кондиционер тап ошондай "кара исемлек"кә ингән. Бүләмәләге температураны булыһынса үҙгәртә алған приборҙар матдәләр алышыныуҙы боҙа. Тәнгә йылыныу өсөн артыҡ көс түгергә кәрәкмәй. Һөҙөмтәлә, тән ауырлығы кәмеүҙән туҡтай, йәки бер урында ғына тора. Ҡайһы саҡта вируслы инфекцияләр ҙа йоғонто яһай. Шуға ла иммунитетты күҙәтеп торорға кәрәк. Пластик һауыт-һаба ла хәүефле. Түбән сифатлы пластиктың составында кешенең гормональ фонына тәьҫир итә торған матдәләр бар. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына А бисфенолы зыяны тураһында белгәйнек. Күп илдәрҙә уны хәүефһеҙерәк берләшмә менән алыштырырға ҡарар ителде. Әммә уның да сәләмәтлек өсөн файҙаһы юҡ, ти белегстәр.

БИЛДӘЛЕ БИЛДӘҺЕҘҘӘР

# КЕМ ҺИН, ТАЙЫП МУЛЛА?

**Бер-ике йыл элек гәзиттә минең "Ҡаның ниңә таҙа, Юрматы?" исемле мәҡәләм донъя күргәйне. Унда бәйән ителгән хәл-ваҡиғалар олатайым һөйләгәндәргә һәм шулай уҡ Һайран ауылынан Ғаяз Яҡупов ауыҙынан ишеткәндәргә таянып яҙылғайны. Мәҡәләлә ошо ауыл кешеһе Тайып мулланың да исеме телгә алына һәм уның Мысырҙан алып ҡайтҡан яҙмалары хаҡында ла һүҙ алып барылды. Шул ваҡытта уҡ мулла абзый тураһында һорашып-белешеп, берәй мәҡәлә-фәлән яҙып ташларға иҫәплэп ҡуйғайным һәм бына форсаты сығып, мин уның хаҡында аҙмы-күпме хәбәрнамә туплай алдым.**

Яҡупов Тайып Лоҡман улы 1886 йылда Һайран ауылында донъяға килгән. Ғаиләлә иң оло бала булып, уның Яхъя һәм Дауыт исемле ҡустылары ла була. Үҫеп буй еткәс, Тайып Камила исемле ҡыҙға өйләнә. Полк муллаһы сифатында. Беренсе Бөтә донъя һуғышына киткәндә уның Исмәғил исемле улы тыуып ҡала. Тайып мулланың ҡайҙа, нисек һуғышып йөрөгәне билдәһеҙ, ә бына 1915 йылда әсиргә эләккәне һәм шул сифатта Көнбайыш Европаның байтаҡ илдәрендә, атап әйткәндә, Германия, Австрия, Венгрияла йөрөгәне мәғлүм. Ул заманына күрә ныҡ белемле һәм үтә лә үткер кеше булараҡ, әсирлектә йөрөгәндә лә үҙенең аң кимәлен күтәреүгә байтаҡ эш алып бара. Тайып мулланың венгр ҡыҙына өйләнеп, унан ике ҡыҙы тыуыуы ла һәм ниндәйҙер ойошмалар аша гәрәп илдәренә сығып, тарих фәнен, боронғо яҙмаларҙы өйрәнеүе лә билдәле.

Нисек кенә булмаһын, тыуған ер, тыуған төйәк һәр саҡ үҙенә тарта. Бына шул тартыу көсө Тайып мулланы ла Венгриялағы ғаиләһен ҡалдырып, үҙ яғына ҡайтырға мәжбүр иткәндер. Бер уйлаһаң, бында ла уны ата-әсәһе, туғандары, яратып өйләнешкән Камилаһы һәм улы көткән бит инде. Тайып Яҡупов 1930 йылда Һайранға ҡайтып төшә, ләкин һөйөклө ҡатыны уны көтмәгән, икенсегә кейәүгә сыҡҡан була. Тайып мулла Мәһүрый исемле ҡыҙға өйләнә. Унан Хөснури, Рауза һәм Дәүләтбай исемле балалары тыуа. Был ваҡытта Һайран ауылы Ҡыҙыл таш тип йөрөтөлгән артелгә ҡарай һәм ауыл халҡы септә, ҡап һуғыу, селек һепертке бәйләү менән мәшғүл була. Тайып мулла ла артель эшенә йөрөй, шулай уҡ дини йолаларҙы үтәүҙә әүҙем ҡатнаша, ауылдаштарының аң-белемен күтәреүҙә байтаҡ эш алып бара. "Беҙ мулла абзыйҙан күп нәмә өйрәндек", - тип әйтер уны белеүселәр.

Ҡәһәрле золом Яҡуповтар нәҫелен дә урап үтмәй. Был йылдарҙа ошаҡсыларҙың роле ифрат ҙур була. Бына шуларҙың ялыуы һөҙөмтәһендә күпме кеше ыҙа сигә, аҫыла-киҫелә. Стәрлетамаҡ "Заготконтора"һынан кәрәк-яраҡ алып ҡайтып барған Яхъя Яҡуповтың иптәшенең аты Биксән кисеүендә һыуға бата. Яхъя үҙ атының ҡойроғона икенсе атты бәйләп, йөктө һөйрәтеп сығара. Үҙҙәре менән бергә булған әҙәм: "Яхъя артель атын үлтерә яҙҙы", - тип тейешле урынға ялыу яҙа һала. Яхъяны шунда уҡ килеп алып китәләр һәм һуңғараҡ Дауыт ҡустыһы менән икеһен Стәрле төрмәһендә атып үлтерәләр.

Тайып мулла шиғыр сығарырға ифрат оҫта була. "Һай, Сталин, уай, Сталин, бик күптәрҙең башына етте һинең большевиктарың", - тип йырлағаны өсөн уны ла төрмәгә алып китәләр. Тәфтишсе янына алып килгәс, уныһы: "Йә, Яҡупов, Сталин тураһында ниндәй йыр йырланың әле?" - тип һорай. Тайып мулла: "Бына ошо йырҙы йырланым", - ти ҙә, юлбашсыны маҡтаған йырын йырлап ебәрә. Тәфтишсе: "Юҡ, һин шуны йырлағанһың бит", - тип мулланың тәүге йырын ҡабатлай. "Ә-ә-ә, һеҙ бөйөк Сталинды яманлайһығыҙмы, хәҙер начальнигығыҙға еткерәм", - тип, тәфтишсенең ҡотон ала Тайып мулла һәм уны үҙен алып килгән "Черный ворон"ға ултыртып, ҡайтарып ебәрә һалалар. Һуңынан да мулла өҫтөнән тағы ла бер нисә ҡат ялыу яҙып, уны төрмәгә ултыртырға маташалар. Әммә ул ниндәйҙер яйын табып, тороп ҡала һәм ялыу яҙыусы-

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНЛӘШМӘ...

## ҡыйынлыҡ килтерерһең

**Ислам көнсөллөктө харам, тип белдерҙе. Аллаһ үҙенең Бәйғәмбәренә көнсөл кешеләрҙән йыраҡ торорға бойорҙо, сөнки көнсөллөк йәндә көйрәгән осҡонға тиң һәм ул көнсөл кешеләрҙең үҙҙәренә генә зыян килтерә. "Көнсөллөктән һаҡланығыҙ, сөнки ул, ялҡын ағасты ялмап сығарған кеүек үк, изге эштәрҙе юҡҡа сығара".**

Ниндәй ҙә булһа бүләккә йәиһә Аллаһтың рәхмәтенә эйә булған кешене күрә алмаған, уны шул бүләктән нисек тә булһа мәхрүм итергә тырышҡан кешене ысынбарлыҡтан ситкә алып китеүсе төрлө сәбәптәр бар.

Беренсе сәбәп: ул тормошта ситләтелгән, ҡыйырһытылған, шуға ла башҡаларҙың байлығына ҡыҙыға. Ул бәхетле һәм бай кешеләргә тиңләшергә ынтыла һәм быны булдыра алмайынса, күҙ йәштәрен түгә, уңышлы кешеләрҙән көнләшә, уларға асыуы килә. Ике донъяны ошо рәүештә ҡабул итеү ҙур хата; эш шунда, был кеше әхирәт донъяһы тураһында бөтөнләй уйламай, уға әҙерләнеү тейешлегенә күҙ йома.

Кешенең әхирәткә фани донъяла уҡ әҙерләнеүе һәм уға әҙерләнеү мөмкинлеге булмаған осраҡта, борсолоуы мөһим. "...Ҡөрьән менән ғәмәл ҡылыу улар йыйған малдан хәйерлерәк", - тип әйтелә "Юныс" сүрәһенең 58-се аятында.

Көнсөл кеше дөрөҫ ҡарар ҡабул итә алмай. Шуға күрә, үҙе нимәгәлер өлгәшә алмағанда, аҫтыртын ғына бәхетле кешеләргә ҡаршы яуызлыҡтар ойоштора. Ә бит уның өсөн иң хәйерлеһе - Раббыһына ялбарыу, Уның рәхмәтенә өлгәшеү булыр ине, сөнки Аллаһтың байлыҡтары сикһеҙ һәм һәр кемгә етерлек. Бының өсөн һәр кем үҙенең бөтә көсөн маҡсатына йүнәлтергә тейеш. Ихтимал, беренсе ынтылышта уҡ уңышҡа өлгәшеп тә булмаҫ, әммә икенсе тапҡырында өлгәшер. Һис шикһеҙ, күңелендә асыу һәм көнсөллөк хистәре йөрөтөүгә ҡарағанда был сара хәйерлерәк.

Көнсөллөк - Аллаһтың башҡаларға биргән ниғмәттәренә эйә булырға теләү. Әммә күңелдәге бындай теләк һәм көнсөллөк алдашыуҙарға ҡапҡа асырға һәм тыйылған телөктәр тыуыуына сәбәп булырға, отошлораҡ нәмәләргә ынтылдырырға мөмкин, ысынлап ҡараһаң, улар ҙур зыян килтерә. Шуға күрә Ислам кеше теләй алған һәм шул телә-гәненә эйә булыу өсөн ярышырға рөхсәт ителгән әйберҙәрҙе асыҡ билдәләй. Бәйғәмбәребеҙ был хаҡта былай тигән: "Ике нәмәнән башҡа һәр ерҙә көнсөллөк тыйыла: беренсеһе - Аллаһ биргән байлыҡты һис икеләнмәйенсә хәҡиҡәт юлына сарыф итеүсегә, икенсеһе - Аллаһ биргән аҡыл һәм зирәклек ярҙамында ҡарарҙар ҡабул итеүсе, башҡаларға белем өйрәтеүселәргә көнләшеү рөхсәт ителә" (Бохари).

Был хәҙистәге "көнсөллөк" төшөнсәһе муллыҡ һәм именлекте ахырғаса еткереүҙе түгел, ә, бәлки, Аллаһтың ризалығына ирешергә ынтылыуҙы үҙ эсенә ала. Ә бына шуға ирешкәндәргә ҡыҙығыу, көнләшеү - ул "аҡ көнләшеү" була.

Бының мәғәнәһе шунда: кеше үҙ алдына өлгәшергә тип маҡсат итеп ҡуйған әйбер әһәмиәтле булырға тейеш. Донъяла рәхәтлек килтермәй торған нәмәләр күп; өҫтәүенә, башҡаларҙың шул әйберҙәргә эйә булыуына, ә үҙендә булмағанына үртәлеүҙән күңелдә асыу тыуа. Был хаҡта "Ниса" сүрәһенең 32-се аятында былай тип әйтелә: "Аллаһ ҡайһы берҙәрегеҙҙе ҡайһы берҙәрегеҙҙән артыҡ ҡылған нәмәгә өмөтләнмәгеҙ. Ирҙәргә үҙҙәре ҡылған ғәмәлдәрҙең әжере насип булыр. Ҡатындарға ла үҙҙәре ҡылған ғәмәлдәрҙең әжере насип булыр. Хаҡлыҡтан уңышҡа ирешеүҙе Аллаһтан һорағыҙ! Дөрөҫлөктә, Аллаһ һәр нәмәне белеүсе булыр".

***✓ Бөйөк, тип, донъя кимәлендә билдәлелек алған әҙәмдәргә генә табынмайыҡ, ә Зәйнулла Рәсүлев, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡалар кеүек үк оло шәхестәребеҙҙе лә танымайыҡ, тейешенсә баһаламайыҡ, уларҙы ла онотмайыҡ.***

ның үҙен яптырып ҡуйып, һөргөнгә ебәрттерә.

Өлкән быуын кешеләре: "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙ әллә ни өшөмәнек тә, аслыкты ла бик нык күрмәнек, сөнки ул йылдарҙа утын өсөн Баймөхәмәт бабай, ә иген өсөн Тайып бабай яуап бирҙе", - тиер булғандар. Тимәк, был ике ир-уҙаманы ауылдаштарына нисектер утын менән дә, иген менән дә ярҙам иткән.

Мин Тайып мулла тураһындағы күп кенә мәғлүмәттәрҙе уның яҡын туғаны, мәғариф ветераны Ғаяз Яҡуповтан алғайным һәм шунда мулла абзыйҙың халыҡҡа бик үк белгертмәгән тағы ла бер һәләте барлығын белдем. Беҙҙә бит башлыса Джуна, Ванга, Кейси кеүегерәк кешеләрҙең әйткәндәрен күтәреп сығып, ябайыраҡ әҙәмдәрҙең фаразлауҙарына, күрәҙәлек ҡылыуҙарына иғтибар итеп бармайҙар. Йәнәһе, кем һуң ул киләсәгебеҙҙе күҙаллаусы, беҙҙең һымаҡ бер бәндә инде! Ә шулай ҙа ныҡлабыраҡ уйлап ҡараһаң, уларҙың да юрағаны юш килеп тора бит. Тәүҙә Ғаяз ағай былай тип һөйләгәйне: "1965 йылда беҙ, дүрт малай, Ишембай баҙарында йөрөп ятабыҙ. Шунда бер яҡ мөйөштәрәк ултырған һуҡыр бабай беҙҙе үҙ янына саҡырып алды һәм алдындағы асыҡ ятҡан китапҡа күрһәтеп: "Егеттәр, аҙыраҡ аҡса бирһәгеҙ, ошо китап һеҙҙең артабанғы яҙмышығыҙҙы тулыһынса әйтеп бирер, хатта ҡасан үлерегеҙҙе лә. Риҙаһығыҙмы?" - тине. Беҙҙең дыуамалыраҡ та, тилерәк тә саҡ бит инде. Көлөп-шаярышып, риза булыуыбыҙҙы әйтә һалдыҡ. Әлбиттә, уның әйткәндәренә ышанып бармаһыбыҙҙы ла белә инек. Беҙ аҡса түләгәс, ҡарт һәр беребеҙгә киләсәге тураһында әйтеп бирә башланы. Ҡасан, кемгә өйләнәсәгең, нисә балаһы булыуын, шулай уҡ ҡайһы йылда ниндәй ауырыу менән үләсәген дә һөйләне. Бер иптәшебеҙгә: "Һин һөйгән ҡыҙыңа түгел, икенсе берәүгә өйләнәсәкһең, 2 балаң тыуа һәм аҙаҡ министр дәрәжәһенә күтәреләсәкһең", - тигәс, уға министр тигән ҡушамат та таҡҡайныҡ. Ә минә инде, биш ҡыҙың тыуыр, бишенсеһенә Айгөл тип исем ҡушасаҡһығыҙ, тигәс, малайҙар, эшкинмәгән, тигәндәй көлөп тә ҡуйғайнылар хатта. Ысынлап та, биш ҡыҙым тыуып, мин өйҙә булмағанда яҡындарымдың иң кесе ҡыҙымды Айгөл тип исемләүҙәрен ишеткәс, сәстәрем үрә торҙо, тиһәң дә була. Теге бабайҙың әйткәндәре барыһы ла дөрөҫкә сыҡты ла ҡуйҙы бит.

Мин быны шуға һөйләнем, сөнки Тайып мулла ла ысын мәғәнәһендә күрәҙәсе ине. Бына хәҙер уның әйткәндәрен иҫләһәм, иҫем китә. Барыһы ла дөрөҫкә сығып тик бара. Беҙҙең өләсәй умарта тотто һәм бал балы ла мейес башында һәр саҡ гөжләп ултыра торғайны. Мин шуны берәй һауытҡа һалып алам да, Тайып бабайҙарға китәм. Башҡаны мәрхәтһенмәнә лә ул бал балын ифрат ярата торғайны. Шуны эсеп алып, биттәренә ҡыҙыллыҡ йүгергәс, теле асылып китеп, күргән-белгәндәрен минә һөйләргә тотона. Мин иҫем китеп тыңлай торғайным. Ысынлап та, белмәгән нәмәһе юҡ ине шул уның. Үлеренә бик аҙ ғына ваҡыт ҡалғас, бына нимә тигән ине ул минә: "Бына һеҙ аллаларҙы, муллаларҙы инҡар итәһегеҙ, коммунистарға, Ленин ҡартҡа табынаһығыҙ, ләкин килер бер көн, барыһы ла баш түбәнгә әйләнәсәк бит. Ленинын да, коммунистарын да һанламай башлаясаҡһығыҙ. Колхоз-совхоздарығыҙ ҙа юҡҡа сығасаҡ. Киреһенсә, күпләп мәсет, сиркәүҙәр төҙөйәсәктәр, Хоҙайҙы иң алға ҡуясаҡтар". Мин шым ғына тыңлап ултырам да, аҙаҡ уның менән бәхәсләшергә тотонам. Нисек инде Алла урынына күргән Ленинды һанламаҫҡа ла, көндән-көн нығый, үҫә барған колхоз-совхоздарҙы юҡҡа сығарырға? Ә бабайым һаман үҙенекен тылҡый. Мин, аптырап: "Бәлки, артабан донъяла ниҙәр булырын да беләһендер?" - тим ирония менәнерәк. "Нинә белмәҫкә - барыһын да күреп торам мин", - тип яуаплай ине бабайым һәм күҙен ҡыҫыбыраҡ алып, һөйләп китә торғайны. - Ил тарҡалыр, уны мөһөрлә батша тарҡатыр. Уға алмашҡа Агас батша килер. Уныһын Юлдыбай батша алмаштырыр. Бер аҙ Айыу батша хакимлыҡ иткәс, тағы теге Юлдыбай килер. Унан инде Ғәлимә батшабикә, унан һуң Абдулла һәм уның улы Айбулат батшалыҡ итер. Айбулат 40 йыл хакимлыҡ иткән осорҙа халыҡ бик иркен, рәхәтләнеп йәшәр, 40 йыл 40 көн һымаҡ ҡына үтер ҙә китер. Тик бына батшалыҡ икегә бүленгән һымаҡ күренә. Мәскәү менән Ташкентты ла ер йотор һымаҡ. Американы һыу менән ут ашағандай. Рәсәйгә сығып ҡалмаһалар, япондар ҙа ҡырыласаҡ төслө. Күргән нәмәләр күп тә ул, ләкин барыһын да һөйләп бөтөп булмай. Мин әйткәндәр ҙә әлеге ваҡытта икебеҙ араһында ғына ҡалһын. Сөнки беҙҙең баштарыбыҙҙан һыйпамаясаҡтар".

Ул бына ошоларҙы вафаты алдынан минә һөйләгәйне. Үҙе 1969 йылда үлеп китте. Әлбиттә, "Тайып мулла , йәки башҡаһы минә шуларҙы һөйләгәйне тип, мин дә әйтә алам. Ҡайҙа һуң яҙып, ташҡа баҫтырып ҡалдырғандары?" тип, үрҙә яҙылғандарға ышанмаусылар ҙа булыр. Бында һәр кем үҙенсә дөрөҫ һәм был уларҙың хоҡуғы тип әйтәһе ҡала. Һәм дә шул уҡ ваҡытта бер аҙ уйланырға ла мәжбүр итә. Кем булған ул Тайып мулла? Күрәҙәсеме, әллә ғәрәп илдәрендә булған сағында уның ҡулына үткәндәребеҙ һәм киләсәгебеҙҙе һүрәтләгән яҙмалар килеп эләккәнме? Хәҙерге көндә быға яуап табыуы ҡыйын һәм ваҡыт барыһын да күрһәтер, тип әйтергә генә ҡала. Бөйөк, тип, донъя кимәлендә билдәлелек алған әҙәмдәргә генә табынмайыҡ, ә Зәйнулла Рәсүлев, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡалар кеүек үк оло шәхестәребеҙҙе лә танымайыҡ, тейешенсә баһаламайыҡ, уларҙы ла онотмайыҡ.

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

- Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм уларҙы ял иттерегеҙ, һуңынан һәр абзац һуңында башығыҙҙы борогоҙ. Әгәр арығанға тиклем ял итһәгеҙ, бер ваҡытта ла йонсомаҫһығыҙ. Бер минут ял итеү ваҡытты алмай бит.

- Күреү һәләте менән хәйләләшеүҙән ҡурҡығыҙ! - ти профессор Панков. - Ниндәйҙер тәбиғи булмаған ысул: күҙегеҙҙе ҡыҫып ҡарау, башығыҙҙы әйеү, күҙ ҡырыйы менән ҡарау һәм башҡа ысулдар аша шрифтты асығыраҡ итергә тырышмағыҙ. Был хәйлә һеҙҙе харап итәсәк!

Һеҙгә бары тик иркен, асыҡ һәм еңел итеп ҡарар өсөн кәсөргәнештән арындырылған ҡараш кәрәк. Әгәр хәйләләшеүегеҙҙе тойһағыҙ, тәүҙә күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, башта өҫкә, һуңынан аҫҡы ҡабағығыҙҙы кәсөргәнештән арындырығыҙ. Һуңынан тынығыҙҙы тәрән итеп сығарығыҙ һәм күҙегеҙҙе асығыҙ - хәрефтәрҙе яҡшы күрерһегеҙ.

Хәрефтәрҙең асыҡ йәки тоноҡ булып күренеүе һеҙҙең уға нисек ҡарау ысулығыҙға бәйләнгән. Кәсөргәнеш менән ҡараһағыҙ, ул асыҡ күренмәҫ. Тәрән итеп тын алып, еңел генә итеп ҡараһағыҙ - асыҡ күренер.

- Уңышлы уҡыу өсөн беҙҙең төп ҡағиҙәбеҙ - текстың һәр нөктәһендә күҙҙе йомоу һәм һәр абзац һуңында күҙҙе йомоу, - тип кәңәш итә ғалим. - Текст менән эшләгән ваҡытта күҙегеҙҙе кәсөргәнештән арындырыр өсөн һәр абзац һуңында күҙегеҙҙе йомоғоҙ, башығыҙҙы бер ҡулбашығыҙҙан икенсеһенә борогоҙ. Һуңынан тәрән итеп тын алып, күҙегеҙҙе асығыҙ ҙа, уҡып туҡтаған һуңғы һүҙегеҙгә ҡарағыҙ. Ул асығыраҡ күренергә тейеш.

Көн һайын уҡығыҙ. Көн һайын бәләкәйерәк шрифтты уҡырға тейешһегеҙ. Һеҙ туҡтаған һуңғы юл шунда уҡ яҡшы күренмәйәсәк, әммә һеҙ быға тиклем тоноҡ булған өҫтәге юлдарға күсеп, үҫеште күрә алаһығыҙ. Улар хәҙер беренсе тапҡырға ҡарағанда асығыраҡ булырға тейеш.

Әгәр бер күҙегеҙ яҡшыраҡ күрә (уҡый) икәнлеген асыҡлаһағыҙ, насарыраҡ күргәненә күберәк эш ҡушығыҙ, даими рәүештә оҙаҡ булмаған ял биреғеҙ һәм ошо арала соляризация, пальминг эшләгеҙ. Был процедураны эштән һуң һәр күҙегеҙгә айырым яһағыҙ.

Ниндәйҙер эште тамамлағандан һуң, бер ниндәй хәйләһеҙ асыҡ күргән иң ваҡ шрифтлы тексты, бер аҙ ял иткәндән һуң нормаль тексты уҡығыҙ. Шул саҡта һеҙ бары тик гәзит шрифтын уҡығанда ғына ауырлыҡ кисереүегеҙҙе асыҡларһығыҙ.

Күҙҙәрҙе ысынбарлыҡта күрергә өйрәткән кеүек үк, уйҙа ғына нимәләр эшләргә өйрәтеү ҙә файҙалы.

## Иртәнән үк күҙҙәрҙе нисек күнектерергә

- Көндө нисек башлаһаң, ул шулай дауам итә икәне күптән билдәле, - ти доктор Панков. - "Һул аяҡтан" торһаң, барыһы ла киреғә китә. Иртәнге биштән туғыҙға тиклем тән һәм психика тәүлектең башҡа ваҡытына ҡарағанда күпкә һиҙгерерәк. Көн программаһы иртән һалына. Күҙегеҙҙең күреү һәләте лә иртәнге кәйефкә бәйле.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

# ӘҒЛӘМЕТДИН ХӘҘРӘТ

**Күпме күрешһәк тә, курсташым Фәүзиә менән һөйләшеп һүҙҙәребеҙ бөтмәй. Был юлы ла шулай булды.**

Әхирәтем мәсеткә йөрөп, ғәрәпсә уҡырға өйрәнә башлауы тураһында һөйләп: "Әйҙә, һин дә өйрән", - тип, дини ғилем алыуыма тәүге сәбәпселәрҙең береһе булды. Йәнәтләп мәсеткә юлландым. Белем алыу бүлмәһендә ир-ат затынан берәү ҙә юҡ. Дәрес башланыуға ярты сәғәт тирәһе ваҡыт бар. Уҡытыусы килеп етмәгән әле. Бүлмәләге ҡатын-ҡыҙ шау-гөр килә: кемеһелер өйрәнгән ғәрәп хәрефтәрен ҡабатлай, кемеһелер ҡыҫҡырып-ҡысҡырып ҡағиҙәләрҙе иҫенә төшөрә, кемдер уҡый алмай аҙапланыуынан үҙенән-үҙе үк шарҡылдап көлә, ҡыҫҡаһы, бүлмә эсендәге тауыш мәсеттең үҙен күтәреп алып китерҙәй булып яңғырай. Быны бүлмәгә олпат ҡына атлап, Әғләметдин хәҙрәт килеп инде.

- Йә, апайҙар, кемегеҙ минең һорауға яуап бирә алыр икән?

Бөтәбеҙ ҙә һағайып ҡалабыҙ. Ниндәй генә һорау бирер икән? Яуап бирә алһаҡ ярар ине...

- Мәсеттә кемдәргә генә ҡысҡырып һөйләшергә рөхсәт ителә әле?

Шаңҡытты бит һорау! Әле генә мәсетте күтәрерҙәй булған шау-шыу секунд араһында юҡҡа сыҡты. Беребеҙҙән дә тәпләп яуап булмаясаҡ, һәр хәлдә, мин был юҫыҡта бик һай йөҙәм. Юҡҡа ғына хәҙрәт һынлы хәҙрәт яныбыҙға инеп, мәсет эсендә ҡысҡырып һөйләшеү тураһында һүҙ ҡуҙғатмаҫ, тием эстән генә. Имам-хатиб үҙ һорауына яуапты үҙе яуап бирҙе.

- Өс кешегә мәсеттә ҡысҡырып һөйләшергә рөхсәт бирелә: беренсеһе - мәсеттең имам-хатибына, икенсеһе -имам-хатиб рөхсәт иткән кешегә, ә өсөнсөһө кем тип уйлайһығыҙ? Белмәйһегеҙме? Мәсеттә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ һәм ҡысҡырып һөйләгән өсөнсө кеше - ул аҡылы камил булмаған ахмаҡ!

Уй Аллаһым! Ер тишегенә инеп китерлек яңылыҡ булды лаһаба. Беҙ, бында дини ғилем алыу өсөн йыйылған ҡатын-ҡыҙ, өсөнсө төркөмгә эләктек түгелме? Тауышын да күтәрмәй, оҙон- оҙаҡ нотоҡ та уҡымай, беҙ, бейсәләрҙе, урыныбыҙға ҡуйҙы бит был дин әһеле! Быны бит ул диндең көсө ҡайҙа! Мәсеткә белем алыу ниәте менән килгән тәүге көнөмдә үк боронғо яҙыусылар әҫәрҙәрендә һүрәтләнгән күҙҙәре майланып, ҡатын-ҡыҙҙарға ымһынып ҡарап торған муллалар образын талапсан, ҡәтғи, үҙ баһаһын белгән, иғтибарлы, ихтирамлы һәм мотлаҡ үҙ телендә генә һөйләшкән милләтемдең олпат бер вәкиле алмаштырҙы.

Әйе, Сибай ҡалаһының "Тәҡүә" мәсете имам-хатибы Әғләметдин хәҙрәттең ҡалабыҙ өсөн генә түгел, милләтебеҙ хаҡына хеҙмәт иткәнлегенә миҫалдарҙы күп килтерә алам. Ошо йылдар эсендә мәсетебеҙ йылдан-йыл күркәмләнә, унда йөрөп дини ғилем алырға теләүселәр һаны арткандан-арта бара. Әғләметдин хәҙрәт Урал арьяғы райондарының имам-хатибтары менән ихлас эшләй. Оҫта ойоштороусы булараҡ, һәр төрлө дини байрамдарҙы, йолаларҙы һаҡлау буйынса башҡарылған эштәре бихисап Әғләметдин хәҙрәттең. Мәсеттәрҙә Ҡөрьән уҡыу ярыштары булһынмы, балалар өсөн йәйге лагерҙар ойоштороп, әхлаҡ ҡағиҙәләре нигеҙҙәре һалыу эштәре башҡарылһынмы, дини кейем буйынса мода күрһәтеүме, күрше район мәсеттәре өсөн имам-хатибтарға әҙерлек курстары ойоштороуымы, Мәүлит кисәләре, викториналар үткәреүҙәр - барыһы ла уның етәкселегендә уйланылып, еренә еткереп башҡарыла. Хатта гәзит- журналдарға яҙылыу кампанияһы башланған осорҙа ла ситтә тороп ҡалмай имам-хатиб. Үҙебеҙҙең төбәк гәзите "Атайсал"ға яҙҙырыу эштәрендә ярҙам йөҙөнән редколлегия хеҙмәткәрҙәренә мәсеткә килеп, милләттәштәребеҙҙе гәзиткә яҙҙырыу эштәрен ойоштороға ярҙам итә. Йәмәғәт эштәренә лә өлгөрөүенә хайран ҡалырһың тиҙҙән 70 йәшлек юбилейын билдәләргә йыйынһыусы аҡһаҡалдың. Ҡала күләмендә үткәрелгән Еңеү көнө, һабантуй байрамдары, Бөтә Рәсәй һуҡырҙар һәм ғәриптәр йәмғиәте ойошмаһына ярҙам ойоштороу саралары үткәреүгә, халыҡ-ара милләттәр татыулығын һаҡлау өлкәһенә ҙур иғтибар бүлә ул. Динебеҙҙең бөтә нескәлектәрен төплө өйрәнгән Әғләметдин хәҙрәтте тик бер генә маҡсат борсой: ислам динен бөтә төҙөклөгөндә, боҙмай, юғалтмай, һәр төрлө дини ағымдарға инеп китмәй, аҙашмай торған быуын тәрбиәләү, мосолман донъяһының бөтә күркәмлеген халыҡ күңеленә һеңдереү, киләсәк быуынға тапшырыу. Изге уйҙарың тормошҡа ашһын, аҡһаҡал!

**Нәзиә БИКБОВА.**



## 8 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 8 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Познер". [16+]
1.30 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.25 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Испытание". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Полезные новости. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Багровый цвет снегопада". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Озорная молодость". [12+]**
**5.15 "Весело живем". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 9 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 9 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Испытание". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Юлия, ты любовь моя". [12+]**
**5.15 "Весело живем". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 10 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 10 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Сын". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Испытание". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Бала-саға. [6+]**
**0.00 Х/ф "Джек и Джилл: любовь на чемоданах". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 11 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 11 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.25 "Давай поженимся!" [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
15.30 Командный чемпионат мира по фигурному катанию. Прямой эфир из Японии.
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Сын". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Испытание". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 С мотором... [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Учитель на замену". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 12 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
13.30 "Давай поженимся!" [16+]
14.20 "Мужское / Женское". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Мужское / Женское". [16+]
15.30 Командный чемпионат мира по фигурному катанию. Прямой эфир из Японии.
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Д/ф "The Beatles: 8 дней в неделю". [16+]
2.20 На самом деле. [16+]
3.20 "Модный приговор". [6+]
4.15 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Петросян-шоу". [16+]
0.00 "Выход в люди". [12+]
1.20 Х/ф "Иллюзия счастья". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 "Тайны космоса". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/ф "Тропой амурского тигра". [12+]**
**17.00 В круге борцовского ковра. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Орбита 9". [16+]**
**2.15 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.00 Х/ф "Орбита 9". [16+]**

## 13 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Алла Пугачева. "А знаешь, все еще будет..." [12+]
11.15 Д/ф "Алла Пугачева. И это все о ней..." [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Алла Пугачева. И это все о ней..." [12+]
16.50 "Алла Пугачева. Избранное". [16+]
18.30 Д/ф Премьера. "Максим Галкин. Моя жена - Алла Пугачева". [12+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. "Главная роль". [12+]
0.35 Х/ф Премьера. "Кикбоксер возвращается". [18+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]
4.20 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Невезучая". [12+]
13.45 Х/ф "Кто я". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
22.55 Х/ф "Женщины". [12+]
3.00 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 "Большой чемодан. [6+]**
**9.30 Моя вершина. [12+]**
**9.45 С мотором... [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.00 "Городок АЮЯ". [0+]**
**11.15 "Как "Уфанет" создает "Весенний бал". [12+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Легенды Урала". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Х/ф "Не укради". [16+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Плачу вперед". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Х/ф "Не укради". [16+]**

## 14 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20 Т/с "Штрафник". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Подарок для Аллы". [12+]
16.10 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. [0+]
18.35 Премьера. "Подарок для Аллы". Большой концерт к юбилею Аллы Пугачевой.
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
23.45 Премьера. "Русский керлинг". [12+]
0.50 Х/ф "Исчезающая точка". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.35 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 "С днём рождения, Алла!" Юбилейный концерт Аллы Пугачёвой.
14.25 "Откровения мужчин Примадонны". [12+]
15.45 Х/ф "Крёстная". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 Х/ф "Невезучая". [12+]
3.30 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Күстәнәс. [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.30 Байтус. [6+]**
**11.45 "Портрет. Рисуем музыку". [0+]**
**12.00 Бай бакса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Весеннее вдохновение". Концерт. [12+]**
**17.45 Первый турнир Терра Башкирия по конному спорту в честь 100-летия Республики Башкортостан. [12+]**
**18.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байык-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Возвращение в Бургундию". [16+]**
**2.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (3) дүшәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 9 (4) шишәмбе | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 10 (5) шаршамбы | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:37 | 20:07 | 21:37 |
| 11 (6) кесе йома | 4:56 | 6:26 | 13:30 | 18:39 | 20:09 | 21:39 |
| 12 (7) йома | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 18:41 | 20:11 | 21:41 |
| 13 (8) шәмбе | 4:51 | 6:21 | 13:30 | 18:43 | 20:13 | 21:43 |
| 14 (9) йәкшәмбе | 4:49 | 6:19 | 13:30 | 18:45 | 20:15 | 21:45 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Тәнҡит - файҙаһыҙ шөғөл: китапты башҡаларҙы аңлар өсөн түгел, үҙеңде аңлар өсөн уҡырға кәрәк.*

*(Эмиль Сьоран).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТОСТАН УҠЫТЫУСЫЛАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**12-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Белем. Башҡорт. Кәфен. Ҡара. Алмас. Трахеит. Мерәҫов. Алтын. Етмеш. Аҡылы. Код. Таған. Иләү. Аҡын. Шағир. Вова. Омск. Ҡушаева. Әкиәт. Салауат. Ғәбитов.

**Веритикаль буйынса:** Мағазов. Ҡарамышев. Сыра. Бала. Улус. Твен. Бишек. Канва. Даһи. Фәхретдинов. Маска. Мутин. Ата. Түшкә. Лама. Ыҙма. Сөн. Нарат.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 апрель "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+

**10 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**11 апрель "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

**12 апрель "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 апрель "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия

**11 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 0+

**12 апрель "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**12 апрель "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6 апрель "Слоненок"** (Р. Киплинг). 12.00, 14.00 0+

**6 апрель "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 18.00 18+

**7 апрель "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

**7 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

**11 апрель "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 16.00 0+

**12 апрель "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин), спектакль-портрет. 19.00 12+

БАШ ҠАЛАМ

**Һуңғы ваҡытта республикаға килеүсе туристар һаны бермә-бер артты. Күп осраҡта Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ ҡунаҡтарҙың юлындағы тәүге туҡталыш. Баш ҡала үҙенең архитектураһы, төҙөклөгө, төрлөлөгө менән һәр саҡ үҙенә ылыҡтырып тора. Шулай уҡ Өфөлә сәйәхәтселәр өсөн ҡарарлыҡ урындар ҙа күп. Бөгөн ошондай туристарҙың береһе - алыҫ Үзбәкстандан килгән Рөстәм ӘХМӘТОВтан баш ҡалабыҙ тураһындағы тәьҫораттары менән уртаҡлашыуын һораныҡ.**

# ЫҠСЫМ ҠАЛА

Ҡалаға килеп төшкәс тә тәүгә күҙгә салынған һәм мине аптыратҡан күренеш - ҡайһы бер урамдарҙағы трамвай туҡталыштары. Хәйер, уларҙы туҡталыш тип әйтеүе лә ҡыйын, сөнки трамвайҙан кешеләр тура машина йөрөгән юлдарға килеп төшә. Ҡайһы бер водителдәр хатта светофорҙа ҡыҙыл янһа ла, гөжләп үтеп китергә мөмкин, ә туҡтап торған трамвай һәм унан сығыусы балалар, ололар, коляскалы әсәйҙәргә улар бөтөнләй иғтибар итмәйенсә, өҫтәренә килеп менергә мөмкиндәр.

Өфөлә парк, сквер, ғөмүмән, йәшелеккә төрөнгән ял итеү урындарының күп булыуы һоҡландырҙы. Уларҙа шулай уҡ спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлеге лә бар. Мине бигерәк тә "Урмансылар паркы" һоҡландырҙы. Унда бәләкәстәр өсөн уйын майҙансығы ла бар, футбол уйнарға ла мөмкин, саңғы эҙҙәрен дә күрҙем, йүгереп йөрөүселәр ҙә күп осраны. Ҙур ҡала уртаһында шундай урманды һаҡлап ҡала килеүселәргә тик рәхмәт һүҙҙәрен генә әйтергә мөмкин. Алдағы йылдарҙа ла был йәшеллек утрауын күп ҡатлы йорттар, бизнес-үҙәк офистары һәм башҡа таш биналар "йотмаҫ" тип ышанам.

Миңә воркаут менән шөғөлләнгән егеттәрҙең сығышын күрһәттеләр. Сәләмәт тормош алып барыусы, спорт менән дуҫ һәм башҡаларҙы ла үҙҙәренең артынан әйҙәүсе егеттәргә "Афарин!" тиергә генә ҡала. Балаларға һәм йәштәргә ошондай йүнәлеш күрһәтеүселәр күберәк булһын, тип теләге килә. Өфөнөң һәр йорто алдында воркаут өсөн ҡоролмалар ҡуйыу үҙенең ыңғай һөҙөмтәләрен бирмәй ҡалмаҫ.

Миңә ҡаланың һәр районы ҡыҙыҡлы, шуға күрә яйлап йөрөп ҡарап сыҡтым. Алыҫ Инорсҡа ла барҙым. Дуҫым: "Һин килмәһәң, мин был яҡтарға, бәлки, бер ҡасан да килеп етмәҫ инем", - тип көлә. Унда нимәһе күҙгә салынды - район ҙур, йәштәр күп, ләкин уларҙың сауҙа һәм күңел асыу комплекстары ла, кинотеатры ла юҡ икән. Ә шул уҡ ваҡытта бындай үҙәктәр һәм кинотеатрҙар ҡаланың үҙәгендә бер-береһенә терәлешеп тигәндәй ултыра.

Өфө күп милләтле һәм динле ҡала булараҡ, мәсет, сиркәүҙәрҙең күплегенә һәм синагоганың булыуына аптыраманым. Уларҙың һәр береһе айырым музейға тиң. Күркәм һәм мөһабәттәр. Тик Рәсәйҙә иң ҙур мәсеттәрҙең береһе булырға тейешле "Әр-Рәхим" мәсетенең генә һаман төҙөлөп бөтөлмәүенә эсе бошҡан дуҫымды аңлайым. Икенсе килеүемдә унда үткәрелгән йома намаҙына өлгәрмен, тип ышанам.

Музейҙарҙың төрлөлөгө бында йәшәүсе халыҡтың үҙ тарихына, төбәгенә булған ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерәлер, ләкин өс музейға инеп тә унда килеүселәрҙең бик әҙ булыуын күреп, был уларға кәрәкмәйме икән ни, тигән һорау тыуҙы. Шулай уҡ Өфөлә йыл да "Музейҙар төнө" акцияһының үтеүен әйттеләр. Ләкин ул ваҡытта ла музейҙарға инеү түләүле икән. Бәлки, ошондай ваҡытта бөтөнләй буш индереү халыҡты ылыҡтырырға булышлыҡ итер ине? Йылына бер көн музей ҡарарға килеүселәргә бындай бүләк эшләүҙең файҙаһы буласағына шигем юҡ. Беҙҙә, мәҫәлән, ошондай акциялар үткәрелеп тора һәм үҙ нәтижәһен бирә.

Өфө тураһында күп матур һүҙҙәр яҙырға була. Шулай ҙа Башҡортостандың баш ҡалаһы үҙенең ыҡсымлығы менән йәлеп итте. Шулай уҡ кешеләрҙең ихтирамлы булыуы күҙгә ташланды. Ләкин уларҙың йөҙҙәре болоҡһоу икәне лә иғтибарымдан ситтә ҡалманы. Ошондай гүзәллектә, йылғаларға һыйынып ҡына ултырған тау башындағы ҡалала бәхетле кешеләрҙең күберәк булыуын, ә ҡаланың үҙенә артабан да бөтә яҡлап та үҫеш теләйем.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# КИТМӘЙЕМ,

## яңы ижадҡа күсәм

**Республика тамашасыларының һөйөүен яулап өлгөргән Zainetdin псевдонимы аҫтында билдәле Заһир Зәйнетдинов көтмәгәндә генә эстраданан китәсәге тураһында белдергәйне. Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ике йыл эшмәкәрлегенә һығымта яһап уҙғарған концертынан һуң нимә буласаҡ? Артистың киләсәккә пландары тураһында үҙенән һораштыҡ.**

**Шоу проект менән сәхнәгә сығыуыңа нисә йыл булды һәм ни өсөн әлеге ваҡытта уны туҡтатырға ҡарар иттең?**

- ZAINETDIN шоу-проекты менән сәхнәгә сығыуға ике йыл булды, ошо ваҡыт арауығында беҙ 200-ләп концерт ҡуйҙыҡ, 8 илдә булдыҡ. "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән концертты эшебеҙгә һығымта яһау тип ҡабул итәбеҙ, республика буйлап планлаштырылған турҙарым үткәс тә, гастролдәрҙе туҡтатып, яңы йүнәлештә эш башлайбыҙ. Бындай ҡарарға килеүемдең сәбәбе - әлеге эшләгән йүнәлештә маҡсаттарға өлгәштек, хәҙер яңырырға һәм яңы үрҙәр яуларға ваҡыт. Киләсәктә күберәк сит илдәр сәхнәһен яулауға йүнәлтелгән шоу-программа төҙөргә ниәтләйбеҙ һәм төҙә, мөғайын, Европа илдәренә йүнәлербеҙ. ZAINETDIN атамаһы фамилиямдан алынған, күптәр мине был исем менән таный һәм ул ҡалыр, мөғайын. Әммә яңы шоу-программаның атамаһы икенсе төрлө булыр, әлегә уйлайбыҙ. Ә бына эш йүнәлешенә килгәндә, шулай уҡ төрлө музыка ҡоралдары, бейеү, яҡтырткыстар ярҙамында ижад итәсәкмен.

**Социаль селтәрҙәрҙә ZAINETDIN таланттар ҙа эҙләгәйне, был эшмәкәрлектең яңы йүнәлешеме?**

- Эйе, әлеге көндә "Girza music" тигән лейбл астыҡ, үҙебеҙҙең продюсерлыҡ үҙәгендә йәш таланттарға танылыу яуларға ярҙам итәбеҙ. Ҡайҙан үндай уй килде: ваҡытында үҙем шундай продюсерлыҡ үҙәген эҙләгәйнем, республикала булмай сыҡты. Шуға ла хәҙер команда туплап алып, үҙебеҙ әҙерәк аяҡҡа баҫҡас, бүтәндәргә лә ярҙам ҡулы һуҙырға теләйбеҙ. Яңырак онлайн режимында социаль селтәрҙәрҙә һайлап алыу турҙары уҙғарҙыҡ, унда 300-ҙән ашыу кеше ҡатнашты һәм бер нисә һынау үткәреп, шулар араһынан 14 кешене финалға сығарҙыҡ. Финал һынауҙарын уңышлы үтеүселәр менән киләсәктә килешеү төҙәләсәк һәм уларға продюсерлыҡ ярҙамы күрһәтәсәкбеҙ. Әйткәндәй, йәштәрҙе аныҡ ҡына бер йүнәлеш буйынса эҙләмәнек, кемдең ниндәй һәләте бар - барыны ла ҡатнашты. Әлеге көндә йәштәр араһында хип-хоп стиле модала, шуға күптәр нәк шул стилдә йырлай-бейей. Талантлы, тырыш, маҡсатлы йәштәргә ижад итергә, республика ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә билдәлелек яуларға ярҙам итергә теләк ҙур.

**Камилә ҒӘЛИЕВА әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘШТӘРҘЕ ӘРЛӘП...

## ҡаныңды уйнатма

Бай кеше - ул аҡсалы бахыр кеше.

**(Уильям Филдс).**

Ҡомһоҙға бар донъяны бүләк ит - ул уны төрөп алыр өсөн ҡағыҙ таптыра башлаясаҡ.

**(Жюльен де Фалкенаре).**

Ағым ыңғайына йөҙгәндәр бер ваҡытта ла инеш башын күрмәйәсәк.

**(Петер Тилле).**

Тәнҡит - файҙаһыҙ шөғөл: китапты башҡаларҙы аңлар өсөн түгел, үҙеңде аңлар өсөн уҡырға кәрәк.

**(Эмиль Сьоран).**

"Бур!" тип ҡысҡыр - барыһы ла әйләнеп ҡарар, "Кеше!" тип ҡысҡыр, бәрәүҙең дә ҡолағы ла һелкенмәҫ.

**(Влодзимеж Счисловский).**

Аңлы кешене теләһә нимәгә инандырып була, аңһыҙҙы ғына нимәгәлер инандырыуы ауыр.

**(Том Стоппард).**

Йәштәрҙе әрләү - ҡарттар гигиенаһының бер мөһим өлөшө: был уның организмында ҡан уйнауға бик нык ярҙам итә.

**(Логан Смит).**

**Шулай итеп, бер аҡыл: "Ҡала уртаһындағы йорто һүтеп алынған бер ташландыҡ баҡсала ҙур йөҙөм ағасы үҫеп ултыра. Кешеләр йыш ҡына уның эргәһендә туҡтап, емешен өҙөп ҡаба, күләгәһендә ултырып ял итә. Бер саҡ был ағас янына бер ҡарт килеп баҫа ла, уға теклән ҡарап тора. Эргәһенән үтеп барған бер үҫмер, ҡарт емеш өҙөп ала алмай тора икән, тип уйлап, уға ярҙам итмәксе була һәм тиҙ генә ағаска үрмәләп, ҡартҡа йөҙөм өҙөп тоттора. Ҡарт үҫмергә бик ихлаҫлап рәхмәт уҡый, үҙе ағас күләгәһенә ял итергә ултыра. Шул саҡ ағас телгә килә һәм ҡарттан былай тип һорай: "Әйт әле, һеҙ, кешеләр, ниңә һәр ваҡыт берберегеҙгә рәхмәт уҡыйһығыҙ? Ә бына минең емешемде ашаһағыҙ, күләгәмдә ял итһәгеҙ ҙә, миңә берегеҙ ҙә рәхмәт әйтмәй". Ҡарт шулай тип аңлатып бирә: "Ә бит был малай мине шәйләмәй ҙә эргәмдән үтеп китә ала ине. Ләкин ул улай итмәне, ул изгелек эшләүҙе үҙ ирке менән һайланы. Шуға ла ул минең рәхмәтемә лайыҡ булды. Ә бына һин емеш бирергәме, емеш бирмәҫкәме, тигән һайлау алдында тормайһың. Шуға ла кешеләр һинең емешеңде тәмләһә лә, күләгәңдә ял итһә лә, бының өсөн һиңә рәхмәт уҡымай. Улар шулай уҡ был донъяла йәшәүе, күкрәктәрендә йөрәк тибеүе өсөн Хоҙайға рәхмәт уҡырға икәнен дә башына ла индереп сығармай, был шулай тейеш тип ҡабул итәлә..." "Рәхмәт һиңә, аҡһаҡал, - ти ағас, - һин дә минең рәхмәтемә лайыҡһың, сөнки һин минең һорауымды ишеттең. Ә бит ишетмәҫкә лә мөмкин инең бит..."**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ДОНЪЯНЫ ТАҢ ҠАЛДЫРЫП

**"Арғымаҡ" башҡорт этно-рок төркөмө "Күсмәндәр йыйыны" тип аталған Халыҡ-ара этнофестивалдең Гран-приһына лайыҡ булды. Был еңеүҙәре тураһында төркөмдөң етәксеһе Ринат Рамазанов журналистар менән осрашыуҙа һөйләне.**

Арғымаҡтар Сәғүд Ғәрәбстанында беренсе тапҡыр үткән был сараға саҡырылыуҙы былтыр Ҡырғыҙстандағы "Күсмәндәр йыйыны"ндағы еңеүҙәренән һуң ала. "Ғәрәптәргә был фестиваль нык оҡшаған, күрәһең. Улар үҙҙәрендә лә ошондай матур сара ойошторорға теләй. Быйыл ҡырғыҙҙар үҙҙәренең тирмәләре менән Сәғүд Ғәрәбстанына килеп, ҙур майҙанды тултырып, этно ҡаласыҡ булдырған. Унда тирмәләр, ипподромдар, күрғәҙмә майҙансыҡтары, конкурс өсөн ҙур сәхнә, айырым баҙарҙар яһап ҡуйғандар", - ти Ринат Рамазанов. "Арғымаҡ" төркөмөн ҡунаҡ булараҡ сығыш яһарға саҡыралар, әммә бәйге буласағын белеп, егеттәр ярышып ҡарарға теләүҙәрен белдерә. Король Ғәбдул Ғәзиз исемендәге "CAMELFESTIVAL" сиктәрендә Эр-Рияд ҡалаһында була былар. Проекттың ойоштороусыһы булып 3 ил - Сәғүд Ғәрәбстаны, Ҡырғыҙстан һәм Рәсәй тора.

Конкурсҡа бөтөн донъянан 100-гә яҡын коллектив ҡатнаша. Рәсәйҙе Башҡортостан, Татарстан һәм Дағстан күрһәтә. Һәр делегация 5 концерт программаһы әҙерләп алып бара. Башҡорттарҙы иһә урындағы ойоштороусылар һәм тамашасы шул тиклем үҙ итә - уларға көн һайын сығыш яһарға тура килә. Һәм, әлбиттә, һәр композиция алдынан Ринат Рамазанов унда йырланған шәхес, ваҡиға тураһында һөйләп, башҡорт халҡы тарихы менән дә таныштыра.

Әйткәндәй, король үҙе лә музыканттар менән осрашырға теләүен белдерә, әммә арғымаҡтар Башҡортостандың 100 йыллығына бағышланған концертта сығыш яһарға тейеш булыу сәбәпле, был осрашыу булмай. Дағстан бейеүселәре үҙ номинацияһында еңеүсе була. Башҡорт төркөмө музыка номинацияһында иң яҡшыһы тип табыла. 10 мең доллар тәшкил иткән бүләкте арғымаҡтар төркөмдә артабан үҫтереү йүнәлешендә ҡулланырға ниәтләй.

Журналистар менән осрашыуҙың аҙағында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө етәксеһе Ринат Рамазановты "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалы менән бүләкләне.



# ҠУРАЙСЫЛАР ИҒТИБАРЫНА

**Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Ул быйыл Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арнала.**

Ҡатнашыусылар өс йәш категорияһына: 12 йәшкә тиклем, 12 йәштән 16 йәшкә тиклем, 16 йәштән өлкәндәргә бүленәсәк. Уларҙың осталығы 2 турҙа баһалана. Бәйгеселәр оҙон көй һәм ҡыҫҡа көй башҡарырға тейеш. Ниндәй көй башҡарасағын бәйгесе үҙе һайлай ала. Әммә 16 йәштән өлкән һәм ҡурай класы буйынса урта йәки юғары профессиональ белем тураһында дипломы булған айырым башҡарыусылар оҙон көйҙә билет буйынса уйнаясаҡ. Был исемлеккә "Ашҡаҙар", "Һандуғас", "Сибай", "Эскадрон", "Томан" кеүек халҡыбыҙҙың классик оҙон 100 көйө ингән.

Ҡурайсылар ансамблдәре 1 турҙа, 2 йәш категорияһында көс һынашасаҡ. Барлыҡ ҡатнашыусыларға талап: көйҙә яҡшы итеп уйнау ғына түгел, уның тарихын белеү ҙә кәрәк. Фестиваль ҙур концерт менән тамамланасаҡ. Сараның ойоштороусылар - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Октябрьский ҡалаһы хакимиәте, Башҡортостан Республикаһының Ҡурайсылар берлеге.

Ғаризалар 10 майға тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге, тел./факс 8 (347) 289-65-50, электрон адрес: gukrcnt@mail.ru. 452600, Октябрьский ҡалаһы, Чапаев урамы, 23, тел.: 8 (34767) 6-61-22, 6-28-30. Электрон адрес: oktb-kultura@mail.ru. Тукланыу һәм йәшәү мәсьәләләре буйынса Октябрьский ҡалаһына мөрәжәғәт итергә.

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 апрель 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077

Заказ - 273